ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# КискеӨфө

22-28 ноябрь (ҡырпағай) 2024

№46 (1139)

kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуҙа хаҡы ирекле

БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

**Изге эштәргә берләшеп**



6

**Мәғрифәтселек юлында - 30 йыл,**

йәки Мәктәптең ҙур бер ғаиләгә әйләнеүе хаҡында



8-11

**Кинолары Гран-при яулай!**



11

**Рухлы тамаша ул - "Байыҡ"!**



15

@KISKEUFA

Беҙҙең Телеграм каналға рәхим итегеҙ!

смартфон камераһын төбә

*Тормош ҡануны шулай: бер ишек ябыла икән, икенсеһе асыла. Ләкин бөтөн бәлә шунда: беҙ ябылған ишеккә ҡарап тороп, асылғанына иғтибар итмәйбеҙ.*

*(А. Жид).*

ӘЙТЕР ҺҮҘЕМ...

## БЕҘ - 136-СЫЛАР



**Беренсе класта мин Ф. Мостафина исемендәге 20-се Башҡорт гимназияһында уҡыным. Һупайлы биҫтәһенә күскәс, атай-әсәйем мине: "Пушкин лицейҙа уҡыған, был да лицей, унда уҡыһаң, үҙең дә шағир, ҙур шәхес булырһың", - тип, яңы фатирыбыҙ янындағы 136-сы Башҡорт лицейына уҡырға күсергә өгөтләне. Ысынлап та был ҡарар минең яҙмышымды хәл итте лә инде.**

Башланғыс кластарҙа уҡығанда башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы, республиканың атҡаҙанған уҡытыусыһы Нәғимә Хәсән ҡыҙы Вәлиева бер көндө беҙгә шиғыр яҙыу серҙәрен өйрәтте, үҙенсәлекле дәрес үткәрҙе. Шул көндө мин тәүге шиғырымды яҙҙым. "Әсәй миңә ғүмер асҡан", тип башланғайны ул. Шул дәрес мине шиғриәткә алып килде. Һәм мин ҡәҙерле уҡытыусыма бик рәхмәтлемен.

Ғөмүмән, лицейыма, унын эшен юғары кимәлдә ойошторған легендар директорыбыҙ Шәмсулла Хәбибулла улы Хәбибрахмановҡа мин бик тә рәхмәтлемен. Бында бик күп түңәрәктәр, спорт секциялары эшләп килде. Үҙем йырға, баянға, бейеүгә, шиғриәт, журналистика түңәрәктәренә ихлас йөрөнөм, "Мәктәп донъяһы" исемле гәзитебеҙҙе сығарышыуҙа ҡатнаша инем. Тап лицейҙа журналист, яҙыусы булырға тигән теләгем тыуҙы. Бына шулай атай-әсәйемдең әйткәне тормошҡа ашты.

### Йөҙ ҙә утыҙ алтым

*Портфель аҫҡан бала саҡты*
*Ҡосағына алды*
*Беҙҙең Лицей,*
*Беҙҙең "Йөҙ ҙә утыҙ алты".*

*Аҡмулланың бөйөк хәҡиҡәтен*
*Оран итеп алды*
*Беҙҙең Лицей,*
*Беҙҙең "Йөҙ ҙә утыҙ алты".*

*Дөрләп яныр йөрәк усағына*
*Белем ҡуҙы һалды*
*Беҙҙең Лицей,*
*Беҙҙең "Йөҙ ҙә утыҙ алты".*

*Балаһының йәнен ҡурсаланы,*
*Үйламаны ялды*
*Беҙҙең Лицей,*
*Беҙҙең "Йөҙ ҙә утыҙ алты".*

*Белем ҡояшылай бала йәнен*
*Яҡтырталһын,*
*Мәңге шулай балҡысы һин,*
*"Йөҙ ҙә утыҙ алтым"!*

**Алмас ШАММАСОВ,**
Башҡортостан Республикаһы Башлығының өлкән референты, шағир, Ш. Бабич исемендәге дәүләт йәштәр премияһы лауреаты, лицейҙың 2004 йылдағы сығарылыш уҡыусыһы.

(Лицей тураһында 8-11-се биттәрҙә уҡығыҙ).

ИШЕТТЕГЕҘМЕ ӘЛЕ?

## ҠЫҢҒЫРАУ УРЫНЫНА...



**Ноябрҙә Рәсәй Мәғариф министрлығы мәктәптәрҙә "Ҡыңғырау урынына музыка" проектын башлай. Хәҙер ғәҙәти ҡыңғырау урынына популяр көйҙәр һәм классик әҫәрҙәр фрагменттары яңғыраясаҡ.**

Проект илдең бөтә мәктәптәрен үҙ эсенә аласаҡ, ул уҡыусыларҙы музыка мәҙәниәте менән таныштырырға ярҙам итәсәк, тип хәбәр итеlә министрлыҡ сайтында. Ағымдағы уҡыу йылында яңғыраясаҡ көйҙәр билдәле бер иҫтәлекле даталарға бағышлана. Уларҙы Рәсәйҙең төрлө төбәктәренән балалар музыкаль коллективтары яҙҙыра. Мәҫәлән, ноябрҙә Александра Пахмутованың (композиторҙың тыуыуына 95 йыл тулыу хөрмәтенә) йырҙарынан өҙөк буласаҡ. Онлайн-тауыш биреү йомғаҡтары буйынса 400 әҫәрҙән дүрт йыр һайлана: "Орлята учатся летать", "Хорошие девчата", "Надежда" һәм "Трус не играет в хоккей". Декабрҙә Петр Чайковский балеттарынан музыкаль фрагменттар алмаштыра. 2025 йылдың ғинуарынан майға тиклем шылтыратыу көйҙәре илдең тарихи даталарына һәм "Мөһим нәмә тураһында һөйләшеүҙәр" дәрестәре темаларына арнала.

УҠЫУСЫ ФЕКЕРЕ

## КӨТӨП АЛЫНА УЛ

**Мин Сибай интернат-гимназияһында уҡыным. Алыҫ райондан булғас, каникулдарға ғына ҡайта инем. Бүлмәләге ҡыҙҙар Сибай янындағы ауылдан булған класташ ҡыҙға барып йөрөнөк. Ғаиләһендәге өс баланың һәр береһе ял һайын кеше алып ҡайтыуына бер ҡасан да кире һүҙ әйтмәгән, һәр саҡ өҫтәл тултырып һый әҙерләп ҡаршы алған атай-әсәһенә әле булһын һоҡланам. Йә, ярай, һүҙем икенсе хаҡта ине.**



12+

(Дауамы 2-се биттә).

УҠЫУСЫ ФЕКЕРЕ

# КӨТӨП АЛЫНА УЛ

(Башы 1-се биттә).



Дуҫымдың әсәһе ауылдарында почтальон булып эшләне. Һәм нәҡ шәмбе дәрестән һуң уларға ҡайтып төшәбеҙ ҙә, әсәһенә ярҙамлашып, ауыл буйлап гәзит-журнал таратырға сығып китәбеҙ. Ул ваҡытта телефондар ҙа булманы, шулай ҙа халыҡ әллә ҡайҙан күреп, гәзит таратыусыны урамға уҡ сығып көтөп торор ине. Өй һайын тиерлек тиҫтәләгән гәзит-журналдар таратабыҙ, һәр ерҙә лә "почтаны көтөп кенә йөрөй инем әле", тип ҡаршы алалар. Бына ҡайҙа булған ул ваҡытлы матбуғатты яратыу, хөрмәт итеү, йығылып ятып уҡыу.

"Киске Өфө"нө лә таратыу бәхете тейҙе миңә бер генә йыл булһа ла. Баймаҡҡа гәзит әлеге лә баяғы шәмбе барып етә бит инде. Бер көн гәзит-журналдарҙы бүлеп һалып ултырһаҡ, ауылдың икенсе осонда йәшәгән ағай килеп инде. "Киске Өфө" бармы, һеҙ ҡасан беҙҙең осҡа килеп етеүегеҙҙе көтөп ала алмайым, тиҙерәк уҡығым килә", тип гәзитте алып сығып китте. Бына шундай ҙур ылыҡтырғыс көскә эйә гәзит ине ул саҡта, һәм ике тиҫтә йыл ваҡыт үтеүгә ҡарамаҫтан, бөгөн дә иң көтөп алынған баҫма ул "Киске Өфө".

Шәхсән минең өсөн был баҫманың әһәмиәте нимәлә? Унда баҫылған мәҡәләләрҙең һәр береһе актуаль, тәрән мәғәнәле, ниндәйҙер фекер уятыусы, ҡайһы саҡта оҙаҡ ваҡыт осона сыға алмайынса уйланып йөрөгән уйҙарҙы таратып ебәрер көскә эйә.

Гәзиттең тағы ла бер үҙенсәлеге - халҡыбыҙ өсөн мөһим, актуаль хәбәр һәм мәғлүмәтте ҡыҫҡа, тос, аңлайышлы итеп бирә белеүендә. Һәм тағы ла шуны ла билдәләп үтергә кәрәктер: "Киске Өфө" республикала йәшәгән милләттәштәребеҙ донъяһын ғына яҡтыртмай, ә Башҡортостандан ситтә йәшәүселәр тураһында ла әүҙем яҙа, уларға ҡағылышлы яңылыҡтарҙы яҡтыртып бара.

"Киске Өфө" - традицияларыбыҙҙың һәм ғаилә ҡиммәттәренең мөһимлеген һәр ваҡыт һыҙыҡ өҫтөнә алған, уларҙың әһәмиәте тураһында һөйләгән баҫмаларыбыҙҙың береһе. Ғаилә институты, атай-әсәй һәм балалар, ир менән ҡатын араһындағы мөнәсәбәт, ғөрөф-ғәҙәт һәм йолаларҙы белеү һәм ихтирам итеү - һәр йәмғиәттең ныҡлы нигеҙен тәшкил итеүсе факторҙар. Ошо хаҡта матур һәм йөкмәткеле итеп һөйләүсе гәзитебеҙ - "Киске Өфө"бөҙ булыуы менән ғорурлана, үҙебеҙҙе бәхетле тип әйтә алабыҙ.

**Миңзифа ИШҠОЛОВА.**
**Йылайыр районы.**

БЫНАҒАЙЫШ!

**Урамдағы, йәшәгән йортоғоҙ алдындағы машиналар теҙмәһенә күҙ һала йөрөйһөгөҙҙөр, моғайын: ниндәй генә маркалар юҡ! Бер заман хатта беҙҙең подъезд алдына шулар араһында әлегәсә булмаған бейек, күрмәлекле, ғорур һауа ҡошона оҡшаған "Лексус" килеп ҡунаҡланы хатта.**

# МЕРСЕДЕС КИРЕ ҠАЙТЫРМЫ?



Балалар коляскаһы менән түгел, яңғыҙ йәйәүлегә лә йырып сығыуы ауыр булған был машиналар парадына ҡарап, берсә һөйөнәһең, берсә көйөнөргә мәжбүрһең. Беренсенән, береһенән-береһе текәрәк иномаркалар алырға хәлдәренән килгәс, тимәк, халыҡ насар йәшәмәй. Икенсе яҡтан, бөгөн автоһәүәҫкәрҙәр үҙ теләктәре менән ошо иномаркалар "тоҙағына" килеп эләгеүҙәрен аңғармай ҙа ҡалалар. Йәки аңғарһалар ҙа, күрәләтә, бер нәмәгә ҡарамаҫтан, фәҡәт иномарка йөрөтөргә теләйҙәр: был мәртәбәлерәк тә, эйе, шул уҡ ваҡытта сит ил продукцияһының сифат мәсьәләһе лә йәлеп итәлер. Ә ватан автопромын күтәрмәләү кеүек илһөйәрлек ынтылышы ҡоро һүҙ генә булып ҡала.

Эйе, бөгөнгө заманда кешелек ҡиммәттәре "натуралата" - матди байлыҡ, аҡса, текә иномарка, зиннәтле коттедждар менән алмашынғанда, ватан машинаһына ултырып йөрөү, йомшаҡ итеп әйткәндә, ғәрлек булмаһа ла, меҫкенлек тип ҡарала торғандыр. Шуға ла ҡиммәтле машиналар килтереп тыуҙырған проблемаларға һәм талаптарға яраҡлашырға тура килә рәсәйҙәргә. Әлеге ваҡытта машиналарҙы техник хеҙмәтләндереү ауырлаша бара, ти Fit Service халыҡ-ара автосервистар селтәре вәкилдәре. Запас частар баҙарында ялған продукция күбәйә икән. Аналитик агентлыҡтар хәбәр итеүенсә, автосервистарҙың 40 проценты ошо йәһәттән зарланһа, автомеханиктарҙың 37 проценты үҙ эшендә ялған деталдәргә осрауы хаҡында белдерә. Ул ғына ла түгел, һорау алыуҙарҙа ҡатнашҡан кешеләрҙең 54 проценты - сифатһыҙ, тимәк, ялған яғыулыҡ-майлау материалдарына, 35 проценты - фильтрҙарға, 33 проценты ҡабыҙыу шәмдәренә, 19 проценты башҡа төр деталдәргә ҡарата ризаһыҙлыҡ белдергән. Баҡтиһәң, ялған продукция сығарыусылар билдәле брендтарҙы күпләп етештерә, хатта ҡиммәтле һаҡлау элементтары булған голограммаларҙы, сифатлы канистралар һәм ҡумталарҙы шундай итеп эшләй, уларҙы хатта күпте күргән автоһәүәҫкәрҙәр ҙә төп нөхсәнән айыра алмаҫҡа мөмкин икән. Шуға күрә ремонт һәм машина деталдәрен алмаштырыу, машина майы, техник шыйыҡлыҡтар менән бәйле эштәрҙе сертификацияһы булған автосервистарҙа ғына башҡарырға тәҡдим итәләр.

Был урында шул да мәғлүм булһын: ошо көндәрҙә РФ Дәүләт Думаһы ОСАГО хаҡындағы Федераль законға ошо төр страховка буйынса иң сикке ремонт ваҡытын 30-ҙан 45 тәүлеккә тиклем оҙайтты. Сәбәбе - сит ил запчастары менән тәьминәттәге проблемалар. Әлеге ваҡытта, мәғлүм булыуынса, ай эсендә автомобилде ремонтлап өлгөрмәһәләр, сервис - страховкалау компанияһы алдында , ә уныһы, үҙ сиратында юл-транспорт ваҡиғаһында зыянланған автомобиль хужаһы алдында яуап тота.

Яңы автомобилдәргә ҡағылышлы проблемаларҙың береһе - уларға хаҡтарҙың артыуы. Уның сәбәптәре аңлашыла: һумдың осһоҙланыуы, Үҙәк Банк ставкаһының артыуы һәм, өҫтәүенә, ошо йылдың 1 октябренән утилләштереү йыйымының 85 процентҡа арттырылыуы. Киләһе йылдың 1 ғинуарынан иһә уның икенсе этабы - 10-20 процентҡа индексациялау көтөлә Шулай итеп, быйыл 2 литрға тиклемге двигателле автомобилдәргә утиль һалымы өсөн... 556 мең һум сығарып һалырға кәрәк булһа, киләһе йылдан - 667 мең, ә 3 литрға тиклемге техсара өсөн ҡеүәтле, текә машина яратыусылар 1 563 000 - 1 875 600 һум "ғына" түләйәсәк.

Әйткәндәй, Рәсәй Банкының төп ставканы 21 процентҡа күтәреүе автокредит бәкәләнә килтереп һуҡты. Етештереүсенең субсидия программаһын иҫәпләмәгәндә, ысынбарлыҡта автокредит ставкаһы 25-30 процент тәшкил итә, тип белдерә эксперттар һәм шундай миҫал килтерә. Әйтәйек, 2 млн самаһы торған Chery Tiggo 4 Pro өсөн тәүге 500 мең взнос менән 5 йылға ай һайын 60 мең сығарып һалғанда ла кредитҡа түләнгән дөйөм сумма... 3,5 млн тәшкил итәсәк. Тәү түләнгән 500 мең взносты ла ҡушып иҫәпләһәң, әллә ни "текә" иҫәптә тормаған "Tiggo"ның хаҡы 4 миллионға барып етәсәк. Әлбиттә, тип йыуата был өлкәлә балыҡ кеүек "йөҙгән" белгестәр, ысынында баҙар ниндәйҙер тигеҙлек, баланс эҙләргә һәм уны булдырырға тырышасаҡ; айырыуса етештереүселәр үҙ продукцияһына һорауҙы һаҡларға тырышып, хаҡтарҙы йүгәндә тоторға тырышасаҡ, ләкин бөгөнгә күренеш бына шундай.

Уның ҡарауы, йыл башынан алып ноябргә тиклем автосауҙа эше гөрләп барҙы һәм ошо осор эсендә бөтәһе 1 162 277 яңы автомобиль һатылған. Ә илдә бөтәһе 50 миллиондан ашыу машина бар. Әле иһә халыҡ яңы хаҡтарға күнегә төшөргә тейеш һәм һәр хәлдә декабрь аҙаҡтарына баҙар үҙ ҡеүәтен ҡайтарасаҡ, ти эксперттар. Машинаға, һалым түләүе һәм хеҙмәтләндереү хаҡтары артыу менән бәйле ҡайһы бер белгестәр белдереүенсә, 2025 йылда автомобиль байлыҡ, зиннәтле милеккә әйләнәсәк. Шул уҡ ваҡытта Рәсәйҙә автомобиль менән файҙаланыу ваҡыты 10-15 йыл, ләкин кемдәрҙер уны яңыртырға теләһә, ә яңыны алырға хәленән килмәһә, икенсел автобаҙарға мөрәжәғәт итергә мәжбүр.

Үкенескә, Рәсәйҙең икенсел файҙаланыу автопаркы ла төшөнкөлөк осоро кисерә, ул ярайһы иҫкерҙе, ти белгестәр. Һайлау мөмкинлеге кәмей бара, иғтибарға лайыҡ маркалар һирәк осрай. Ә бына Yolkswagen Polo, Hyundai Solaris кеүек "халыҡ маркалары" оҙаҡ ҡына тотонолған хәлдә лә ихтыяж менән файҙалана, сөнки улар сыҙам, сифатлы һәм уларҙы ремонтлау өсөн запчастар проблема түгел - һөҙөмтәлә һаҡсыл хужа был машинаның "ғүмерен" тағы байтаҡ йылға оҙайта ала.

Тотонолған авто ала алмаған кеше етештереүсенең автокредит программаһы иҫәбенә бер аҙ арзаная төшкән Ҡытай машиналарына иғтибар итәсәк. Дөрөҫ, күптәр был сегментҡа ышаныс белдермәй, сөнки уларҙы ремонтлау мәшәҡәттәре оҙаҡҡа һуҙыла, Рәсәйҙәге көслө һыуыҡтарҙа яңы моделдәргә ҡуйылған сенсорлы экрандары эшләмәй, юғары октанлы бензинды күп "ашай" һ.б.

Әйткәндәй, ошо көндәрҙә һүҙ ҡуйыртылыуынса, немец автобрендтарынан Mercedes, BMW, Audi һәм Volkswagen машинадарының, Японияның Honda, Suzuki, Mazda, Mitsubishi һәм Nissan маркаларының, шулай уҡ Көньяҡ Корея машиналарының Рәсәйгә кире ҡайтыуы көтөлә. Ләкин РФ Президентының матбуғат секретары Д.Песков белдереүенсә, был мөмкин тип ҡаралған хәлдә лә улар тарафынан рәсми тәҡдимдәр булманы, шуға күрә әлегә был хаҡта һүҙ ҡуҙғатыу иртәрәк. Ә инде Германияның консалтинг компанияһы етәксеһе Ульф Шнайдер, Германия автопромына тиҙерәк Рәсәй баҙарына ҡайтып, Ҡытай маркаларын һатып алыусыларҙы үҙебеҙгә йәлеп итергә кәрәк, юғиһә, беҙ Рәсәй баҙарын тиҫтәләрсә йылға юғалтасаҡбыҙ, тип белдерә Berliner Zeitung гәзитенә интервьюһында. Эйе, үҙҙәренә кәрәк булғанда эште бик тиҙ генә үҙ файҙаларына бороп ебәрә ала улар. Д.Песков белдереүенсә, ил етәкселеге Рәсәй автобаҙарында ҡытай, япон һәм немец брендтары араһында килеп тыуасаҡ көнәркәшлекте хуплай, сөнки был хаҡтарҙың кәмеүенә килтерәсәк. Рәсәйҙәр аҙыраҡ түләп, сифатлы машиналы булһындар өсөн дәүләт бөтәһен дә эшләйәсәк, шул уҡ ваҡытта ватан етештереүселәрен дә онотмаясаҡ.

**Фәүзиә ИҘЕЛБАЕВА.**

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✔Радий Хәбиров етәкселегендәге республика делегацияһы Мәскәүҙә XVIII "Рәсәй транспорты" халыҡ-ара форумында ҡатнашты. Форум күргәҙмәһе 3,9 мең квадрат метр майҙанды биләй, унда алдынғы транспорт компаниялары араһынан 125 экспонент үҙ проекттарын тәҡдим итте. Сараның төп темаһы - "Һөҙөмтәле транспорт системаһы. Төп элементтар". Власть вәкилдәре һәм тармаҡ лидерҙары киҫкен проблемаларҙы һәм яңы проекттарҙы, шул иҫәптән Рәсәй Президентының илдең транспорт инфраструктураһы киләсәген билдәләргә тейешле һуңғы башланғыстары тураһында фекер алышты.

✔Өфөгә эш сәфәре менән Алтай Республикаһы Башлығы, ошо төбәктең Хөкүмәт рәйесе Андрей Турчак килде. Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров һәм мәртәбәле ҡунаҡ Өфө радиоэлектроника, телекоммуникациялар һәм хәүефһеҙлек колледжында булды. Улар колледжда эшләп килгән янғын һүндереүселәр һәм ҡотҡарыусылар әҙерләү үҙәгенең эше менән танышты, "Профессионалдар - 2024" төбәк чемпионатында ҡатнашыусылар һәм студенттар менән осрашты, уларҙың башланғыстарын һәм социаль проекттарын ҡараны.

✔Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров Хөкүмәттең оператив кәңәшмәһендә Алтай делегацияһының эш сәфәренә йомғаҡ яһап, Таулы Алтай ҡалаһына тура рейс асырға кәрәклеге тураһында белдерҙе. "Тәү сиратта туризм, ауыл хужалығы, мәҙәниәт, спорттың милли төрҙәре буйынса хеҙмәттәшлек итеүҙе планлаштырҙыҡ. Авиарейс буйынса килешеүгә ҡул ҡуйҙыҡ. Беҙҙең туристар унда барыр тип уйлайым, сөнки Алтай Республикаһы - тарихы һәм мәҙәниәте, тәбиғәте яғынан үҙенсәлекле төбәк", - тине Радий Хәбиров.

✔Башҡортостан һәм Алтай Республикаһы парламенттары хеҙмәттәшлек тураһында килешеү төҙөй. Уның тексы Башҡортостан Дәүләт Йыйылышында раҫланған. Закон проекттары, аналитик һәм методик материалдар менән алмашыу, уртаҡ конференциялар үткәреү, комиссиялар һәм эшсе төркөмдәр ойоштороу, ике республика араһында эшлекле бәйләнештәрҙе үҫтереү планлаштырыла.

✔Республиканың эшҡыуарлыҡ һәм туризм министры вазифаһын башҡарыусы Зөһрә Гордиенко Башҡортостандан госпиталдәрҙә дауаланған Махсус хәрби операция яугирҙарына ярҙамға юлланған ҡатын-ҡыҙ ирекмәндәрҙең тәүге төркөмө ҡайтыуы тураһында хәбәр итте. Ул шулай уҡ әлеге ваҡытта яугирҙарға ярҙам күрһәтеүгә тәғәйенләнгән яңы состав туплаңыуы хаҡында ла әйтте.

*ДОНЪЯ ШАҢДАУЫ*

# АМЕРИКАНЫҢ ИКЕ ЙӨҘӨ

**Донъяның иғтибар үҙәгендә - Рәсәй-Украина конфликты һәм ошоға бәйле АҠШ-тың яңы һайланған президенты Дональд Трамптың һайлау алды программаһында конфликтты хәл итеү буйынса биргән вәғәҙәһенең әле һаман урынынан ҡуҙғатыла алмауы.**



Беҙҙә, вәғәҙә - иман, тиһәләр ҙә, был әйтемгә океан аръяғында ниндәй ҡараштә торалар ҙыр, һәр хәлдә, был осраҡ ҡыҙыулыҡ менән ашығыс рәүештә вәғәҙә бирергә ашыҡмауҙың хәйерлерәк икәне, тәүҙә мәсьәләне төрлө яҡлап анализлау кәрәклеге хаҡында һөйләүсе бер һабаҡ булды. Өҫтәүенә, АҠШ-тың ғәмәлдәге власть хакимиәте НАТО-ның башҡа илдәре менән берлектә күрәләтә яңы президентҡа ҡаршы эшләй һәм Трамптың инаугурацияһынан алда Украинаға мөмкин тиклем күберәк ярҙам сараларын ебәреп ҡалырға тырыша. Әмәлгә ҡалғандай, Украина президенты Зеленский ҙа, Рәсәй көстәре тарафынан Киевтың хәрби объекттары утҡа тотолғандан һуң көнбайыш партнерҙарынан ярҙамды тиҙләтеүҙәрен һорай.

Шуныһы ғәжәп: АҠШ-тың киң мәғлүмәт саралары Украина - Рәсәй темаһына "интонацияһын" ҡырҡа үҙгәртте. NEW YORK TIMES (NYT) гәзите ошо көндәрҙә Украинаның юғары даирәләге чиновниғы һүҙҙәренә һылтанып яҙып сығыуынса, килешеү ихтималлығы булған һөйләшеүҙәрҙә Киев өсөн "хәүефһеҙлеккә гарантия территория мәсьәләһенә ҡарағанда мөһимерәк" буласаҡ. Америка телеканалы CNN иһә Рәсәй Ҡораллы көстәренең уңыштарын таныуы хаҡында хәбәр итте: "Бөгөн фронт һыҙығында инициатива рустар ҡулында, улар үҙҙәренең тактик ҡаҙаныштарын уңышлы файҙаланып, нығыта баралар", - тип сығыш яһаған телеканал тапшырыуында Һуғышты өйрәнеү институты (ISW) вәкиле Джордж Баррос. Бынан алдараҡ Украина генерал-полковнигы Дмитрий Марченко Украина Ҡораллы көстәренең ҡаҡшауы хаҡында белдергәйне. Уның фекеренсә, быға личный составтың йонсоуы һәм резервтарҙың етешмәүе сәбәпсе.

Дональд Трамп һәм уның вәғәҙәһенә ҡарата FINANCAL TIMES (FT) гәзитенең фекере лә ҡыҙыҡлы: Дональд Трамп үҙенең вәғәҙәһен үтәй алмауы, йәғни конфликтты тамамларға хәленән килмәүе өсөн ғәйепте Украина лидеры Зеленскийға ауҙарыуы ихтимал, тип яҙа гәзит. "Трамп тыныслыҡ илсеһе ролендә уңышһыҙлыҡҡа осрауын Зеленскийҙың килешеүгә барырға теләмәүенә япһарырға мөмкин",- тип әйтелә абруйлы баҫма мәҡәләһендә. Унда тағы ла Трамптың һуғыш яланында Киевтың уңыш ҡаҙаныуын көтөп алырға түҙемлеге етмәй, Украинанан баш тартасағы һәм, Рәсәйҙең еңеүен тәьмин итергә булышлыҡ күрһәтеп, конфликттың тамамланыу ихтималлығына ишара яһала.

Әйткәндәй, АҠШ президентын һайлауҙарҙа Трамптың еңеүе ҡайһы бер "дуҫ булмаған" илдәрҙең Рәсәй менән бәйләнеш эҙләүҙәренә сәбәпсе булды кеүек. Ләкин быны һис тә туранан-тура Трамп иҫәбенә "мәрәй" тип аңларға түгел, ә Рәсәйҙең ниндәй генә халыҡ-ара шарттарҙа ла үҙ йөҙөн һаҡлап ҡала алыуы, санкцияларҙан, киреһенсә, артыҡ зыян күрмәйенсә, үҙ юлынан барыуы, теләһә ниндәй илдәр менән дә хеҙмәттәшлеккә һәм аңлашыуҙарға асыҡ булыуы йәлеп итә торғандыр "дуҫ булмағандарҙы". Мәҫәлән, Новости Рәсәй агентлығы Япония парламенты депутаты Мунэо Судзукиның һүҙҙәрен еткерә: "Мин Японияның Рәсәйгә ҡарата курсы үҙгәрәме, юҡмы тип түгел, ә ошо курсты үҙгәртеү кәрәклеге хаҡында әйтәм. Әгәр үҙгәртмәйбеҙ икән, Японияға көн бөтәсәк. Бынан алдағы премьер Фумио Кисиданың Рәсәйгә ҡарата Америка президенты Байден ниммә ҡушһа, шуны эшләүе хата булды". "Валдай" форумында РФ Президенты Владимир Путин Япония менән хеҙмәттәшлеккә Рәсәйҙең ҡаршы түгеллеген белдерҙе. 15 ноябрҙә Германия канцлеры Олаф Шольцтың да ике йыл эсендә тәүге тапҡыр Владимир Путин менән бер сәғәткә яҡын телефон аша һөйләшеүе ике илдең яҡынайыуға йүнәлеш алыуы хаҡында һөйләй булыр.

Әммә Европа Украина конфликтының дауам итеүе өсөн сығыш яһауҙы дауам итә. Евродипломатияның яңы башлығы, йәне-тәне менән русофоб Кая Каллас белдереүенсә, "Украинаның еңеүе беҙҙең өсөн өҫтөнлөккә эйә. Һуғыш яланында хәл ҡатмарлы, ләкин беҙ Киевҡа күпме кәрәк, шунса ярҙам итергә тейешбеҙ", - ти. Ә Берлин бындай сәйәсәткә ҡырҡа ҡаршы. "Минең яуап - юҡ!" - ти канцлер Олаф Шольц. АҠШ менән НАТО властары ла аҫтыртын рәүештә үҙ эштәрен башҡарып ҡалмаҡсы: ошо араларҙа улар Рәсәй сигенән 165 км алыҫлыҡтағы Польшаның Редзиково ҡалаһында Ракетаға ҡаршы оборона комплексы булған Америка хәрби базаһын асты. Аҡылын юйған Джо Байдендың, имеш, Украинаға Америка ракеталары менән Рәсәй биләмәләренә һөжүм итергә рөхсәтен Трамп командаһы яңынан ҡарауғын белдерә.

**Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА.**

*ӘЙТӘГҮР!*

# ЯҠТАШТАР...

## атайсалға ҡайта

**Һорау: "Атайсал" проектының төп әһәмиәтен ниҙә күрәһегеҙ?**

***Гөлсөм Хисаметдинова, Мәләүез районы:*** Бөгөн "Атайсал" - республиканың барлыҡ төбәктәрендә киң ҡолас алған ҙур проект. Изге йөрәкле, ярҙамсыл, йәнтөйәген яратҡан кешеләрҙең социаль әһәмиәтле объекттар төҙөүгә, булғандарын ремонтлауға, мәктәптәргә, балалар баҡсаларына, мәҙәниәт йорттарына, ауыл китапханаларына ярҙам итергә ең һыҙғанып тотонғанын күреп, күңел шатлана. Бына бөгөн Ейәнсура еренә тап шундай атайсалын яратҡан, тыуған ерен матурлауға, яҡташтары тормошон йәмләүгә үҙ өлөшөн индергән, ошо йүнәлештә уңыштарға өлгәшкән кешеләр йыйылған. Бында килгәндәрҙең барыһын да бер маҡсат, бер уй берләштерә - Ватанды һөйөү. Ошо илһөйәрлек хисе бөгөнгө заманда бигерәк тә кәрәк бит. "Атайсал" проектының төп идеяһын ошо изге уйлы, илен, халҡын һөйгән кешеләрҙе берләштереүҙә күрәм.

Ейәнсурала үткән форумдың 8 секцияһының береһе Башҡортостандың бренд сараларын булдырыу һәм үҫтереүгә арналғайны. Секция ултырышы бик фәһемле үтте. Ысынлап та, бренд - территорияларҙы социаль-мәҙәни үҫтереүҙең һөҙөмтәле ысулдарының береһе булып тора. Тап шуға күрә брендтың, төбәк мәҙәни брендының төп характеристикаларын өйрәнеү бөгөн көнүҙәк мәсьәлә, бында төп шарт - төбәктең тарихи-мәҙәни ваҡиғаларына, урындағы йолалар һәм традицияларға таяныу. Быларҙың барыһы ла "Атайсал" проектының айырылғыһыҙ бер өлөшө, шуға күрә ошо йүнәлештә тырышып эшләргә кәрәк, тип уйлайым.

***Салауат Байғабулов, Хәйбулла районы:*** "Атайсал" проекты беҙҙең Хәйбулла районында ла күп яҡташтарҙың изге бурысына әйләнде. Был бик әһәмиәтле, кәрәкле проект икәнлеге тәүге йылда уҡ иҫбат ителде. Тап ошо "Атайсал" проекты уларға күптән күңел түрендә ҡуҙланып ятҡан башланғыстарҙы, мәҫәлән, кендек ҡаны тамған, тәүгә тәпәй баҫҡан ергә нисек ярҙам итергә тигән уйҙарын бойомға ашырырға булышлыҡ итте. Быуылып ятҡан йылға кеүек булды бит ул. Йырып ебәреү генә кәрәк булды. Теге йәки был ауылда, ҡалала йәшәгәндәр генә түгел, яҙмыш ҡушыуы буйынса сит тарафтарға төпләнгән, әммә күңелдәре менән тыуған төйәгенә бәйле кешеләр ҙә проектҡа ҡушылды һәм яҡташтары, туғандары тормошон уңайлыраҡ, яҡшыраҡ итеү өсөн көс һалды. Уныһынан да бигерәк, проекттың тағы бер әһәмиәтле яғы бар - яҡташтар онотолоп барған тыуған төйәккә һуҡмаҡтарын яңынан тергеҙҙе. Яҡын кешеләре менән туғанлыҡ ептәрен нығытты, класташтары, уҡытыусылары менән бәйләнеш булдырҙы.

***Гөлсәсәк Иғдәүләтова, Йылайыр районы:*** "Атайсал" проекты республика халҡына ғына түгел, сит өлкәләрҙә, ҡалаларҙа йәшәгән яҡташтарыбыҙ өсөн дә бик әһәмиәтле. Унда ҡатнашыу өсөн күпме яҡташтарыбыҙ үҙенең тыуған төйәге, районы менән тығыҙ бәйләнеш, хеҙмәттәшлек булдырҙы. Яҡташтарыбыҙҙың ярҙамы элек тә була торғайны. Теге йәки был районда, ауылда, ҡалала мәсеттәр, ҡорамдар, ғибәҙәтханалар, балалар майҙансыҡтары төҙөүҙә ҡатнашҡан, шишмәләрҙе тергеҙгән, зыяраттарҙы кәртәләгән кешеләр тураһында ишетеп тә, күреп тә йөрөй торғайныҡ. "Атайсал" проекты шундайҙарҙың эшен системаға ғына һалды. Һәм бик ваҡытлы тип уйлайым. Бөгөн был проектта республика халҡынан тыш, илебеҙҙең егерменән ашыу төбәгендә йәшәгән меценаттар ҡатнаша, улар араһында Яҡут Республикаһы, Ханты-Манси автономиялы округы, Мәскәү, Санкт-Петербург, Сочи ҡалаларында йәшәгән яҡташтарыбыҙ бар. Бына бөгөн Ырымбур өлкәһенән дә килгәндәр. Секция ултырыштарында уларҙың сит тарафта ниндәй ҙур эш алып барғанын барыһы ла ишеткәндер.

**(Форум тураһында 6-сы биттә уҡығыҙ).**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Салауатта ҡала советы депутаттарының өсөнсө ултырышында яңы мэр һайланды. Етәксе итеп хакимиәт башлығының йәшәйеште тәьмин итеү мәсьәләләре буйынса урынбаҫары Альберт Моталов тәғәйенләнде. Билдәле булыуынса, 45 йәшлек чиновник Салауат ҡалаһында тыуған. Ырымбур дәүләт университетының юридик факультетын, Рәсәй Президенты ҡарамағындағы Рәсәй халыҡ хужалығы һәм дәүләт хеҙмәте академияһын тамамлаған. Хәбәр итеүенсә, Салауат ҡалаһының элекке мэрын суд ҡарары көтә.

✓Башҡортостан Дәүләт Йыйылышы Рәсәй субъекттарының 33 закон сығарыу органы, шул иҫәптән Донецк һәм Луганск халыҡ республикалары менән партнерлыҡты үҫтерә. Республика парламенты рәйесе Константин Толкачев һүҙҙәренсә, бындай хеҙмәттәшлек күп өлкәләрҙә төбәк-ара бәйләнештәрҙе нығыта, депутаттарға тәжрибә уртаҡлашырға мөмкинлек бирә. Бынан тыш, бергәләп федераль кимәлдә үҙ позицияңды яҡлауы еңелерәк.

✓Махсус хәрби операция биләмәһендә күрһәткән ҡыйыулығы һәм ҡаһарманлығы өсөн полковник Андрей Колпаков үлгәндән һуң "Рәсәй Геройы" исеме менән бүләкләнде. Сентябрҙә, дошмандың терәк пунктын тар-мар итеп, уның етәкселегендәге төркөм оборонаны өҙөүгә юл ҡуймай, ләкин ракета һөжүменә дусар була. Андрей Колпаков иптәштәрен окопҡа этеп индереп ебәрә, ә үҙе ике егетте кәүҙәһе менән ҡаплап, уларҙың ғүмерен ҡотҡарып ҡала.

✓Краснокама районының Николо-Березовка ауылында Махсус хәрби операцияла ҡатнашыусыларға арналған һәйкәлгә тантаналы рәүештә нигеҙ ташы һалынды. Унда хәрби хәрәкәттәр ветерандары һәм һәләк булған геройҙарҙың туғандары ҡатнашты. Район хакимиәтенең мәғлүмәт-аналитика секторы мөдире Зәлиә Ғәлиева хәбәр итеүенсә, һәйкәл ҡуйыу башланғысы менән муниципалитет башлығы Алексей Горбачёв сығыш яһаған.

✓"Медиалогия" компанияһы 2024 йылдың өсөнсө кварталында иң күп өҙөмтә килтерелә торған мәғлүмәт саралары рейтингын төҙөгән. Тикшереү өсөн "Медиалогия" системаһына ингән 92 меңдән ашыу сығанаҡ: ТВ, радио, гәзит-журналдар, мәғлүмәт агентлыҡтары, интернет-киң мәғлүмәт саралары алынған. Рейтингтың тәүге баҫҡысында - "Башинформ" мәғлүмәт агентлығы (өҙөмтә килтереү индексы 56,67). Икенсе урында - Mkset.ru (45,54), артабан Ufatime.ru килә (39,16), дүртенселә - РБК (35,24), бишенселә иһә БСТ телеканалы (54,60).

✓ Башҡортостан Башлығы шулай уҡ республикаға яңы мәктәптәр һәм балалар баҡсалары төҙөү өсөн федераль ҡаҙнанан аҡса аласағын хәбәр итте. Өфөлә 360 урынлыҡ математика лицей-интернаты өсөн 2,4 миллиард һум бүленә.



ҠЫҪҠАСА

# ГАЗ ҮТКӘРҘЕҢМЕ ӘЛЕ?

**Башҡортостан Башлығы Радий Хәбировтың ҡушыуы буйынса 2019 йылдан республикала йәшәүселәр йортҡа газ үткәреү өсөн сертификат алырға мөмкин.** Төҙөлөш һәм архитектура министры урынбаҫары Александр Борисов белдереүенсә, сертификат менән 10 790 кеше файҙаланған, ә сертификаттарҙың дөйөм суммаһы 898,63 миллион һум тәшкил иткән. Уларҙы Бөйөк Ватан һуғышы ҡатнашыусылары һәм инвалидтары, Махсус хәрби операция яугирҙары, һаулыҡ мөмкинлектәре сикләнгәндәр, инвалид бала тәрбиәләгән ғаиләләр, килеме түбән булған ишле ғаиләләр һәм граждандарҙың башҡа льготалы категориялары алырға мөмкин. "Программа шарттары буйынса, республикала даими йәшәргә кәрәк, үҙ йортоң йәки йорттоң милек хоҡуғында өлөшөң булырға тейеш", - тип билдәләне тура бәйләнеш ҡунағы. Белеүегеҙсә, 2023 йылдың 1 ғинуарынан сертификат хаҡы 100 мең һум тәшкил итә.

✓ **Өфөлә "Берҙәм Рәсәй" партияһының Башҡортостан төбәк бүлексәһе конференция үткәрҙе. Унда партияның Генераль советы секретары вазифаһын ваҡытлыса башҡарыусы, Федерация Советы рәйесенең беренсе урынбаҫары Владимир Якушев ҡатнашты.** "Башҡортостан бүлексәһендә 2025 йыл Урындағы сәйәси советтар йылы итеп иғлан ителәсәк. Бындай советтар партия командаһын йыйыу нөктәһенә әйләнәсәк. Был бөгөн көнүҙәк. Улар урындарҙа эште ойоштороу өсөн төп майҙансыҡ булырға тейеш. Был эште сифатлыраҡ атҡарыу мөмкинлеген бирәсәк", - тине ул. Владимир Якушев республикала юғары партия мәктәбенең филиалы эшләй башлаясағы тураһында хәтергә төшөрҙө. Был - төбәк өсөн кадрҙар әҙерләүҙә яңы алым. Партияның төбәк бүлексәһе секретары Радий Хәбиров партияның барлыҡ башланғыстарының, проекттарының ил иҡтисадын, уның оборона ҡеүәтен нығытыуға, Махсус хәрби операциялағы хәрбиҙәргә ярҙам итеүгә, кешеләрҙең тормошон яҡшыртыуға йүнәлтеүе хаҡында һөйләне.

✓ **Башҡортостандың Ауыл хужалығы министрлығы балыҡсылыҡ предприятиеларынан субсидияларға ғаризалар ҡабул итә.** Дөйөм алғанда, республика тармағына булышлыҡ итеү өсөн федераль ҡаҙнанан 30 миллион һум бүленә. Ҡағыҙләргә ярашлы, хужалыҡтар һатып алынған ем һәм селбәрә хаҡының 40 процентҡа тиклеме күләмендә компенсация алырға мөмкин. Башҡортостанда йәмғеһе 70-тән ашыу балыҡсылыҡ хужалығы эшләй, 2023 йылда улар 1,1 мең тонна тауар балығы етештергән. "Күрһәткестәрҙе арттырырға ниәтләйбеҙ. Республикала балыҡҡа һорау бар, ошо йүнәлеште үҫтерергә теләүселәр ҙә бар", - тип белдерҙеләр Ауыл хужалығы министрлығында. Ведомствола билдәләүҙәренсә, балыҡсылыҡ предприятиелары дәүләттән башҡа ярҙам сараларына ла иҫәп тота ала. Мәҫәлән, ҡыҫҡа ваҡытлы һәм инвестициялы льготалы кредиттар, фермер гранттары, республика программаһы сиктәрендә ҡорамалдар һатып алыуға сығымдарҙың бер өлөшөн ҡаплау.

✓ **Төркиәнең Ozfatihler компанияһы йыл аҙағына тиклем Башҡортостанда йөк күтәреү ҡорамалдары, атап әйткәндә, крандар етештерә башларға ниәтләй. Улар республика предприятиеларында ҙур һорау менән файҙалана.** Башҡортостанда инвесторҙың цех төҙөү буйынса башланғысы хуплау тапты. Проект 2023 йылдың сентябрендә "Инвестиция сәғәте"ндә тикшерелде һәм уға өҫтөнлөклө статус бирелде. Был хаҡта Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров социаль селтәрҙәге сәхифәһендә яҙып сыҡты. Төркиә инвесторы республикала производствоның үҫтерергә ниәтләй, тип билдәләне төбәк етәксеһе. Ул Өфө эргәһендә тулы ҡеүәтендә эшләгән завод төҙөргә йыйына. "Башҡа илдәр эшҡыуарҙарының Башҡортостанды үҙ производствоһын урынлаштырыу майҙансығы итеп ҡарауы бик ҡыуаныслы. Төркиә Башҡортостандың тышҡы сауҙа әйләнешендә икенсе урынды биләй. Беҙҙе яҡшы партнерлыҡ мөнәсәбәттәре бәйләй, уларҙы нығытабыҙ", - тип яҙҙы Радий Хәбиров.

ТӨРЛӨҺӨНӘН

# САМБО - СПОРТ ҠЫНА ТҮГЕЛ...



**Өфөләге Көрәш һарайында "Zа самбо" федераль проектына ярашлы, "Йондоҙ" Бөтә Рәсәй балалар ярыштары үткәрелде.**

Сарала 600 тирәһе кеше ҡатнашты. Дискуссия майҙансыҡтары "Ауылда самбо" һәм "Адаптив самбо" тигән блоктарҙан торҙо. Билдәләнеүенсә, Рәсәйҙә 2700 мәктәп "Самбоны - мәктәпкә" проектында ҡатнаша. Краснодар крайынан, Свердловск, Новосибирск өлкәләренән һәм башҡа төбәктәрҙән вәкилдәр үҙҙәренең эш тәжрибәһе менән уртаҡлашты, балаларҙы самбо менән шөғөлләнеүгә, сәләмәт тормош алып барыуға йәлеп итеү, самбоны йәшәү рәүешенә әүерелдереү һәм башҡалар тураһында һөйләшеүҙәр булды. "Рәсәй Zа Самбо" форумының пленар ултырышында ҡатнашыусы "Берҙәм Рәсәй" партияһы Генераль советы Секретары вазифаһын ваҡытлыса башҡарыусы Владимир Якушев Рәсәй мәктәптәрендә самбо дәрестәрен алып барыу буйынса пилот проектына анонс бирҙе һәм 2025 йылда ил төбәктәрендә Бөйөк Еңеүҙең 80 йыллығына арналған самбо буйынса турнирҙар ойошторорға тәҡдим итте. "Самбо спорт төрө генә түгел, айырым философия, идеология, йәштәрҙе беҙҙә тәрбиәләүҙең мөһим инструменты", - тип тә билдәләне ул.

Республика Башлығы Радий Хәбиров йәштәр араһында спорт көрәшен йәйелдереү буйынса көнүҙәк мәсьәләләр тураһында һөйләп, уларҙың беренһе - квалификациялы педагогик кадрҙар әҙерләү икәнен һыҙыҡ өҫтөнә алды. "Бының өсөн тәү сиратта йәш белгестәрҙе йәлеп итеү мөһим. Быны Башҡортостанда "Ауыл тренеры" һәм "Кала тренеры" программалары аша атҡарабыҙ. Башҡортостанда барлығы 10 меңдән ашыу тренер эшләй. Был йәһәттән дә өҫтәмә ярҙам саралары кәрәк, - тип хәбәр итте Радий Хәбиров. - Илдә "Zа самбо" проектының барлыҡҡа килеүенә шатбыҙ. Уға ихлас ҡушылдыҡ. Республикалағы 37 мәктәптә ул тормошҡа ашырыла".

# БЕЛЕМ УСАҠТАРЫНА ...

**2025-2027 йылдарҙа Башҡортостанда Президент программаһы буйынса 88 мәктәп, 16 балалар баҡсаһы һәм 7 колледж төҙөкләндерелә.**

Ошо маҡсатта республикаға федераль ҡаҙнанан 7 миллиард һумдан ашыу аҡса бүленә. Уҙған өс йылда 55 меңдән ашыу бала уҡыған 146-нан ашыу мәктәп ремонтланған. Был хаҡта социаль селтәрҙәге сәхифәһендә Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров хәбәр итте. Республика бындай күләмле эште үҙ көсө менән башҡарып сыға алмаҫ ине, тип билдәләне ул. "Беҙ Владимир Владимирович Путинға ошо программа, уны мәктәпкәсә һәм урта профессиональ белем биреү өлкәһенә киңәйтергә тигән ҡарары өсөн рәхмәтлебеҙ. Башҡортостанда урта һөнәри белем биреүҙең матди-техник базаһын яңыртыу эшен алып барабыҙ, был йәһәттән федераль үҙәктең ярҙамы беҙгә бик урынлы", - тип яҙҙы Радий Хәбиров.

Башҡортостан Башлығы шулай уҡ республикаға яңы мәктәптәр һәм балалар баҡсалары төҙөү өсөн федераль ҡаҙнанан аҡса аласағын хәбәр итте. Өфөлә 360 урынлыҡ математика лицей-интернаты өсөн 2,4 миллиард һум бүленә. Башҡортостанда математика мәктәбе көслө һәм республика күптән инде ошондай белем биреү учреждениеһын асырға планлаштыра.

Әйткәндәй, Башҡортостан дөйөм белем биреү учреждениеларын капиталь ремонтлауға йәлеп ителгән федераль аҡса күләме, шулай уҡ төҙөкләндерелгән мәктәптәр һаны буйынса Рәсәй төбәктәре араһында өс лидер иҫәбенә инде.

**Роман Якимчук**

# ТАНЫШАЙЫҠ!

**Баймаҡ район хакимиәте башлығы итеп Азамат Иҙрисов тәғәйенләнде. Район хакимиәте советы алдан уҙғарылған конкурс һөҙөмтәләре буйынса ике кандидатураны тәҡдим иткәйне.**

Депутаттар совет ултырышында бер тауыштан район хакимиәте етәксеһе итеп Баймаҡ районы хакимиәте башлығының инвестициялар һәм эшҡыуарлыҡ буйынса урынбаҫары вазифаһын башҡарыусы Иҙрисов Азамат Сәфәрғәле улын һайланы. Яңы етәксе район өсөн ят кеше түгел. Азамат Иҙрисов Күгәрсен районының Теләүембәт ауылында тыуған, әммә әсәһе Баймаҡ районынан - ошонда уның бала сағы үткән.

Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров Баймаҡ районының яңы башлығы Азамат Иҙрисовҡа уңыштар теләне. Ул яңы етәксе менән Хөкүмәттең Республикаға идара итеү үҙәгендә барған оператив кәңәшмәһендә таныштырҙы. "Азамат Иҙрисовтың эш тәжрибәһе бар: ике йыл Башҡортостандың Луганск Халыҡ Республикаһындағы вәкиле булды һәм Красный Луч ҡалаһында, ғөмүмән, Луганскиҙа объекттарҙы тергеҙеү эшен координацияланы, етди һәм яуаплы эш башҡарҙы", тип билдәләне Радий Хәбиров.

Тәжрибәле етәксе районда тормошҡа ашырылған проекттарҙы, яҡшы эштәрҙе уңышлы дауам итә алыр, тип ышаныс белдерә депутаттар. Баймаҡ районы советы депутаты Илдар Бәхтийәров фекеренсә, Азамат Иҙрисовҡа ышаныс белдереү - район үҫеше өсөн яҡшы аҙым.

- Бөгөн беҙҙең район өсөн мөһим мәсьәлә ҡаралды, депутаттарыбыҙ берҙәм фекерен белдерҙе. Шуны билдәләп үткем килә: һуңғы биш йылда районыбыҙ һәм ҡалабыҙ үҫешә, яңынан-яңы үҙәр яулай. Мәктәптәр, ФАП-тар һәм башҡа мөһим социаль объекттар төҙөлә һәм яңыртылды, юлдар ремонтлана. Салауат Юлаев исемендәге ҡала паркын төҙөкләндереүҙе көтәбеҙ. Һаулыҡ һаҡлау өлкәһендә лә ыңғай үҙгәрештәр күп. Әлбиттә, пандемия, артабан Махсус хәрби операция тормошобоҙҙо үҙгәртте; ҡайһы бер объекттар төҙөлөшө тотҡарлана. Әммә баймаҡтар беҙгә тәү сиратта нацистарҙы Еңеү кәрәклеген бик яҡшы аңлай. Республика Башлығы Радий Хәбировҡа беҙҙең Баймаҡ районына айырым иғтибары һәм ярҙамы өсөн ҙур рәхмәтлебеҙ, - тип белдерҙе Илдар Бәхтийәров.

## Б А Ш  Ҡ А Л А  Х Ә Б Ә Р Ҙ Ә Р Е

✓Курск өлкәһендә яҡташ яугирҙарыбыҙ генерал Шаймуратов миҙалдары һәм "Өфө ҡалаһына нигеҙ һалыныуға 450 йыл" юбилей миҙалдары менән бүләкләнде. Был турала социаль селтәрҙәге сәхифәһендә Өфө мэры Ратмир Мәүлиев хәбәр итте.Шулай уҡ хәрбиҙәргә PFV-дрондар һәм йылы кейемдәр тапшырылды. Әйткәндәй, Өфөлә Махсус хәрби операцияла ҡатнашыусыларға кафела, бәҙрәханаларҙа һәм автосервиста ташлама яһала.

✓Башҡортостанда еңел атлетика манежы менән спорт комплексы, Бокс үҙәге һәм Теннис академияһы төҙөлә. Республика етәксеһе Радий Хәбиров Хөкүмәттең оператив кәңәшмәһендә ошо турала белдерҙе. "Беҙ Рәсәй Президентына еңел атлетика манежын төҙөүҙә ярҙам күрһәтеүҙе һорап мөрәжәғәт иттек, был проект әһәмиәте ягынан Көрәш һарайынан һуң икенсе урында тора. Бокс үҙәге һәм Теннис академияһы ла кәрәкле объекттар", - тине Хәбиров.

✓Башҡортостан Башлығы Хөкүмәттең оператив кәңәшмәһендә Яңы йыл байрамына республиканың ҡала-районларын биҙәү эштәрен тиҙләтергә ҡушты. "Бөгөн иртә менән һәм кисә кис көнө Мәскәү урамдары буйлап үттем. Мәскәү Яңы йылға әҙерләнә башлаған, күп объекттарҙың байрам иллюминацияһы бар. Һеҙгә лә ошо эште башларға кәрәк", - тине Радий Хәбиров Өфө мэры Ратмир Мәүлиевҡа.

✓"Башҡортостанда оҙон ғүмерлелек. Туризм" республика проекты сиктәрендә бер төркөм туристар Үзбәкстанға юлланды. Был - 50 кешенән торған тәүге төркөм. Йыл аҙағына тиклем - 29 ноябрҙә һәм 13 декабрҙә тағы ике төркөм барырға тейеш. "Үзбәкстан менән беҙҙең республиканы йылы һәм эшлекле мөнәсәбәттәр бәйләй, был ил - халыҡара аренала төп партнерҙарыбыҙҙың береһе. Хәҙер социаль туризм өлкәһендә лә хеҙмәттәшлек итә башлайбыҙ", - тип билдәләне Радий Хәбиров.

✓Ҡаҙанда билбау көрәше буйынса донъя чемпионаты тамамланды. Унда донъяның 35 иленән 500-ҙән ашыу спортсы ҡатнашты. Республиканың Спорт министрлығында хәбәр итеүҙәренсә, Алёна Фәтихова 52 килограмға тиклемге категорияла көмөш миҙал яуланы, Илфаҡ Ибәтуллин (57 килограмм), Альбина Алиева (76 килограмм) һәм Зарина Әлмөхәмәтова (66 килограмм) бронза призерҙар булды.

**"БАШИНФОРМ" материалдары файҙаланылды.**

*✓ Ата-әсә ҡарамағында тип 18 йәшкә тиклемге балалар йәки көндөҙгө бүлектә уҡыған 18 йәштән 23 йәшкә тиклемгеләр иҫәпләнә. Уларҙың ата-әсәһенең эшкә һәләтле булмауы пенсия тәғәйенләүҙә мөһим шарт булып тора.*



# ЕР УЧАСТКАҺЫ КӘРӘКҺӘ...

**Башҡортостан Дәүләт Йыйылышының аграр мәсьәләләр, экология һәм тәбиғәттән файҙаланыу буйынса комитеты Махсус хәрби операция геройҙарына ер участкалары алыуҙы ябайлаштырыу тураһында ҡарар ҡабул итте.**

Республика парламентында белдереүҙәренсә, ноябрҙәге пленар ултырышта "Башҡортостан Республикаһында ер мөнәсәбәттәрен көйләү тураһында" законға үҙгәрештәр индерелә.

- Республикабыҙҙа Махсус операция геройҙарына шәхси торлаҡ төҙөләшө өсөн ер участкалары милеккә бирелә, - тине Дәүләт Йыйылышы рәйесе Константин Толкачев. - "Рәсәй Геройы" исеменә лайыҡ булған йәки Рәсәй Федерацияһы ордендары менән бүләкләнгән яугирҙар ошондай хоҡуҡҡа эйә. Улар Махсус хәрби операция барышында йәки алған яраларынан һәләк булған осраҡта ергә хоҡуҡ менән ғаилә ағзалары файҙаланырға мөмкин. Ергә хоҡукты тормошҡа ашырғанда техник яҡтан ҡыйынлыҡтар килеп тыуа. Махсус операцияла ҡатнашыу фактын төрлө документтар менән раҫларға тура килә. Ҡағыҙ мәшәҡәттәре күп ваҡытты ала. Тәҡдим ителгән үҙгәрештәр был процедураны ябайлаштырырға тейеш. Республиканың Ер һәм мөлкәт мөнәсәбәттәре министрлығы мәғлүмәттәрҙе Рәсәй Оборона министрлығынан һоратып алырға мөмкин. Парламент рәйесе фекеренсә, әлеге закон ер участкаларын бүлеү процесын тиҙләтә.

# ТУРИСТАРҘЫ ЫЛЫҠТЫРАБЫҘ



**Бөрйән районында урындағы эшҡыуар дәүләт ярҙамы менән тюбинг трассаһы төҙөй. Былтыр Рәнис Йәнбирҙиндың бизнес-планы муниципаль "Эшҡыуарлыҡ сәғәте"ндә хуплау тапҡан.**

Район хакимиәтендә эшҡыуарға ер участкаһы һайларға һәм сығымдарҙың бер өлөшөн (500 мең һумын) кире ҡайтарырға ярҙам иткәндәр. Инвестор объектты ҡышҡы миҙгелгә файҙаланыуға тапшырырға иҫәп тота.

- Башҡортостанда "эшҡыуарлыҡ сәғәттәре" бәләкәй һәм урта эшҡыуарлыҡ вәкилдәре менән осрашыуҙың һөҙөмтәле форматы булып тора. Ошо тәжрибәне ҡулланыу властар менән бизнес араһында диалог алып барырға, бизнес-проекттарҙы тормошҡа ашырғанда һөҙөмтәле ҡарарҙар табырға мөмкинлек бирә, - тип белдерҙе Башҡортостандың эшҡыуарлыҡ һәм туризм министры вазифаһын башҡарыусы Зөһрә Гордиенко.

Билдәле булыуынса, быйыл ҡыш Башҡортостанда төрлө ҡатмарлыҡтағы һәм оҙонлоҡтағы 60 трасса менән 14 тау саңғыһы үҙәге асыла. Йәйгеһен Башҡортостанға 900 мең турист килгән. Быйыл туризм өлкәһендә түләүле хеҙмәттәр күләме 13,7 миллиард һумға еткән, шуның 8,7 миллиард һумы майҙан башлап авгуҫҡа тиклемге осорға тура килгән.

*АҢЛАТАБЫҘ!*

# ПЕНСИОНЕР АТА-ӘСӘГӘ...

**Башҡортостанда үҙ тәрбиәһендә балалар булған 65 меңдән ашыу кеше арттырылған күләмдә пенсия ала, тип хәбәр иттеләр Социаль фондтың төбәк буйынса бүлексәһенең матбуғат хеҙмәтенән.**

Иҫегеҙгә төшөрәбеҙ, балиғ булмаған балаһы йәки студент балаһы булған пенсионерҙар юғары түләүгә иҫәп торға хоҡуҡлы. "Пенсионер ата-әсәләргә бындай өҫтәмә балалары балиғ булғанға тиклем, уҡыу һәм ҡарау фактына ҡарамаҫтан, тәғәйенләнә. Көндөҙгө бүлектә уҡыған студент балаһы өсөн 23 йәше тулғанға тиклем пенсия түләнә", - тип асыҡлыҡ индерҙеләр Социаль фондта. Ата-әсә ҡарамағында тип 18 йәшкә тиклемге балалар йәки көндөҙгө бүлектә уҡыған 18 йәштән 23 йәшкә тиклемгеләр иҫәпләнә. Уларҙың ата-әсәһенең эшкә һәләтле булмауы пенсия тәғәйенләүҙә мөһим шарт булып тора. Бынан тыш, баланың пенсияға өҫтәмә билдәләү өсөн мөрәжәғәт итеүсенең ҡарамағында булыуы ла мөһим.

"Һәр кеше өсөн, әммә өс кешенән артыҡ түгел, өҫтәмә түләү һәр страховка пенсияһы составында билдәләнгән түләү дәүмәленең 1/3 өлөшө күләмендә тәғәйенләнә. Быйыл билдәләнгән түләү күләме 8134 һум тәшкил итә. Мәҫәлән, бер кеше өсөн - 2711 һум, икеһе өсөн - 5423 һум, өс һәм унан күберәк кеше өсөн 8134 һум өҫтәмә түләнә. Бер үк бала өсөн пенсия ике пенсионерға ла арттырылырға мөмкин", - тип өҫтәнеләр РФ Социаль фондының Башҡортостан буйынса бүлексәһендә. Түләү тураһындағы ғаризаны Дәүләт хеҙмәттәре порталында, күп функциялы үҙәктә йәки Социаль фондтың бүлексәләрендә бирергә мөмкин.

**Галина БАХШИЕВА.**

*ҮӘТ БИТ ӘЙ!*

# БАР БИТ ОЯТҺЫҘҘАР!



**Башҡортостан буйынса Эске эштәр министры Александр Прядко "Башинформ"ға биргән интервьюһында республикала ришүәттең уртаса күләмен атаны. Ул 120,6 мең һум тәшкил итә икән.**

"Йыш ҡына коррупция мәғариф, төҙөләш, торлаҡ-коммуналь хужалыҡ өлкәләрендә осрай. Был "көнкүреш коррупцияһы" тип атала, уның менән граждандар көндәлек тормошта осраша", - тип билдәләне министр.

Мәҫәлән, ҡайһы бер белем биреү учреждениелары етәкселәренең хеҙмәткәрҙәрҙән бюджеттан дәүләт ярҙамы рәүешендә иҫәпләнгән дәртләндереү түләүҙәренең бер өлөшөн уларға бүләк итеп тапшырыуҙы талап иткән факттар асыҡланған. Хеҙмәткәрҙәр был шарттарға ризалаша, ай һайын ҡулакса тапшыра йәки банк картаһына аҡса күсерә. "Ошондай 52 факт асыҡланды, белем биреү учреждениеларының 10 етәксеһенә ҡарата енәйәт эше ҡуҙғатылды. Шул уҡ ваҡытта алынған ришүәттәрҙең дөйөм суммаһы ҡайһы берҙә 3 миллион һумдан ашып киткән, - тип хәбәр итте матбуғат агентлығы әңгәмәсеһе. - Коррупция енәйәттәренең тағы өстән бер өлөшө мутлашыу формаһында башҡарыла, вазифалы кешеләр вазифаһын файҙаланып, законһыҙ эштәр ҡыла. Бындай енәйәттәр төҙөләш тармағына, бюджет өлкәһенә һәм эшҡыуарлыҡҡа хас. Бөтәһе 275 коррупция фактына юл ҡуйылманы. Мәҫәлән, Өфөлә төҙөләш ойошмалары етәкселәренә ҡарата енәйәт эше ҡуҙғатылған, улар торлаҡ төҙөү һылтауы менән граждандарҙан төүге иғәнәгә аҡса алған, әммә һуңынан үҙ бурыстарын үтәмәгән, ә аҡсаны үҙләштергән. Килтерелгән зыян 3 миллион һумдан ашыу тәшкил итә".

*ҠЫҪҠАСА*

# ХАЛЫҠ ЯРҘАМЫ

**Өфөләге Көрәш һарайы алдындағы майҙанда Башҡортостандан Махсус хәрби операцияла ҡатнашҡан яугирҙарға 138-се гуманитар конвой оҙатылды.** Тантанала "Берҙәм Рәсәй" партияһының Генераль советы секретары вәкәләттәрен ваҡытлыса башҡарыусы, Федерация Советы Рәйесенең беренсе урынбаҫары Владимир Якушев, Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров, Алтай Республикаһы Башлығы, төбәк Хөкүмәте рәйесе Андрей Турчак һәм Донецк Халыҡ Республикаһы Башлығы Денис Пушилин ҡатнашты. Гуманитар йөк составында - 14 автомобиль, 10 мотоцикл, ағас-таҡта, күсмә мунсалар, маскировка селтәрҙәре, кейем-һалым, автомобилдәр өсөн запас частар, төҙөләш инструменттары һәм материалдары, окоп шәмдәре, "буржуйка" мейестәр, йылытыу пушкалары, медикаменттар һәм посылкалар. Владимир Якушев һәм Радий Хәбиров гуманитар ярҙам йыйыу менән шөғөлләнгән ирекмәндәр менән дә аралашты. Улар араһында мәктәп уҡыусылары, пенсионерҙар, МХО-ла ҡатнашыусыларҙың балалары бар.

✓ **Радий Хәбировтың үҙенең телеграм-каналында йәш таланттар - Башҡортостандың киләсәге менән видеояҙма һалған.** Беренсе класс уҡыусылары Эльман Хәлиуллин һәм Марсель Шәрипов планетаны сүп-сарҙан таҙартырға ярҙам иткән робот йыйған. Улар үҙҙәренең проектын Өфөлә Рәсәй сәнәғәт форумында ойошторолған күргәҙмәлә күрһәтте. Республика етәксеһе йәш генийҙар менән аралашты, уларҙан кем булырға хыялланыуҙары тураһында һорашты һәм икеһенең дә ҡулын ҡыҫып хушлашты. Йәш программист Кәрим Туҡтаров та Радий Хәбировҡа үҙенең эшләнмәһе хаҡында һөйләне. Малай GPS-модулле газоанализатор яһау проекты өҫтөндә эшләй. "Ошондай йәш таланттар менән Башҡортостандың киләсәге ышаныслы ҡулдарҙа", - тип йомғаҡ яһаны Башҡортостан Башлығы.

✓ **Өфөлә социаль селтәрҙәрҙә мәғариф темаһына мөрәжәғәттәр күбәйгән.** Республикаға идара итеү үҙәгенән хәбәр итеүҙәренсә, ҡала халҡы айырыуса 4 ноябрҙән 10-на тиклем баш ҡаланың йыш бисҙәләрендә белем усаҡтарын төҙөүҙе һорап яҙған. Бынан тыш, Республикаға идара итеү үҙәге мәғлүмәттәренә ярашлы, йәмәғәт транспортына ялыуҙар күп килгән. Өфөләр автобустарҙы оҙаҡ көтөүгә һәм уларҙың туптулы булыуына, шулай уҡ кис көнө маршруттарҙың йөрөмәүенә ҡәнәғәтһеҙлек белдергән. Халыҡты юл, торлаҡ-коммуналь хужалыҡ, төҙөкләндереү һәм һаулыҡ һаҡлау мәсьәләләре лә борсой. Бынан алдараҡ Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров республикала, айырыуса Өфөгә һәм башҡа ҙур ҡалаларға яҡын райондарҙа мәктәптәрҙе күберәк төҙөргә кәрәклеген әйткәйне.

✓ **Башҡортостанда 7-12 йәшлек балалар араһында шайбалы хоккей буйынса асыҡ беренселек уҙғарыла.** Был хаҡта республиканың Берләштерелгән хоккей федерацияһынан хәбәр иттеләр. Ярыштар 16 ноябрҙә башланды һәм 2025 йылдың 30 мартына тиклем дауам итә. Ете йыллыҡ тәнәфестән һуң беренселек 9 ябыҡ боҙ майҙансыҡында ойоштоpола. Унда республикабыҙҙың 24 клубы, шул иҫәптән "Астра", "Салауат Юлаев", "Нарыштау", "Елкән", "Таусы" һәм башҡа хоккей клубтары ҡатнаша. Тәүге тапҡыр өс ҡыҙҙар командаһы уйнай. Финалды Башҡортостандың төп боҙ һарайы - "Өфө-Арена" майҙансығында үткәреү планлаштырыла. Турнирҙы ойоштороусыларҙан даими индивидуаль һәм команда призлары ҡаралған.

## Х А Л Ы Ҡ Д А У А Һ Ы



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, аныҡ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклеге онотмағыҙ.**

### Һары мәтрүшкә

Һары мәтрүшкә (зверобой продырявленный) күп йыллыҡ үлән. Һабаҡтары тура, япраҡтары бер-береһенә ҡаршы теҙелгән, хуш еҫле, тишекле. Сәскәһе һары, йәй буйы ата. Емеше - күп ваҡ ҡына һорғолт орлоҡтар йыйналған ҡапсыҡ кеүек. Беренсе орлоҡтары июндә өлгөрә. Үләндең ерҙән өҫкө өлөшөндә флавоноидтар, эфир майы, дуплау матдәләре, каротин, С витамины, никотин кислотаһы бар. Дауаланыуҙа үләнде ҡулланалар. Һары мәтрүшкәне июнь-июль айҙарында йыйып алалар. Был үлән 99 ауырыуҙан дауалай, тип иҫәпләнә. Ҡурыштырыу, елһенеүгә ҡаршы, микробҡа ҡаршы, яраларҙы уңалдырыу, бәүел һәм үт ҡыуҙырыу көсөнә эйә. Ҡатын-ҡыҙҙар ауырыуҙарынан ярҙам итә.

❖ Баш ауырығанда 3 ҡалаҡ һары мәтрүшкә үләненә 1 стакан ҡайнар һыу ҡойоп, 2 сәғәт төнәтергә һәм һөҙөргә. Көнөнә 3 тапҡыр 1/3 стакан эсергә.

❖ Киҙеүҙән түбәндәге дауа файҙалы: 100 грамм киптерелгән ваҡланған һары мәтрүшкә үләненә 0,5 литр араҡы ҡойоп, ҡараңғы урында 36 сәғәт төнәтергә, ваҡыты-ваҡыты менән һелкеп болғатып торорға. Шунан һөҙөргә. Төнәтмәнең 1 ҡалағын 1 стакан ҡайнатылған йылы һыуға ҡушып, көнөнә 3 тапҡыр ашарҙан 30 минут алда эсергә.

❖ Күңел төшөнкөлөгөнән (депрессия) 1 ҡалаҡ үләнгә 1 стакан ҡайнар һыу ҡойорға, талғын утта 10-15 минут ҡайнатырға, һөҙөргә. Көнөнә 3 тапҡыр сирек стакан эсергә. Дауаланыу - 1-2 ай.

❖ Арыу, талсығыуҙан 1 ҡалаҡ һары мәтрүшкә үләненә 1 стакан ҡайнар һыу ҡойорға һәм йылыға төрөп, 30 минут төнәтергә. 2-3 аҙна дауамында көнөнә 3 тапҡыр 1/3 стакан эсергә.

❖ Ашҡаҙандың сей яра ауырыуынан һары мәтрүшкә үләне, етен һәм укроп орлоҡтарын, ромашка сәскәһен бер тигеҙ өлөштә алырға. Әҙерләмәнең 1 ҡалағына 1 стакан ҡайнар һыу ҡойорға, бөстә 15 минут ҡайнатырға, 1 сәғәт төнәтергә. Төнәтмәне көнөнә 3-4 тапҡыр яртышар стакан эсергә.

**Гәлиә ШӘМСИЕВА әҙерләне.**

ЗИҺЕН КИҢӘЙТЕП...



# КӨНЬЯҠ УРАЛ ҠОШТАРЫ

## Ваҡ сәпсәү, ҡашҡа сәпсәү

**(Малый зуек)**



Турғайҙан ҙурыраҡ. Суҡышы ҡара, башында һәм түшендә ҡаралы-аҡлы һүрәте бар. Тиҙ-тиҙ итеп йүгереп йөрөй, башын алға эйә.

Ата ҡош "криэ, криэ, криэ" тип саҡыра. Көньяҡ Уралда киң таралған ҡош. Йылғаларҙың ҡомло ярында, ташландыҡ урындарҙа, һыу йыйылып ятҡан карьерҙарҙа оя ҡора. Урманлы-далалы райондарҙа йышыраҡ осрай. Ата ҡош яңы сыҡҡан бәпкәләрҙе инә ҡошҡа ҡарағанда оҙағыраҡ ҡурсалап йөрөтә. Төрлө бөжәк, селәүсен менән туҡлана.

Йылы яҡҡа тупланып та, яңғыҙ ҙа осалар. Урта Африка һәм Көньяҡ Азияла ҡышлай.

## Ялан тәгәрлеге

**(Кречетка)**



Ябыҡ, оҙон аяҡлы ҡош. Елкәһе, ҡорһағы - ҡара, күҙҙәре араһынан да ҡара һыҙат үтә. Маңлайы, ҡойроғоноң осо аҡ. Суҡышы, тәпәйҙәре ҡара. Көслө, тиҙ оса. Хәүеф тыуғанда "кре-кре-кре", "кряк", "кьяк" тип ҡысҡыра.

Көньяҡ Уралда, дала ерендә оя ҡора. Исәнғол, Талҡаҫ күле, Бөрсөнсө һәм Көньяҡ Үләнде күлдәрендә лә осраған булды. Һуңғы ваҡытта ялан тәгәрлегенең көмөгә ерҙәрҙең күпләп һөрөлөүе, малдың күп булыуы, эттәрҙең был ҡоштарҙың ояһын ауыһыҙ талауы менән бәйле.

Һыу сығанағына яҡыныраҡ оя ҡора. Һалған йомортҡаһын һәм бәпкәләрен нык һаҡлай, бының өсөн йыртҡыс ҡоштарға һәм кешегә ташланыуҙан да ҡурҡмай. 5 аҙналыҡ бәпкәләр осорға һәләтле. Ер өҫтөндәге бөжәктәр менән туҡлана. Йәш ҡоштар ҡанат нығытҡас та, бергә тупланып, дала буйлап күсенеп йөшәйҙәр. Август аҙағы-сентябрь башында йылы яҡҡа осалар. Рәсәйҙең һәм Башҡортостандың Ҡыҙыл китабына индерелгән.

**М. Баянов, Ә. Мәмәтов, "Көньяҡ Урал ҡоштары" китабынан. (Дауамы бар).**

КӨН ТЕМАҺЫ




*Исәнғол ағинәйе Ләлә Мозафарова Башҡортостан картаһын да, Ейәнсура районы картаһын да кәзә дебетенән бәйләгән.*

# ИЗГЕ ЭШТӘРГӘ БЕРЛӘШЕП

**"Атайсал. Яҡташлыҡ көсө" форумы был юлы Ейәнсура районында уҙҙы. Форум Ейәнсура, Көйөргәҙе, Күгәрсен, Йылайыр, Мәләүез, Хәйбулла райондарының, Күмертау ҡалаһының, Ырымбур өлкәһенең изге уйлы, изге ниәтле меценаттарын, әүҙем эшҡыуарҙарын, йәмәғәт эшмәкәрҙәрен, төрлө йүнәлештәге фекер алышыу майҙансыҡтарына йыйып, "Атайсал" проекты һөҙөмтәләрен, уңыштарын, еңеүҙәрен барланы, киләсәккә эш йүнәлештәре тураһындағы фекер-идеялар менән уртаҡлашты.**

Белеүегеҙсә, "Атайсал" проекты 2021 йылда уҡ Башҡортостан Республикаһы Башлығы Радий Хәбиров тарафынан тормошҡа ашырыла башлағайны. Шул ваҡыттан алып әллә күпме файҙалы эштәр башҡарылған! "Атайсал" проекты рухи яҡтан яҡындарҙы берләштерҙе, ул хәҙер проект ҡына түгел, ә тыуған төйәктәрен яратыусылар хәрәкәте, берҙәмлек символы", - тигәйне Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров. Эйе, хаҡ һүҙҙәр. Быны ҡайһы бер һандар-факттар ҙа раҫлай. "Дүрт йыл элек "Атайсал" проектын башлағанда беҙ был тиклем уңыштар тураһында күҙ алдына ла килтермәгәйнек әле. Бөгөн был ҡаҙаныштар артында 1,3 миллиард һум аҡса һалынған 23100 проект, 23100 ҡатнашыусы тора", - тип билдәләне Башҡортостан Хөкүмәте Премьер-министрының беренсе урынбаҫары Урал Килсенбаев.

Яҡташлыҡ көсө менән атҡарылған "Атайсал" проекттары - улар тыуған ауылында мәсет төҙөү, юл һалдырыу, ауыл зыяратын кәртәләү, клуб йә спорт залы һалдырыуға ярҙам итеү, мәктәп ремонтлатыу, дауаханаларҙы, мәҙәниәт усаҡтарын ҡиммәтле ҡорамалдар менән йыһазландырыу, балалар майҙансыҡтары төҙөү, конкурстарҙа бағыусы булыу, күп балалы әсәләргә йә һаулығы сикләнгәндәргә шифахаларға юлламалар бүләк итеү кеүек изге ғәмәлдәрҙә атҡарыу тигән һүҙ ул. Ысынында, был ғәмәлдәрҙең нигеҙендә халҡыбыҙҙың шул уҡ яҡташлыҡ, туғанлыҡ традициялары ла сағылыш таба бит. Башҡорттар элек-электән бер-береһенә терәк-таяныс булып, әле генә һанап үткән эштәрҙе бергәләп атҡарған: өй күтәргән, бесән әҙерләгән, һуғым һуйған, ауылдарыбыҙҙың тирә-яғын, йылға-күлдәребеҙҙе таҙартҡан. Ошондай күмәк көс менән башҡарылған эштәр халҡыбыҙҙы берләштергән, илһөйәрлек, ерһөйәрлек сифаттарын ҡанына һеңдергән.

Бына был иң мөһиме лә инде: халыҡтың изге эштәргә берләшеүе. Бөгөн беҙ башлыса Махсус хәрби операция майҙандарында ил именлеген һаҡлаусы уландарыбыҙ, ир-егеттәребеҙҙең ауыр хеҙмәтенә ярҙам итеү юҫығында берләшкәнбеҙ. Ейәнсуралағы форумда ҡатнашыусылар төрлө секцияларға бүленеп эшләнә лә, төп һүҙ барыбер ана шул берҙәмлек емештәрен барлауға арналды. Гуманитар ярҙам хәҙер ойоҡбаш, бирсәткәләр бәйләп, төрлө ризыҡтар әҙерләп, ағинәйҙәр оҙатҡан ваҡ йөктәрҙән генә тормай. Гуманитар ярҙам хәҙер автомобиль, мотоцикл, генератор, мотобысҡы кеүек ҡорамалдар, радио-электрон әйберҙәр, төрлө төҙөлөш материалдары, буралар, мобиль мунсалар тейәлгән оло-оло машиналар менән оҙатыла. Халыҡ ниндәй генә һөнәрҙәр үҙләштермәне был осорҙа: окоп шәмдәре, маскировкалау селтәрҙәре, дрондарҙан һаҡланыу плащтары һәм юрғандары, көнкүрештә ҡулланыу кәрәк-яраҡтары, боҙолмай торған аҙыҡ түлек - элек ҡулға ла тотоп ҡарамаған башҡа кәрәк-яраҡтарҙы эшләргә өйрәнде. Район мәҙәниәт һарайы фойеһына ҡуйылған бай күргәҙмәлә ҡунаҡтар ейәнсураларҙың ошондай продукциялары менән танышты ла инде.

Әлбиттә, Ейәнсурала үткән "Атайсал" форумындағы төп геройҙар ҙа МХО-нан ялға ҡайтыусы ир-егеттәр булды. Бына ҡыҫҡа ялға ҡайтҡан "Пчелка" ҡушаматлы егет сәхнәгә күтәрелә һәм яҡташтарҙың гуманитар ярҙамы өсөн рәхмәт белдерә. "Һеҙ ебәргән хаттарҙы ла беҙ ҡат-ҡат уҡыйбыҙ, улар аша тыуған яҡтың йылыһын тоябыҙ, улар беҙгә ярҙам итә", - ти ул. "Труба" ҡушаматлы егет ошо саранан туп-тура МХО-ға юлланыуы тураһында белдерә. Район хакимиәте башлығы Дәмин Юланов уға дронға ҡаршы аппарат бүләк итеп, хәйерле юл теләй. Яуҙа һәләк булған Марсель Ҡәҙербәковтың әсәһе Рәсимә Ҡәҙербәкованың сығышы күҙҙәргә йәш төйөлдөрә. Ул улының иҫтәлеге итеп ауылындағы мәсет төҙөлөшөнә ярҙам итеүе, мәктәпкә лә матди ярҙам күрһәтеүе, төрлө спорт сараларына аҡса бүлеүе тураһында һөйләй. "Быларҙың барыһы ла - илһөйәр улымдың һәләк булғанға тиклемге эштәренең дауамы", - ти әсә.

"Атайсал" форумы программаһы сиктәрендә һигеҙ секция эшләне. Уларҙың барыһында ла яҡташтарҙың ауылдарыбыҙҙы һаҡлау, яҡлау маҡсатындағы изге ғәмәлдәре, халҡыбыҙҙың илһөйәрлек, телһөйәрлек традициялары, беҙҙең киләсәгебеҙ булған балаларҙы, йәштәрҙе атайсалға һөйөү рухында тәрбиәләүсе саралар тураһында һөйләнде. Мәҫәлән, "Ағинәй" һәм "Ир-егеттәр ҡоро" йәмәғәт ойошмалары ағзаларын бер майҙанға туплаған "Ғаилә именлеге. Беҙ - Атайсалдың усағын, йолаларын, именлеген һаҡлаусылар" секцияһында "Ауылдарыбыҙҙы, рухыбыҙҙы кем ҡотҡарыр?", тигән бик актуаль һорау ҡат-ҡат ҡабатланды. Төп яуап: "Ауылдарға ябырылған бар һынауҙарҙы ошо ауылдарҙа йәшәгәндәр, ошо ауылдарҙа тыуып-үҫкәндәр үҙҙәре еңеп сығырға тейеш", - булды. "Күреһегеҙ, киләсәктә тыуған ауылдарына ябырылып ҡайтасаҡтар әле яҡташтар. "Атайсал" проекты ла бына ошоға булышлыҡ итә бит", - тип тә ҡабатланы бөгөн ауылдар йәшәһен, унда йәшәгәндәрҙең дәрте һүрелмәһен тип, төрлө өмәләр, саралар ойоштороп, фермерлыҡ, меценатлыҡ, эшҡыуарлыҡ менән шөғөлләнгән Риф Баймырҙин, Урал Таймасов (Хәйбулла), Рөстәм Тотманов (Йылайыр), Фәнис Бикташев (Мәләүез), Раил Араптанов (Көйөргәҙе), Марсель Ярышев (Күмертау), Шәһит Ҡолмөхәмәтов (Ейәнсура) кеүек ир-егеттәр.

Был һүҙҙәр, әлбиттә, бына 15 йыллап инде "Ағинәй" йәмәғәт ойошмаһына тупланып, үҙҙәренең ауылдарындағы ҡотто, утты һүндермәй тотоп тороусы ағинәйҙәрҙе лә дәртләндермәй ҡалмағандыр. Сөнки ошо йылдар эсендә улар әллә күпме онотола яҙған кәсептәрҙе, һәр ырыуға хас милли кейем һәм биҙәүестәрҙе, йолаларҙы тергеҙҙе. Улар үҙҙәренең иманлы йәшәү рәүеше менән башҡорт ҡатынҡыҙының төп асылы өлгөһөн иҫкә төшөрҙө. Ысынлап та, ҡайҙа ҡарама, ниндәй сараны алма - ағинәйҙәр майҙан уртаһында шул. Шуға ла уларҙың "Ир-егеттәр ҡоро" ағзаларын да әүҙемерәк булырға саҡырыуы, "Халҡыбыҙҙың ирҙәр генә эшләр шөғөл-кәсептәре, йолалары, тәрбиә мәктәптәре күптән көтә ир-егеттәребеҙ ғәмәлдәрен", - тигән һүҙҙәре бик тә урынлы яңғыраны. Ир-егеттәр хәрәкәтен әүҙемләштереү буйынса тәҡдимде Башҡортостан "Ир-егеттәр ҡоро" рәйесе, Дәүләт Думаһы депутаты Зариф Байғусҡаров та хуплап, былай тине: "Елкәң булһа, ауылда лә йәшәп, эш табып була. Бөгөнгө сарала ошо тәңгәлдә уңыш ҡаҙанған ир-егеттәр һәм ағинәйҙәр йыйылған, уларҙың тәжрибәһен таратыу кәрәк. Өйрән, эшлә, эш урындары булдыр, был эштәргә улыңды, ейәнеңде лә өйрәт - халҡыбыҙҙың кәсептәрен тергеҙеүгә үҙ өлөшөңдө индер".

Район хакимиәттәре башлыҡтары менән ошо секция ултырышына инеп, ҡайһы бер сығыштарҙы тыңлағандан һуң, республика Хөкүмәте Премьер-министрының беренсе урынбаҫары Урал Таһир улы: "Донъялар тыныс булмаған осорҙа һеҙҙең - атайсалын ҡәҙер итеп, һаҡлап йәшәгән ағинәйҙәрҙең, аҡһаҡалдарҙың, барлыҡ энтузиастарҙың төплө, хаҡ һүҙҙәре йәмғиәткә бик тә кәрәк. Аҡыл-кәңәштәрегеҙҙе барыһына ла еткерегеҙ", - тигәйне. Эйе, йәмәғәтселек бөгөн "Атайсал" кеүек маҡсатлы проекттарға ла, хаҡ һүҙҙәргә лә, изге ғәмәлдәргә лә мохтаж. Иң изге ғәмәл - ул атайсалыбыҙға, тыуған төйәгебеҙгә, туған телебеҙгә тоғролоҡ икәнен дә һәр кемгә аңлатаһы бар әле, ҡыҙғаныска ҡаршы...

**Гөлбаныу ГӘРӘЕВА.**

ТАРИХИ ХӘҠИҠӘТ

# ЫРЫМБУР ГУБЕРНАТОРҘАРЫ ҺӘМ БАШҠОРТТАР

## (Генерал-майор И.В. Чернов яҙмаларынан)



**Граф В.А. Перовский**

**(1833-1842 йылдарҙа Ырымбур губернаторы булған).**

Обручев килеүгә бер йыл да үтмәй, поташ заводтары уның бойороғо буйынса ябыла. Икенсе бер рәүештә башҡорт урмандарынан килем Ырымбурҙың үҙендә алына, сөнки унда һәр саҡта ла Башҡортостандан килтерелгән тәҙәләш ағасы һәм утын ҡуллаһыла. Перовскийҙың юллауы буйынса батша ғали йәнәптәре башҡорттарҙан ағас һатып алыу, уны урындарҙа ирекле хаҡ менән киҫеү буйынса бойороҡ бирә, ә әҙер ағасты башҡорттар үҙҙәре Урал һәм Һаҡмар йылғалары буйлап, башҡа эшсе командалар кеүек ук хеҙмәткә ялланып, һал менән Ырымбурға тиклем килтерергә тейеш була.

Ошондай ҡағыҙәләр индерелеү менән ҡаҙна биналарын яғып йылытыу өсөн утын иң түбән хаҡҡа - 3 түмәрле сажин утыны хәҙергә хаҡ иҫәбе менән 1 һум 50 тиндән 3 һум 50 тингә тиклем аҡсаға һатып алына; шундай уҡ түбән хаҡҡа ҡаҙна эштәре өсөн бүрәнә килтерелә. Ағас әҙерләү өсөн сығымдар күберәк талап ителә, ә түбән хаҡҡа һатыуҙан хасил булған айырма шәхси кешеләр өҫтөнә һалына, уларға ағас күпкә юғарыраҡ хаҡҡа һатыла.

Ағас әҙерләү операцияһы менән тәҙәләш материалдарын әҙерләү буйынса айырым хужалыҡ идаралығы шөғөлләнә, ә икенсе бер хужалыҡ бүлексәһе тәҙәләш таштарын, известь, кирбес етештереүҙе етәкләй, улар үҙҙәренең йәмғиәте иҫәбенә көн иткән башҡорт эшсе командалары тарафынан башҡарылып, эштәре бик тә түбән баһалана: атһыҙ эшсегә, көнлөк эш положениеһына ярашлы (русса: урочная плата. - **Тәрж. иҫк.**), бер көнлөк эш өсөн 5 тин ярым, ә атлы булғанына 11 тин түләнә, ә был шул тиклем түбән хаҡлы эш булып, ысынында атлы эшсе көнөнә 5 тин, атһыҙы ни барыһы 2 тин аҡса ала.

Ике бүлексәне лә тәүге мәлдәрҙә инженер полковник Тафаев етәкләй, ә һуңынан был эштәр айырым чиновниктарға тапшырыла: беренсеһен губернаторҙың махсус бурыстар буйынса чиновниктары, икенсеһен инженер офицерҙары башҡара. Был операциянан байтаҡ ҡына килем алына, ул тулыһынса Перовскийҙың үҙ ҡарамағында була һәм уға төбәктең баш етәксеһе идаралығы составын арттырыу мөмкинлеген бирә.

Уның шәхси штатында мәғрифәтле класс кешеләре, исем-шәрифтәре билдәле кешеләр күп була. Уның шәхси адъютанттарының барыһы ла йәш гвардия офицерҙары: Капустов, Челяев, Габбе һәм сәйәси яҡтан үҙен аҡлай алмаған, үҙ-үҙенә ҡул һалған Виткевич була. Граждан статусындағы чиновниктарҙан бер туған Ханыҡовтар, әҙәбиәттә "Луганск казагы" булараҡ билдәле булған Даль - уларҙың исемдәре барыһына ла билдәле. Барса был түнәрәк, юғары вазифалар билгән шәхестәрҙе лә индереп, бындағы интеллигенцияны тәшкил итә. Был түнәрәктең тормошо, иң юғары баш ҡала йәмғиәте йәшәйешенең сағылышы булараҡ, урта кластарға ыңғай йоғонто яһай.

Был ваҡытта Ырымбур губерна ҡалаһы Өфөнән күпкә юғарыраҡ торған, унда урындағы бай помещиктар бөтөнләйгә йәшәмәй, аристократия иҫәбенә канцелярия чиновниктарынан күтәрелгән төрлө пайлаталарҙың рәйестәре һәм советниктары ингән; йыш ҡына вице-губернаторҙар ҙа ошондай уҡ кешеләргә ҡараған, һәм губернатор, гәрсә ул мәғрифәтле кеше булһа ла, улар араһында юғалып ҡала.

Перовский идара итеүенең тәүге осоронда Ырымбурҙа йәшәй һәм йәмғиәт тормошон күп төрлөләндерә: Пасха байрамында көрәш һәм ат сабыштары уҙғарыла; призддарҙы, улар артыҡ ҡиммәтле булмаһа ла, Перовский үҙ иҫәбенән тапшыра, дөйөм алғанда улар ҙур ғына сумманы тәшкил итә; тағы ла ҙур ат сабыштары йәй көндәрендә Сулаҡ тауы эргәһендә, Ырымбурҙан 10 йә 12 саҡрым ерҙә уҙғарыла, һәм, ахыр сиктә, Перовский халыҡты үҙенә йәлеп итеү өсөн байрамдар барышында һыбай килеш бәүелсәктәр аҫтынан үткәндә һәм казак форштадында йыйылған халыҡҡа ваҡ көмөш тәңкәләр һибеп ебәргән.

Перовский йыш ҡына сиркәүҙәргә йөрөй, әммә Вознесенский сиркәүендә йышыраҡ була, сөнки ул уның фатирына иң яҡын урынлашҡан була. Сиркәүҙән сыҡҡан мәлдә ул доға ҡылырға килгән сауҙагәрҙәрҙән беренһенә хәйерселәргә таратыу өсөн бер ус ваҡ көмөш тәңкәләр биреп китә. Перовский төбәк менән идара итергә икенсегә килгәнендә лә ошо ғәҙәтен ташламай. Петр һәм Павел сиркәүендә ошолай итеп аҡса таратыуҙы мин үҙем дә күрҙем. Ғөмүмән, халыҡҡа аҡса таратыу яғынан Перовский бик йомарт булды. Унан һуң килгән Катенин бәләкәй генә хеҙмәт күрһәткән өсөн дә аҡса биреү яғынан шулай уҡ һаран булмай, әммә генерал-губернаторҙарҙан башҡа бер кем дә хәйерселәргә асыҡтан-асыҡ хәйер өләшмәй.

Урындағы тауарҙар менән һатыу итеүҙән төшкән килем иҫәбенән иҡтисади капитал тип нарыҡланған аҡса йыйыла, ул тулыһынса төбәктең төп начальниктары ҡарамағында була.

Перовский үҙенең тәүге идара итеү ваҡытында карауанһарай тәҙәттөрә, ул хәҙер губерна идаралығына һәм губернаторға фатир итеп бирелгән; хәҙер реаль училище урынлашҡан бина Перовский идаралығытан киткән мәлдә тулыһынса тәҙәләп бөтмәгән була, уны махсус файҙаланыу ҡуҙаллана, әммә генерал Обручевтың юллауы буйынса унда Неплюев кадет корпусының 2-се эскадроны урынлаша, ә һуңынан халыҡ мәғарифы министрлығына тапшырыла: тәүҙә уны уҡытыусылар институты билдәй, аҙаҡ ул реаль училище менән алмаштырыла.

Уның идаралығы ваҡытында дворяндар йыйылышы тәҙәлә, ул ошо исем аҫтында 1879 йылға тиклем йәшәй; быйыл ҡаланың ярһыһынан да күберәк өлөшөн харап иткән ҙур янғын ваҡытында бина ҙур зыян күрҙе; ремонт өсөн бында аҡса булмай, һәм генерал-губернатор Крыжановскийҙың бойороғо менән ул ҡалаға бирелә һәм йәмиғ йорто тип атала башлай; уны тәҙәкләндереү ҡала банктан алған оҙайлы ссуда иҫәбенә башҡарыла. Ул, йәмәғәт йыйылышы тип аталған хәлдә лә, элеккесә интеллигент-чиновниктар ҡарамағында, ә сауҙагәрҙәр үҙҙәренең коммерция йыйылышын тәҙәнә, бының өсөн шәхси йорттарҙы ялләйҙәр.

Йәмәғәт йыйылышы бинаһын дворяндарға кире ҡайтарырға була ине, әммә губерна башлығы Шотт, дворяндарҙың аҡсалары етмәүенә һәм ошо ваҡытта дөйөм дворян милегеН Ырымбур һәм Өфө дворяндары араһында бүлешеү буйынса эштең хәл ителмәүенә һылтанып, быны бер ҡайҙа ла һорамай, ә мин башлыҡ булған ваҡытта дворяндар ошо бинаны ҡайтарырға теләне, әммә уның юридик яҡтан ҡала йәмғиәтенеке булыуы һәм старшиналар тарафынан идара ителеүе арҡаһында һуңғылары бинаны бирергә ризалашманы һәм хатта минең шарттар ҡуйған тәкдимемә яуап та ҡайтарманы.

Урмандан төшкән килемдәр, тәҙәләштән башҡа, төбәк начальнигының шәхси ҡарамағы буйынса бүтән әйберҙәргә тотонолдо.

Перовский идара иткән осорҙа килем күп булды, бигерәк тә файҙалы поташ заводтары булған саҡта. Был ваҡытта чиновниктарға бүләктәр, пособиелар бирелде, улар араһынан ҡайһыларына түләүҙәр арттырылды. Перовский көтөлмәгән сығымдар өсөн ҡаҙнанан ни барыһы йылына 10 мең һум ассигнациялар ала ине, ә уның сығымдары күп булды: үҙенә йәйләүҙә һарай, йәйге торлаҡтар тәҙәтә, уның менән һәм уның иҫәбенә йәшәгән ҙур хеҙмәтселәр штаты тотто. Уға мөрәжәғәт иткән фәҡирҙәр өсөн махсус аҡсалар булманы; бының өсөн ул өҫтәмә сығымдарҙы ҡапларлыҡ сараларҙы урындағы сығанаҡтарҙан таба ине. Әлеге ваҡытта начальниктар законда күрһәтелмәгән килемдәрҙе йыя алмай, әммә ул саҡта ошолай итеп килем алыуҙа хөкүк боҙоуҙы күрмәнеләр, һәм Перовский үҙе башҡорттар хеҙмәтенән тупланған аҡсаларҙы тыныс намыҫ менән тотондо.

**Арыҫлан ТАЙМАСОВ тәржемәһе.**

**(Дауамы бар).**

БӨЙӨК ЕҢЕҮГӘ - 79



# ҠАҺАРМАНЛЫҠ ТАРИХЫ

## Берлин стратегик һөжүм итеү операцияһында

Совет халҡы үҙенең армияһын дошманды ахырынаса тар-мар итһен һәм Ватанына еңеү менән ҡайта алһын өсөн кәрәк булғандың барыһы менән дә тәьмин итә.

Берлин операцияһын ғәмәлгә ашырыуға өс фронттың 2,5 млн. кешеһе, 41,6 мең орудие һәм миномет, 6250 танк һәм САУ, 7500 самолет йәлеп ителә. Был ҡоралдар һәм техника дошмандан өҫтөнлөк алыу мөмкинлеген бирә. Берлин өсөн барған алыштарҙа поляк ғәскәрҙәре лә ҡатнаша: улар ике армиянан, танк һәм авиация корпустарынан, ике артиллерия дивизияһынан хасил була. Поляк ғәскәрҙәренә 3 мең орудие һәм миномет, 500-ҙән ашыу танк һәм САУ, 320 самолет бирелә.

Әҙерлек осоронда частар һәм соединениелар шәхси состав, боеприпастар, ҡорал һәм аҙыҡ-түлек менән тулыландырыла. Йылғалар, каналдарҙы кисеп сығыу, төрлө шарттарҙа һәм урындарҙа хәрби хәрәкәттәр алып барыу буйынса занятиелар, учениелар уҙғарыла, төрлө ғәскәр төрҙәренең һөжүм барышында үҙ-ара бәйләнештә хәрәкәт итеүе өйрәнелә, бигерәк тә урам һуғыштарын ниндәй тәртиптә башҡарыу ҡуҙаллана. Операцияға йәшертен рәүештә әҙерләнеүҙе тәьмин итеү иғтибар үҙәгендә була. Хәл иткес алыштар алдынан яугирҙар күпләп партия сафтарына алыуҙы һорап ғаризалар яҙа. Уларҙа "Илем өсөн үлһәм дә, коммунист булып үлергә теләйем", тигән һүҙҙәр йыш осрай. Тик бер ай эсендә генә 17 мең яугир ВКП(б) сафтарына алына. Политхеҙмәткәрҙәр һәм командирҙар алдында тағы ла бер үтә мөһим бурыс тора: ҡот осҡос вәхшәтлек ҡылған нацистарға ҡарата изге нәфрәт Гитлер пропагандаһы тарафынан алданған Германия халҡынан һуҡырҙарса үс алыуға әүерелмәҫкә тейешлеген һәр яугирға аңлатырға кәрәк була.

16 апрелдә иртә менән 1-се Белорус һәм 1-се Украин фронттары һөжүмгә күсә. Таң алдынан 1-се Белорус фронтының авиацияһы һәм артиллерияһы дошман оборонаһын бомбалар һәм снарядтар менән бик ҡаты дөмбәсләй. Артиллерия утынан ер һелкенеп торғандай тойола, дошман оборонаһы һыҙығында снарядтар шартлауынан ер һәм туҙан тиҫтәләгән метрҙарға өҫкә күтәрелә. Һөжүмдең беренсе көнөндә генә фронт артиллерияһы дошман өҫтөнә 1 236 мең снаряд яуҙыра. Реактив артиллерия залпынан һуң Кюстрин плацдармында тупланған 47-се армия, 3-сө һәм 5-се удар, 8-се гвардия һәм 69-сы армиялар атакаға ташлана. Шул уҡ ваҡытта 143 ҡеүәтле прожектор нурҙарын дошманға йүнәлтә, совет ғәскәрҙәренең һөжүмгә барыу юлы яҡтыртыла, ә дошман яугирҙары көслө нурланыштан һуҡырайған халәттә ҡала. Аяуһыҙ ҡаты алыштар ҡыҙғандан ҡыҙа бара. Таң атыуға бөҙҙең бомбаға тотоусы һәм штурм авиацияһының йөҙәрләгән самолеттары һауаға күтәрелә. Бер тәүлек эсендә 6,5 мең самолет осошо теркәлә. Шулай уҡ 61-се, 33-сө армиялар һәм Поляк Ғәскәренең 1-се армияһы 1-се Белорус фронты составында алышҡа инә.

**Вәли ИҘРИСОВ әҙерләнә.**

**(Дауамы бар).**

*✓ 1993 йылдың 5 ноябренән яңы төҙөлөүсе мәктәп директоры вазифаһында эшләй башланым. Төҙөлөш эштәрен контролдә тотоу һәм мәктәп өсөн кәрәкле мөлкәт-йыһаздарҙы әҙерләү менән шөғөлләнергә тура килде.*

# МӘҒРИФӘТСЕЛЕК ЮЛЫНДА -

## йәки Мәктәптең ҙур бер ғаиләгә

**Бөгөнгө әңгәмәсебеҙ - М. Исҡужин исемендәге 136-сы Башҡорт лицейы директоры Шәмсулла Хәбибулла улы ХӘБИБРАХМАНОВ. Ул 40 йылға яҡын педагогик эш стажы булған юғары категориялы белгес һәм етәксе. Рәсәй Федерацияһының дөйөм белем биреү буйынса маҡтаулы хеҙмәткәре, БР-ҙың атҡаҙанған уҡытыусыһы, Салауат Юлаев ордены кавалеры.**

**Шәмсулла Хәбибулла улы, әңгәмәбеҙ башында тыуып үҫкән яҡтарығыҙ, ата-бабаларығыҙ хаҡында бер кәлимә һүҙ әйтеп үтһәгеҙ ине...**

- Мин Дәүләкән районының Сапай ауылында өсөнсө бала булып донъяға килгәнмен. Ауылыбыҙҙан 3 саҡрымда ғына Асылыкүл йәйрәп ята, ата-бабаларым унда күпләп балыҡ тотоп, сауҙа иткән, хужалыҡ биләмәләре бик ҙур, мал-тыуарҙары күп булғандыр, тим. Уларҙың баҡсалары аша Сәрмәсән йылғаһы ағып ята, шуны быуып, тирмән ҡорғандар. Ырыуыбыҙ - мендәрҙең бер тармағы. Мин бәләкәй саҡта ололар һәр ғаилә кешеләренең нәҫелен дә атап әйтә торғайны, беҙҙең нәҫелебеҙҙе "ил ҡаймағы" тип йөрөттөләр.

Атай-инәйемдәр ябай колхозсы булды, атайым Хәбибулла Бөйөк Ватан һуғышы бөткәнсе фронтта булған, түшендә орден-миҙалдары ла байтаҡ булды. Минән 3 йәшкә кесерәк Азат туғаным тыуғас, әсәйебеҙ ныҡ ауырып киткән. Ул саҡта апайыма 10 йәш, ә беҙ бик бәләкәйбеҙ, ҡарарға кеше юҡ. Мине нәнәйем менән ҡарттайым тәрбиәләп үҫтерҙе. Ауылыбыҙҙа башланғыс мәктәпте тамамлағас, 2 саҡрым аралағы Ҡыҙрасҡа йәйәү йөрөп уҡыныҡ.

**Һеҙгә белем биргән уҡытыусыларығыҙ ҙа иҫегеҙҙә ҡалғандыр?**

- Ҡыҙрас мәктәбе бик матур итеп кирбестән һалынған типовой мәктәп ине. Уны фронтовик Фәрит ағай Зәйнуллин бик яҡшы итеп төҙөткән, ул 1965 йылда асылған. Әйтергә кәрәк, мәктәбебеҙҙә ул саҡта талап ителгән барса йыһаздар ҙа булды - физика, химия кабинеттары приборҙар, химикаттар менән тулыһынса тәьмин ителде. Уларҙа дәрестәрҙең бик тә ҡыҙыҡлы үтеүе хәтерҙә уйылып ҡалаған. Мәктәп мастерскойында ла уҡыусыларҙы ниндәйҙер һөнәргә өйрәтер өсөн станоктар, төрлө инструменттар, балта, ҡасау, йышҡы кеүек әйберҙәр бик күп булды. Мәктәптә юғары уҡыу йорттарын тамамлап ҡайтҡан йәш уҡытыусылар эшләне, физкультура уҡытыусыһы - штанга күтәреү буйынса Башҡортостан чемпионы, НВП-нан запастағы офицер ине. Ике туған Мөхәмәт ағайым Ҡыҙрас мәктәбендә математика уҡытыусыһы булып эшләй ине, уның үҙенең балалары булманы, шуғалыр ҙа, мине йыш ҡына үҙе менән бергә йөрөтөп, күп нәмәләргә өйрәтте.

Ул ваҡытта мәктәптә уҡыусыларҙы ашатыу-фәлән ойошторолмағайны, шуға күрә йүгерә-атлап, ауылыбыҙға төшкө ашҡа ҡайтабыҙ ҙа, яңынан мәктәпкә йүнәләбеҙ - төштән аҙаҡ йәш уҡытыусылар төрлө түңәрәктәр уҙғара торғайны. Бер ваҡыт мин үҙем рәсем түңәрәгенә йөрөй башланым, башҡа балалар йөрөмәгәс, уҡытыусыбыҙ тик минең менән генә шөғөлләнде. Ул тәү башлап миндә рәсем төшөрөүгә ҡыҙыҡһыныу уятҡандыр, тим. Аҙаҡ ул мәктәптән китте, әммә миңә мәктәптә яңы эш табылды: ул саҡта мәктәп өсөн төрлө плакаттарҙы, лозунгыларҙы үҙебеҙ эшләй инек. Мәктәп директоры мине саҡырып ала ла, икәүләп, тейешле темаға плакат төшөрәбеҙ. Шул саҡта плакат перолары менән матур ғына итеп яҙырға ла өйрәндем. Аҙаҡтан, армияға хеҙмәткә саҡырылғас, файҙаһы тейҙе был һөнәремдең.

Мәктәпте тамамлағас, БДУ-ның математика факультетына имтихандар тапшырҙым, әммә конкурстан үтеп булманы. Шунан водителдәр курсына уҡырға барҙым. Унан ҡайтыуыма, ситтән тороп вузда уҡыған Мөхәмәт ағайым уҡыуын тамамлау өсөн мәктәптән китте лә, үҙе урынына мине ҡалдырҙы. Әрме хеҙмәтенә киткәнсе математика, физика фәндәрен уҡыттым. Минең уҡыусыларым үҙемдән 2-3 йәшкә генә бәләкәйерәк инеләр.

**Әрме хеҙмәте нисегерәк үтте?**

- Өфөнән беҙҙе, бер эшелон һалдатҡа алыныусыларҙы, тура Балтик диңгеҙе буйына, Калининград ҡалаһына алып барҙылар. Килеп төшкәс, мең-ләгән һалдат урамда баҫып торабыҙ. Шул саҡ бер капитандың: "Кем художник?" - тип ҡысҡырыуы ишетелде. Мин ҡулымды күтәрҙем. Ул тушь һәм перолар бирҙе лә, "Яҙып күрһәт! " тине. Күрһәттем. Оҡшатҡандыр инде, минең документтарҙы алып, машинаға ултыртып алып китте. Мине армия штабының һаҡ һәм хеҙмәтләндереүселәр ротаһы казармаһына урынлаштырҙылар, ул немецтарҙан ҡалған бер бина ине. Шунан "Йәш яугир курсы"на, йәғни карантинға алып киттеләр, унда бер ай самаһы булдым. Артабан армия штабының оператив бүлегенә 4 һалдатты чертежсы итеп тәғәйенләнеләр. Уларҙың береһе Ереван педагогия институтының художество-графика факультетын тамамлаған, икенсеһе Волгоградта архитектура-төҙөлөш институтында уҡыған - ижади кешеләр. Төп эшебеҙ - армия штабының карталары менән эшләйбеҙ. Унда учениелар ваҡытында ниндәй боевой хәрәкәттәр була - оборонамы, һөжүм итеүме - шуларҙы карталарҙа символдар менән күрһәтәбеҙ. Барса командирҙар шул карталар менән файҙалана. Командирҙарыбыҙ беҙгә шундай иғтибарлы булды, эш бүлмәбеҙгә йәнәш ял итеү бүлмәһе лә бар ине, унда диван ҡуйылған, ҙур булмаған китапханаһы ла бар. Беҙ эшләгән бүлмә "секретный" булғас, беҙҙең янға инеп йөрөү өсөн ни барыһы 3 офицерға пропуск бирелә ине. Минең менән эшләгән чертежсылар демобилизацияланғас, өлкән чертежсы булып ҡалдым, яңы килгән ике һалдатҡа эш айышын өйрәтергә тура килде.

**Әрме хеҙмәтендә саҡта уҡ һеҙ педагогия институтының художество-графика факультетына инергә ҡарар иттегеҙ инде?**

- Армиянан ҡайтҡас, өйләндем, колхозда биҙәлеш буйынса рәссам булып эшләнем, мәктәптә түңәрәк алып барҙым. Ауылыбыҙҙа БДПИ-ның художество-графика факультетында уҡыған студенттар ҙа булды, улар миңә ошо факультетҡа уҡырға инергә тәҡдим итте. Үҙем дә махсус юғары белем алыуға өмөт иттем. Физика-математика факультетының әҙерлек бүлегенә уҡырға индем. Ни өсөн? Художество-графика факультетының әҙерлек бүлеге булманы, ә уҡырға инеү өсөн 7 предметтан ҡабул итеү имтихандарын бирергә кәрәк: шул уҡ математиканан, физиканан, рус теленән һәм махсус предметтарҙан. Шулай итеп, 1980 йылда Башҡорт дәүләт педагогия институтының художество-графика факультетының 1-се курсында уҡый башланым.

**Һеҙ уҡыған факультет махсус һәләттәрҙе үҫтереүҙе талап итә. Был йәһәттән нисегерәк булды?**

- Беҙҙе Мәскәүҙә, Ленинградта абруйлы махсус уҡыу йорттарын тамамлаған рәссамдар, скульпторҙар, үҙ һөнәрҙәре буйынса талантлы педагогтар уҡытты, художество сәнғәте алымдарына өйрәтте. Уҡыу шарттары яҡшы: һәр бер предмет буйынса махсус йыһазландырылған айырым аудиторияларҙа шөғөлләндек. Йәнә беҙҙең курста 2-се һанлы Өфө педагогия училищеһының художество-графика бүлеген тамамлаған студенттар ҙа уҡыны. Улар беҙҙең специальность буйынса яҡшы әҙерлекле булғас, эштәребеҙҙең етешһеҙерәк яғын күрһәтеп, төҙәтергә ярҙам итәләр. Педагогтар биргән заданиеларҙы мастерскойҙа башҡарабыҙ, кемдең нисек эшләгәнен ҡарап, күреп торабыҙ. Үҙебеҙ ҙә тырыша инек. Күп нәмәгә уҡытыусыларыбыҙҙан ғына түгел, бер-беребеҙҙән өйрәнә алдыҡ.

Тағы ла шуны әйтеп үтергә кәрәк: каникулдарҙа, йәй көндәрендә биҙәлеш буйынса рәссам вазифаһында эшләп, аҙмы-күпме аҡса туплау мөмкинлеге булды. Ул ваҡыттарҙа ойошмаларҙа, предприятиеларҙа ҡыҙыл мөйөштәрҙе, Ленин бүлмәләрен матур итеп биҙәргә тырыштылар бит. Башҡарған эшебеҙ художество һәләттәрен талап иткәс, эш хаҡы ла ҙур булды. Мәҫәлән, үҙебеҙҙең колхозыбыҙҙа Бөйөк Ватан һуғышында ҡатнашҡан яугирҙар иҫтәлегенә арналған обелиск эшләп ҡуйҙым, ул хәҙер ҙә шул урында тора. Шулай бер ферманың айырым бинаһындағы ҡыҙыл мөйөштө буяуҙар менән биҙәп, Ленин портретын, ҡыҙыл флагтар төшөрөп эшләп ҡуйғайным. Ул ферма күптән бөткән, әлеге бинаның ҡыйығы ла юҡ, ә минең стенаға грунтовка һылап, тәбиғи буяуҙар менән фреска һымаҡ эшләгән һүрәттәрем әлегә тиклем һаҡланып ҡалған.

**Уҡытыу эшен ниндәй мәктәптә башлап ебәрергә насип булды?**

- Институтты тамамлағас, Өфө ҡалаһы Киров районының 34-се мәктәбенә эшкә алдылар, ул Кооператив яланы биҫтәһендә урынлашҡан. Унда рәсем һәм хеҙмәт уҡытыусыһы вазифаларында эшләнем. Һуңынан Һупайлы биҫтәһендә төҙөлә генә башлаған мәктәп директоры вазифаһына конкурста ҡатнашырға тәҡдим иттеләр. Комиссия конкурста ҡатнашҡан бер нисә кешенән директор итеп мине һайларға тәҡдим итте. 1993 йылдың 5 ноябренән яңы төҙөлөүсе мәктәп директоры вазифаһында эшләй башланым. Төҙөлөш эштәрен контролдә тотоу һәм асыласаҡ мәктәп өсөн барса кәрәкле мөлкәт-йыһаздарҙы алдан әҙерләп ҡуйыу менән шөғөлләнергә тура килде.

**136-сы Башҡорт мәктәп-лицейы тип асылған дөйөм урта белем биреү усағының 30 йыллыҡ тарихы һеҙҙең етәкселектә формалашты бит инде. Ошо хаҡта ентекләберәк һөйләп үтһәгеҙ ине.**

- Уҙған быуаттың 90-сы йылдарында күп нәмә, шул иҫәптән мәктәптең уҡытыу-тәрбиә эшен матди яҡтан тәьмин итеү өсөн кәрәк булған әйберҙәргә ҡытлыҡ булды. Парталар, өҫтәл-шкафтарҙан башҡа, кабинеттар, мастерскойҙар, ашхана һәм стоматология кабинеты өсөн мотлаҡ кәрәк булған йыһаздарҙы мәктәп асылғанса уҡ әҙерләп өлгөртөү зарурлығы тыуҙы, ә уларҙы ҡайҙан да булһа эҙләп

*Асыласаҡ мәктәпкә һәләтле педагогтарҙы һайлап алыу өсөн конкурс ойоштороҙоҡ. Уның эшендә билдәле йәмәғәт эшмәкәре, 1970 йылда баш ҡалабыҙҙа арҡадаштары Иҙел Агишев, Әмир Сиражетдинов һәм Хәниф Вәлиев менән бергә 20-се башҡорт мәктәбен астырыуға өлгәшкән Мөхәмәтғәли Ғәли улы Исҡужин да ҡатнашты. 1993 йылда ул Өфөлә тағы ла бер башҡорт мәктәбен астырыу маҡсатында Октябрь районының Һупайлы биҫтәһендә ата-әсәләрҙең ҡултамғаларын йыйыуҙы ойошторҙо, Мәғариф министрлығына, ҡала етәкселәренә мөрәжәғәт итте. Һөҙөмтәлә ул саҡтағы ҡала етәксеһе Фидус Ямалетдинов яңы төҙөлә башлаған белем усағын башҡорт мәктәбе итеп асыу тураһындағы ҡарарға ҡул ҡуйҙы.*

✓ ***Беҙ мәктәп-лицей булараҡ асылдыҡ. 90-сы йылдарҙа был статус йүнәлешле уҡытыуҙа, уҡыу программаларын төҙөүҙә, уҡыу әсбаптарын ҡулланыуҙа педагогик коллективҡа билдәле бер кимәлдә ирек бирә ине.***



# 30 ЙЫЛ,
## әйләнеүе хаҡында

табырға кәрәк. "Башкомснаб" кеүек учреждениеларға күп йөрөргә тура килде. Октябрь районының 130-сы мәктәбенән ике бүлмә бирҙеләр, әйберҙәрҙе шунда ташыныҡ. Өфө ҡалаһы хакимиәтенең Капиталь төҙөлөш идаралығынан мәктәп өсөн йөк машинаһы һоратып алдырҙым, әйберҙәрҙе шуның менән ташыныҡ. Шулай итеп, 1994 йылдың 1 сентябренә барса кәрәкле мебель һәм йыһаздарҙы әҙерләп бөттөм. Ата-әсәләрнеҡ ярҙамлашты, сөнки алып ҡайтылған йыһаздарҙы үҙебеҙгә йыйырға тура килде.

**Асыласаҡ башҡорт мәктәбенең педагогик коллективын да туплап өлгөртөргә кәрәк, был мәсьәләне нисек хәл иттегеҙ?**

-1994 йылдың февраленән уҡ ошо эште лә башлап ебәрҙек. Төҙөләүсе мәктәптең ҡаршыһында ғына урынлашҡан 127-се мәктәптә эшкә саҡырылған уҡытыусылар менән әңгәмәләшеү мөмкинлеге булды. Асыласаҡ мәктәпкә һәләтле педагогтарҙы һайлап алыу өсөн конкурс ойошторҙоҡ. Уның эшендә билдәле йәмәғәт эшмәкәре, 1970 йылда баш ҡалабыҙҙа арҡадаштары Иҙел Агишев, Әмир Сиражетдинов һәм Хәниф Вәлиев менән бергә 20-се башҡорт мәктәбен астырыуға өлгәшкән Мөхәмәтғәли Ғәли улы Исҡужин да ҡатнашты. 1993 йылда ул Өфөлә тағы ла бер башҡорт мәктәбен астырыу маҡсатында Октябрь районының Һупайлы биҫтәһендә ата-әсәләрҙең ҡултамғаларын йыйыуҙы ойошторҙо, Мәғариф министрлығына, ҡала етәкселәренә мөрәжәғәт итте. Һөҙөмтәлә ул саҡтағы ҡала етәксеһе Фидус Ямалетдинов яңы төҙөлә башлаған белем усағын башҡорт мәктәбе итеп асыу тураһындағы ҡарарға ҡул ҡуйҙы. М.Ғ. Исҡужин һуңынан беҙҙең лицейыбыҙға йыш ҡына килеп йөрөнө, эштәр барышы менән һәр даим ҡыҙыҡһынып торҙо. Хәҙер 136-сы Башҡорт лицейы Мөхәмәтғәли Исҡужин исемен йөрөтә.

**Һеҙ етәкләгән дөйөм белем биреү учреждениеһы Өфө ҡалаһында Фатима Мостафина исемендәге 20-се Башҡорт гимназияһы асылғандан һуң теүәл 24 йыл ваҡыт үткәс эшләй башланы. Ул ҡала мәктәптәре араһында тәүләп тигәндәй инновацион йүнәлеште һайланы...**

- Элегерәк байтаҡ йылдар эшләгән, яҡшы ҡаҙаныштары булған мәктәптәргә гимназия йә иһә лицей исеме бирелде. Былдай уҡыу йорттарының, үҙенсәлектәре, ауырлыҡтары менән бер рәттән, билдәле бер өҫтөнлөктәре лә булды. Шуға күрә мин яңы башҡорт мәктәбенең документтарын лицей статусын бирерлек форматта төҙөп, Мәғариф министрлығына алып барҙым, унда ризалаштылар. Шулай итеп, беҙ мәктәп-лицей булараҡ асылдыҡ. 90-сы йылдарҙа был статус йүнәлешле уҡытыуҙа, уҡыу пландарын, программаларын төҙөүҙә, дәреслектәрҙе һәм уҡыу әсбаптарын ҡулланыуҙа педагогик коллективҡа билдәле бер кимәлдә ирек бирә ине. Шулай уҡ предметтарҙы тәрәнәйтеп өйрәтеү өсөн вуз уҡытыусыларын саҡырып, уларға йылына барлығы 1 500 сәғәт күләмендә эш хаҡын түләү мөмкинлеге булды. Йәнә мәктәптә 15 түңәрәк эшләй башланы. Лицейҙа уҡытҡан педагогтарға 15 процент өҫтәмә түләү ҙә ҡаралғайны, башҡа мәктәптәрҙә ирегеттәр һанаулы ғына булғанда, лицейҙа тәүге йылда уҡ 20-нән ашыу ир кеше эшләне.

**Мәктәптең концепцияһы тураһында ла әйтеп үтеү урынлы булыр. Ҡәҙимге ҡала мәктәптәрендә белем алған балаларҙы башҡорт мәктәбе уҡыусыһы итеп формалаштыра, үҫтерә алыу уҡытыу-тәрбиә процесында төп проблемаларҙың береһе булғандыр?**

- Педагогика өлкәһендәге күренекле ғалимдарҙың, методистарҙың хеҙмәттәрен ентекләп өйрәндек, музыка һәм художество йүнәлештәрен баштан уҡ нигеҙле итеү маҡсатында Мәскәү ҡалаһының ошондай типтағы мәктәптәренең уҡыу пландарын ҡулландыҡ. Концепциябыҙҙың төп идеяларының береһе - башҡорт мәктәп-лицейын күп профилле дөйөм белем учреждениеһы итеп формалаштырыу ине. Әйтергә кәрәк, балаларҙың нимәгә һәләтле икәнен 1-се кластан уҡ аныҡларға тырыштыҡ. Тәбиғи фәндәрҙән математика предметын тәрәнәйтеп өйрәтеүҙе, гуманитар фәндәр, музыка һәм художество йүнәлештәрен тәҡдим иттек, бер аҙҙан инглиз телен тәрәнәйтеп өйрәнеү кластарын астыҡ. Был уңышлы башланғыс булды: мәҫәлән, 1997 йылда беҙҙең лицей олимпиадалар һөҙөмтәләре буйынса 2-се урынға сыҡты. Унан һуң, ҡуйылған маҡсаттарға өлгәшеү өсөн үҙебеҙ төҙөгән уҡыу пландарын ул саҡтағы мәғариф министры урынбаҫары Юлмөхәмәтов Миңдебай Бәхтиәр улынан раҫлатып ала инек. Ул раҫлаһа, эште тейешле кимәлдә финанслау мөмкин була ине.

Дәрестәр һаны етерлек булғас, иркенләп эшләү мөмкинлеге бар ине ул йылдарҙа. Беҙ кластан тыш дәрестәргә ҙур иғтибар бирҙек: башланғыс кластар өсөн оҙайтылған көн булдырҙыҡ, уҡыусылар ике ҙур спорт залына секцияларға йөрөй, шулай уҡ милли көрәш, шахмат түңәрәктәре балаларҙы ныҡ ҡыҙыҡһындыра торғайны. Хореография залында бер юлы 3 бейеү түңәрәге эшләне. Төштән һуң вуз уҡытыусылары, мәҫәлән, тарих фәндәре докторы, профессор Нәзир ағай Ҡолбахтин, математика-физика фәндәре кандидаты Дамир Латипов һ.б. үҙ фәндәре буйынса уҡыусылар менән шөғөлләнергә килә. Литва ССР-ның мәғариф алдынғыһы, талантлы математика уҡытыусыһы Маһира Әбдрәхим ҡыҙы Хәкимова ла уҡыусыларҙың математика буйынса һәләттәрен үҫтереүгә күп көс һалды. Ишмөхәмәт Әхмәҙулла улы Шарапов, РСФСР Мәғариф министрлығының Милли мәктәптәрҙә белем биреү ғилми-тикшеренеү институтының Башҡортостан филиалында өлкән ғилми хеҙмәткәр вазифаһында эшләүенә ҡарамаҫтан, мәктәп-лицейҙа башҡорт теле уҡытыусыһы булып эшләй башланы. Бер нисә тиҫтә методик баҫмалар авторы, оло йәшенә тиклем йөрәгендә шиғриәт шауҡымын һаҡлап йөрөткән уҙаман, башҡорт телендә йүнләп һөйләшә алмаған, уҡый-яҙа белмәгән уҡыусыларҙа нисек итеп туған телдәренә һөйөү уятыу хаҡында уйланды, башҡорт теле һәм әҙәбиәтен уҡытыуҙы юғары методик кимәлгә еткереүгә күп көс һалды. Башҡортостан мәҙәниәте уҡытыусыһы Миңзәлә Ишбулды ҡыҙы Юлмөхәмәтова әле яңы ғына индерелгән предметты барса ижади көсөн һалып уҡытты, мәктәп кимәлендә әллә күпме мәҙәни саралар ойошторҙо. Беҙ уның кабинетын музей кеүек итеп эшләгәйнек, беҙгә килгән ҡунаҡтар шул кабинетҡа һоҡланып ҡарап китерҙәр ине, ҡала конкурсында уға 1-се урын бирҙеләр.

**Бер үк ваҡытта тәрбиә эше лә көҙ уңынан ысҡындырылмағандыр?**

- Эйе, мәктәбебеҙ яңы ғына эшләй башлаған көндәрҙән үк педагогик советта барса тәрбиә сараларын фәҡәт башҡорт телендә уҙғарыу тураһында ҡарар ҡабул иткәйнек. Әлбиттә, тәүҙә ауырлыҡтар ҙа булды, әммә был принцип теүәл үтәлә килде. Тәүге йыл аҙағында I Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайына арналған ҙур мәҙәни сара - "Мең ырыуы йыйыны" инсценировкаһын сәхнәләштереп, акт залын тултырып ултырған арҙаҡлы ҡунаҡтарыбыҙға, ата-әсәләргә күрһәттек. Был сарала уҡыусылары менән бергә уҡытыусыларыбыҙ ҙа ҡатнашты. Сара бөткәс, тамашасылар, аяғүрә баҫып, залды көслө алҡыштарға күмде. Был беҙҙең тәүге еңеүебеҙ булғандыр, тим. Хәҙер инде йыл һайын шәжәрә байрамын уҙғарыу лицей традицияһына әйләнде.

Унан һуң, уҡыусыларыбыҙҙың барыһы ла бейеү түңәрәктәренә бик теләп йөрөй торғайны. Әйтергә кәрәк, лицейҙың йәш бейеүселәрен, йырсыларын, вокаль төркөмдө төрлө сараларға концерт номерҙары менән сығыш яһарға йыш саҡыра башланылар. Улар филармония залында, элекке "Нефтсе" мәҙәниәт һарайында үҙҙәренең талантарын күрһәтте. Лицейҙа 20 йылға яҡын директорҙың тәрбиә эштәре буйынса урынбаҫары булып Хәтмуллина Гөлсирә Мөхәррәм ҡыҙы эшләне, ул бик һәйбәт ойоштороусы булараҡ танылыу тапты. Йыл һайын ул ойошторған шәжәрә байрамдарын, башҡа сараларҙы көтөп алалар ине, ул шул тиклем күркәм үтә, уны ҡарарға рус мәктәптәре уҡытыусылары ла килә торғайны хатта.

Йырсы, композитор Артур Туҡтағоловты уҡыусыларыбыҙҙың яңы ғына барлыҡҡа килгән "Шоңҡар" төркөмөнә етәксе итеп саҡырҙыҡ, ул беҙҙең йәш музыканттарыбыҙҙы бик тиҙ арала төрлө музыка ҡоралдарында уйнарға өйрәтте. Хәҙер дәрестәр башланыр алдынан ҡәҙимге ҡыңғырау урынына Артур Туҡтағолов яҙған лицей гимнын беҙҙә уҡып сыҡҡан Алмас Шаммасов башҡарыуында репродукторҙарҙан бар мәктәпкә яңғыратабыҙ.

(Дауамы 10-сы биттә).



***Педагогика өлкәһендәге күренекле ғалимдарҙың, методистарҙың хеҙмәттәрен ентекләп өйрәндек, музыка һәм художество йүнәлештәрен баштан уҡ нигеҙле итеү маҡсатында Мәскәү ҡалаһының ошондай типтағы мәктәптәренең уҡыу пландарын ҡулландыҡ. Концепциябыҙҙың төп идеяларының береһе - башҡорт мәктәп-лицейын күп профилле дөйөм белем учреждениеһы итеп формалаштырыу ине. Әйтергә кәрәк, балаларҙың нимәгә һәләтле икәнен 1-се кластан уҡ аныҡларға тырыштыҡ. Тәбиғи фәндәрҙән математика предметын тәрәнәйтеп өйрәтеүҙе, гуманитар фәндәр, музыка һәм художество йүнәлештәрен тәҡдим иттек, бер аҙҙан инглиз телен тәрәнәйтеп өйрәнеү кластарын астыҡ. Был уңышлы башланғыс булды: мәҫәлән, 1997 йылда беҙҙең лицей олимпиадалар һөҙөмтәләре буйынса 2-се урынға сыҡты.***

*✓ Республикабыҙҙың гимназиялары, лицейҙары - үҙенә күрә "элитар" уҡыу йорттары бит, улар тәртип ҡағиҙәләрен үтәмәгән, уҡыуға илке-һалҡы ҡарағандар өсөн тәғәйенләнмәгән.*

# МӘҒРИФӘТСЕЛЕК ЮЛЫНДА - 30 ЙЫЛ,

## йәки Мәктәптең ҙур бер ғаиләгә әйләнеүе хаҡында

(Башы 8-9-сы биттәрҙә).

**Һеҙҙең лицей эшләй башлағандан һуң баш ҡалабыҙ Өфөлә тағы бер нисә башҡорт белем усағы үҙ ишектәрен асты...**

- Эйе, уҡытыу-тәрбиә эшмәкәрлегендә уңыш ҡаҙаныуыбыҙ Өфөлә яңы башҡорт мәктәптәрен асыуға юл һалды, тиергә булалыр. Ике йылдан Калинин районында З.Биишева исемендәге 140-сы Башҡорт гимназияһы, тағы ла бер йылдан Орджоникидзе районында 48-се Башҡорт лицейы асылды. 2004 йылда Ленин районында электән эшләп килгән бер мәктәп 2-се Башҡорт лицейы тип үҙгәртелде, 2006 йылда Киров районында М.Кәрим исемендәге 158-се Башҡорт гимназияһы һәм Дим районында Рауил Бикбаев исемендәге 102-се Башҡорт гимназияһы эшләй башланы. Уларҙан башҡа, Калинин районында 122-се Башҡорт гимназияһы бар. Ғөмүмән, беҙҙең лицей Өфө ҡалаһында башҡорт милли мәғарифын үҫтереү буйынса өр-яңы дәүерҙе асты, тип һығымта эшләргә ерлек бар.

Тора-бара 136-сы лицей башҡорт мәктәптәре өсөн үҙенә күрә бер методик үҙәккә әйләнде: беҙҙең педагогик эшмәкәрлегебеҙ менән танышыу, тупланған тәжрибәбеҙҙе өйрәнеү маҡсатында Өфөнән генә түгел, республикабыҙҙың башҡа ҡалаларынан һәм райондарынан делегациялар килә башланы. 1997 йылда Өфө ҡалаһы мәғариф хеҙмәткәрҙәренең август конференцияһы беҙҙең лицей базаһында уҙғарылды. Бер йылда БР Хөкүмәтенең Премьер-министры урынбаҫары Миҙхәт Әхмәтхан улы Мәмбәтов махсус рәүештә республикабыҙҙың ҡала-райондары башлыҡтарының социаль эштәр буйынса урынбаҫарҙарын лицейҙы күрһәтергә алып килде.

Башҡа башҡорт мәктәптәре балаларҙы уҡырға ҡабул итеү буйынса беҙҙең тәжрибәне ҡуллана башланы. Республикабыҙҙың гимназиялары, лицейҙары - үҙенә күрә "элитар" уҡыу йорттары бит, улар тәртип ҡағиҙәләрен үтәмәгән, уҡыуға илке-һалҡы ҡарағандар өсөн тәғәйенләнмәгән. Шуға күрә уҡыусыларҙы 1-се кластан башлап һайлап алдыҡ, мәктәп психологы, айырым предмет уҡытыусылары лицейҙа уҡырға теләүсе балалар менән тестар, имтихандар уҙғарҙы. Беҙҙә башҡа мәктәптәргә ҡарағанда уҡыусыларға талаптар ҙа, уҡытыу сифаты ла бермә-бер юғарыраҡ ине, шуға күрә ата-әсәләр араһында лицейҙың абруйы ҙур булды. Йәйге каникулдарға сыҡҡас, ата-әсәләр көн һайын тиерлек балаларын уҡырға алырға һорап килә башланы. Иң мөһиме, кластарыбыҙ балалар менән тулы. Быйылғы уҡыу йылында 1-се кластар өсәү, һәр береһендә 34-әр бала уҡый.

**Лицейҙа уҡытыусыларҙың методик эшенә ҙур иғтибар бирелеүен билдәләп үтергә кәрәктер?**

- Ул саҡта гимназияларҙағы, лицейҙарҙағы тағы ла бер яңылыҡ - фән һәм методика эштәре буйынса директор урынбаҫары вазифаһын индереү. Методик эштәрҙең әһәмиәтен күтәреү маҡсатында кафедралар булдырылды - математика, башҡорт теле, рус теле, сит ил телдәре һәм башҡа предмет уҡытыусылары айырым кафедраларға берләште, уларҙың һәр ҡайһыһының етәксеһе һайлап ҡуйылды. Уҡытыусыларҙы аттестациялау буйынса һәр даим систематик саралар ойошторолдо, лицейҙың үҙенең аттестация комиссияһы эшләй башланы. Һөҙөмтәлә 2-се, 1-се һәм юғары категориялы уҡытыусылар күбәйҙе. Аттестация комиссияһы етәксеһе вазифаһын байтаҡ йылдар Ирек Ғәлиулла улы Вәлиев башҡарҙы, ул методик эштәрҙе заманса талаптарға ярашлы ойоштора алды.

**Йәнә лицейҙа эш тәжрибәһен туплап, үҙҙәрен яҡшы ойоштороусы итеп танытҡан байтаҡ ҡына педагогтарҙың һуңынан власть органдарына, башҡа ойошмаларға саҡырылып, юғары вазифаларға тәғәйенләнеүен дә билдәләп үтеү урынлы булыр...**

- Эйе, был беҙҙең лицейҙың абруйын бермә-бер күтәрҙе. Сынтимир Баязитовты 140-сы Башҡорт гимназияһы директоры итеп ҡуйҙылар, аҙаҡтан ул Өфө ҡала хакимиәтенең Мәғариф идаралығын етәкләне, байтаҡ йылдар Өфө ҡалаһы хакимиәте башлығы урынбаҫары вазифаһын башҡарҙы. Тағы ла бер йәш директор урынбаҫары Азамат Абдрафиҡов республикабыҙҙың дәүләт органдарында яуаплы вазифаларҙа эшләне. Ә Рөстәм Ишмөхәмәтов Дәүләт Думаһы депутаты, БР Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтай рәйесе урынбаҫары вазифаларын биләне. Искәндәр Санъяров - БР Башлығы хакимиәтендә идаралыҡ начальнигы урынбаҫары. Минзиә Юмалина, Зәйтүнә Мөхәмәтова, Мөхтәр Собханғолов БР Мәғариф министрлығында эшләне. Шулай уҡ ошондай яҡшы карьера эшләгән уҡытыусыларыбыҙҙан Гөлнур Сәлимованы, Маргарита Түлебаеваны, Илдар Моталовты, Альбина Баязитованы, Анфиса Шакированы, Әхмәт Искәндәровты атап китергә булыр ине.



*Ике йылдан Калинин районында З.Биишева исемендәге 140-сы Башҡорт гимназияһы, тағы ла бер йылдан Орджоникидзе районында 48-се Башҡорт лицейы асылды. 2004 йылда Ленин районында электән эшләп килгән бер мәктәп 2-се Башҡорт лицейы тип үҙгәртелде, 2006 йылда Киров районында М.Кәрим исемендәге 158-се Башҡорт гимназияһы һәм Дим районында Рауил Бикбаев исемендәге 102-се Башҡорт гимназияһы эшләй башланы. Уларҙан башҡа, Калинин районында 122-се Башҡорт гимназияһы бар. Ғөмүмән, беҙҙең лицей Өфө ҡалаһында башҡорт милли мәғарифын үҫтереү буйынса өр-яңы дәүерҙе асты, тип һығымта эшләргә ерлек бар.*

**Һәр мәктәп уҡыусылары менән данлы. Лицейҙы тамамлаусылар тураһында бер кәлимә һүҙ әйтеп үтегеҙ әле.**

- 30 йыл арауығында лицейҙы меңгә яҡын уҡыусы тамамланы. Уларҙың барыһы ла тормошта үҙ юлын, үҙ һөнәрен тапты. Улар башлыса юғары белемле. Төрлө яуаплы вазифаларҙа эшләүселәр күп. Уларҙан БР Башлығы хакимиәтендә өлкән референт булып эшләүсе Алмас Шаммасовты, Хөкүмәт аппаратында бүлек начальниктары вазифаһын башҡарған Азат Кәримовты һәм Ания Ғәниеваны, БР Мәҙәни мираҫ объекттарын дәүләт һаҡлауы буйынса идаралыҡ начальнигы, тарих фәндәре кандидаты Салауат Ҡолбахтинды, Мәскәү дәүләт университетында медицина биотехнологиялары буйынса белем алып, махсус предприятиела эшләүсе Розалия Ғәбиҙуллинаны, филология фәндәре кандидаты, башҡорт теле уҡытыусыһы Венер Әсмәндиәровты, эшҡыуар Муса Мәзитовты, Мәскәүҙә Щепкин исемендәге театр училищеһын тамамлаған, әлеге ваҡытта БР-ҙың атҡаҙанған артистары Милена Сираеваны һәм Гөлнара Айытбаеваны, Санкт-Петербургта кино һәм телевидение режиссураһы факультетын тамамлаған Әлиә Яруллинаны, Өфө фән һәм технологиялар университеты уҡытыусыһы, фән кандидаты Әлиә Рәхмәтуллинаны, өс вузды ҡыҙыл дипломға тамамлаған, психология һәм һаулыҡ һаҡлау магистры, тәржемәсе-полиглот Сәғит Бәҙретдиновты исемләп атап китеү урынлы булыр. Унан башҡа, урындағы власть органдарында, төрлө ойошмаларҙа хеҙмәт иткәндәр, бизнес менән шөғөлләнгәндәр бик күп. Шулай уҡ хеҙмәт урынын Японияла, Ҡытайҙа, Төркиәлә, башҡа илдәрҙә тапҡандар ҙа бар. Әлеге мәлдә Мәскәү дәүләт университетында, Санкт-Петербург һәм башҡа ҡалаларҙың вуздарында белем алыусылар байтаҡ.

***✓ "Нигеҙ" фильмын унда бик оҡшаттылар. Призерҙарҙы бүләкләгәндән һуң, эргәмә килеп: "Хаҡлы баһа, ҡотлайбыҙ!" - тип әйтеүселәр күп булды. Күпме хеҙмәт, һөйөү, күңел һалынды уға.***



**Һуңғы йылдарҙа лицейҙа ниндәй үҙгәрештәр булды?**

- Әлеге ваҡытта беҙ лицейҙың матди-техник базаһын нығытыу, уҡыусылар һәм уҡытыусылар өсөн комфортлы шарттар булдырыу мәсьәләләре менән күберәк шөғөлләнәбеҙ. Башҡортостандың Беренсе Президенты Мортаза Ғөбәйҙулла улы етәкләгән "Урал" хәйриә фондына рәхмәтлебеҙ: лицейҙың 20 йыллығын заманса ремонтланған, реконструкция эшләнгән, өрәңғыға әүерелгән бинала ҡаршыланыҡ. Барса материалдар, йыһаздар, эштәр Фонд аҡсаһына башҡарылды. Белем йортобоҙ бермә-бер яҡтырып китте. Ашханабыҙ ҙа яңынан ҡоролдо. Уҡыусылар өсөн бильярд, теннис өҫтәлдәре ҡуйҙыҡ, уҡытыусыларға тренажерҙар менән массаж кабинеты астыҡ. Яңыраҡ эстетик зауыҡлы күргәҙмә залы асылды. Эшҡыуар Муса Мәзитовтың хәйриә аҡсаһына һынлы сәнғәт студияһы һәм медиостудия булдырып, барса кәрәкле йыһаздар менән тәьмин иттек.

Яңылыҡтарҙан лицейҙың Мәскәү физика-техник институты менән хеҙмәттәшлек итә башлауын билдәләргә булалыр. Танылған юғары уҡыу йорто Өфөлә физика-математика мәктәбе асырға йыйыныуын белдереп, беҙгә бәйләнешкә сыҡты. Әлегә бәйләнештәр онлайн форматында бара, уҡытыусыларыбыҙ улар ойоштороған вебинарҙарҙа ҡатнаша, улар беҙгә үҙҙәренең программаларын, конспекттарын ебәрҙе лә инде. Лицейҙа был эш әлегә тұңәрәк форматында бара.

Мәктәп үҙе бер ҙур ғаилә кеүек бит ул, һәр кемгә заманса шарттар ҙа, иғтибар һәм ихтирам да кәрәк. Беҙ мәктәптә йылы психологик атмосфера булдыра алдыҡ, тип уйлайым. Уҡыусыларыбыҙҙың барыһы ла тәртипле, тырыштар, махсус иҫәптә торғандар бөтөнләй юҡ. Ниндәйҙер мәктәптәрҙә педагогик кадрҙар етешмәгән хәлдә лә, беҙҙә ундай проблема юҡ: беҙ икенсе урындарҙа эшләгән, беҙҙең талаптарға тура килгән педагогтар резервын булдырҙыҡ. Берәй урын бушаһа, шундуҡ резервтағы уҡытыусыны саҡырып алабыҙ. Уҡытыусыларҙы уҡытыу-тәрбиә процесына ҡағылмаған эштәргә йәлеп итмәйбеҙ, был йәһәттән беҙгә ата-әсәләр даими ярҙам итеп тора.

Һуңғы осорҙа полилингваль мәктәптәр асыу республика мәғарифының трендына әйләнеп бара. Уйлап ҡараһаң, беҙҙең башҡорт гимназиялары һәм лицейҙары күп теллелеккә, йәғни полилингваль мәктәптәр йүнәлешенә юл ярҙы бит инде ул. Алла бирһә, барса эштәребеҙҙе әле бәйән ителгән юҫыҡта дауам итәсәкбеҙ.

**Вәлиәхмәт БӘҘРЕТДИНОВ әңгәмәләште.**

*(Автор 1994 - 1999 йылдарҙа 136-сы Башҡорт лицейы директорының фән һәм методик эштәр буйынса урынбаҫары булып эшләгән).*

*АФАРИН!*

# КИНОЛАРЫ ГРАН-ПРИ ЯУЛАЙ!



**Режиссер, сценарийҙар авторы Фәрзәнә Утарбаеваның фильмдары иғтибар үҙәгенән төшөп ҡалғаны юҡ. Тормош, йәшәү мәғәнәһе тураһында уйланырға, үҙеңдең ғүмереңде күҙ алдынан үткәреп, киләсәккә икенсерәк ҡараш ташларға ярҙам иткән фильмдар төшөрә ул. Һәр геройы кешеләрҙең үҙ-ара мөнәсәбәтен нығыраҡ аңларға ярҙам итә. Кино сәнғәтендә үҙенең йөҙө, һүҙе булған режиссерҙың эштәре берәүҙе лә битараф ҡалдырмай. 30 октябрҙә Краснодарҙа XX "Молодой киновек" халыҡ-ара һәүәҫкәр һәм профессиональ фильмдар кинофестивале еңеүселәре бүләкләнде. Фестивалдә бар донъянан 500-ҙән ашыу фильм ҡатнашты. Ойоштороусылар булып Краснодар крайының Мәҙәниәт министрлығы һәм губернаторы сығыш яһаны. Ә Гран-призы Фәрзәнә Утарбаеваның "Нигеҙ" фильмы яуланы. Ошо уңайҙан еңеүсегә бер нисә һорау бирҙек.**

**➔ Кино сәнғәтенә юлдарҙы берәү ҙә асып ҡуймай. Ул беҙҙең республикала әле саҡ ҡанат нығыта, тип кенә әйтә алабыҙ. Тимәк, ауырлыҡтар ҙа, һынауҙар ҙа етерлек. Ә һеҙҙә кино сәнғәтенә булған һөйөү ҡайҙан?**

- Мин бала саҡтан кино сәнғәте менән ҡыҙыҡһындым. Хатта актриса булыу тураһында ла хыяллана торғайным. Телевизорҙан ул саҡтарҙа "Оскар" кинопремияһын биреү тантанаһын да күрһәтәләр ине бит. Ул таңға табан, төнгө өс-дүрттәрҙә, тура эфирҙа бара, шул сараны ҡалдырмай ҡарап барам, гәзит-журналдарҙан кино йондоҙҙарының һүрәттәренән альбомдар төҙөйөм. Бына шулай кино донъяһынан айырылмай үҫтем, тип әйтә алам.

Өфөгә килгәс, профессиональ камера алдым, артабан "E7E-media" егеттәре Артур Батыршин, Батыр Ғәлимовтар менән клиптар төшөрҙөк. 2015 йылда Өфөлә "Көмөш Аҡбуҙат" халыҡ-ара кино фестивале ойошторҙолар, шунда беренсе башҡорт сценарийҙар питчингы булды, унда мин дә "Ҡайтыу" тигән сценарийым менән ҡатнашып, призлы урын яуланым. Питчингта һин эксперттар алдында үҙеңдең идеяларың менән сығыш яһайһың, уңышлы тип табылһа, улар һиңә артабан ярҙам итә. "Башҡортостан" киностудияһы был фильмды төшөрөр өсөн ҡорамалдар менән тәьмин итте. Һуңынан әлеге сценарийҙы Рәсәй кинематографистар союзының питчингына ла ебәрҙем. "Ҡайтыу" унда тәҡдим ителгән алты йөҙ эш араһынан иң яҡшы ете сценарий иҫәбенә инде.

Артабан уның атамаһы "Ҡырағай"ға әйләнде. 2016 йылда "Ҡырағай"ҙы төшөрҙөк. Төп ролде Гөлли Мөбәрәкова уйнай. Уны фильмға төшөрөп өлгөргәнемә бик ҡыуанам. Ошо бөйөк актрисаның миңә ышанғанына бик рәхмәтлемен.

2017 йылда рус телендә икенсе фильмым сыҡты. Уныһын "Мой лечащий враг" тип атаныҡ. "Ҡырағай" фильмына спонсорҙар эҙләп, "Медстандарт" компанияһы етәксеһе Азамат Рәмзә улы Байтимеровҡа мөрәжәғәт иткәйнем. Ул аҡсалата ярҙам күрһәтте, беҙҙең табиптар менән бәйле берәй фильм да төшөрһәгеҙ ине, тигән тәҡдим яһағайны. Шатланып риза булдым, тиҙ арала сценарий яҙылды. Уны бик оҡшаттылар. Фильмды Халыҡ-ара неврология медицина форумына өлгөртөү кәрәк ине, бер ай эсендә төшөрөп бөтөрөргә тейеш инек. "Ҡырағай"ҙа әсәй менән ул мөнәсәбәте сағылдырылһа, был фильмда атай менән ҡыҙҙың бик ҡатмарлы яҙмышы, мөнәсәбәте тасуирлана. Уңышлы фильм булды.

**➔ Ижадығыҙҙы үҙ итеүселәр, әлбиттә, һеҙҙән тағы ла яңы фильмдар көттө. Ысынлап та, уларҙың өмөтөн аҡланығыҙ. Дәрт менән яңы фильмға тотондоғоҙ. Күп номинацияларҙа еңеү яулаған "Нигеҙ" фильмы нисек тыуҙы?**

- Минең элегерәк яҙылған "Атай йорто" тигән сценарийым бар ине. Уны грантҡа биреп ҡарағайным, үтмәне. Ә былтыр сценарийҙы "Росмолодежь. Гранты" федераль йәштәр программаһы грантына тәҡдим итеп ҡараным, һәм уныш йылмайҙы. 2018 йылда яҙылған был сценарийҙа күп нәмәне үҙгәртеп яҙырға тура килде - донъя ла үҙгәрҙе, мин дә үҙгәрҙем, донъяға ҡарашым да үҙгәрҙе. Гранттан тыш, үҙемдән дә аҡса өҫтәнем, йәнә спонсор таптым. "Башҡортостан" киностудияһы ярҙамы менән "Нигеҙ" фильмын төшөрҙөк. Күгәрсен районы Иртөбәк ауыл совет биләмәһендә урынлашҡан Түләбай ауылында төшөрҙөк уны. Розалия һәм Азат Айыткужиндар фильмды үҙҙәренең атай йортонда төшөрөргә рөхсәт итте. Төп ролдәрҙе Рәсәйҙең атҡаҙанған, Башҡортостандың халыҡ артисы Риф Сәйфуллин һәм Стәрлетамаҡ театры актеры Рәсил Сынбулатов башҡарҙы. Фильмдың ҡуйыусы операторы Дамир Ғәйетҡолов, ҡуйыусы рәссамы Руслан Мәғәлимов, тауыш операторы - Гөлнара Сәйетова.

Беҙ был ауылды оҙаҡ эҙләнек, сөнки эргәһендә кешеләр, машина менерлек бәләкәй генә тауы булған, боронғо матур өйҙәрҙән торған бәләкәй генә ауыл кәрәк ине. Алты районды йөрөп сыҡтыҡ. Өфөнән дә алыҫ булмаҫҡа тейеш, тинек. Сәрүәр Сурина "Күгәрсен районынан ҡарағыҙ", - тип тәҡдим итте. Бына шулай Күгәрсен районына барып юлыҡтыҡ. Түләбай ауыл халҡы ла ныҡ ярҙам итте. Бер аҙна буйы төшөрҙөк. Артабан постпродакшн булды. Апрель айында Мәскәүгә барып, фильмды буяныҡ, тауыш менән эшләүҙе тамамланыҡ. Май аҙағында Өфөлә ябыҡ премьера булды. Әле бына ноябрҙә асыҡ премьера итеп эшләрбеҙ, тип торабыҙ.

Май аҙағында Чебоксарыла үткән фестивалдә лә ошо фильм менән ҡатнаштыҡ һәм ул "тамашасы һөйөүе" номинацияһында еңде. Унда Рәсәйҙең генә түгел, сит илдәрҙең фильмдары ла ҡатнашты. Беҙҙең номинацияла егерме биш фильм ине, һәр бер киноны ҡарарға инер алдынан баһа ҡуйырға тип, тамашасыларға купондар тараттылар. Шул егерме биш фильм араһынан беҙҙең фильм иң юғары балды йыйҙы.

"Нигеҙ" тағы ла бер нисә фестивалдә ҡатнашты. Вологда өлкәһендә, Татарстанда... Көньяҡ Кореяла үткән фестивалдә Ер шарындағы бәләкәй ауылдар, шунда йәшәгән халыҡ тураһында ун биш кенә фильм һайлап алынды һәм шуларҙың береһе - "Нигеҙ". Ойоштороусылар үҙҙәре фильмды корея теленә тәржемә иттеләр, субтитрҙар ҡуйып күрһәттеләр. Тағы октябрь айында Силәбелә үткән фестивалдә лә беҙҙең фильм еңеү яуланы.

**➔ Октябрь айында йәнә лә Краснодарҙа булып, унан Гран-при яулап ҡайттығыҙ. "Нигеҙ" фильмының иң юғары баһаны алырына ышана ингеҙме?**

- Краснодарҙа Ғаилә һәм ғаилә ҡиммәттәренә арналған халыҡ-ара фестиваль ине ул. Был ҙур сара егерменсе тапҡыр үткәрелде. Беҙгә призды Краснодар крайы мәҙәниәт министры Виктория Юрьевна Лапина үҙе тапшырҙы. Эй, Гран-при алырмын тип өмөтләнә инем. Хәйер, бөтөн фильмдарымды ла шундай маҡсат менән эшләргә тырышам. "Нигеҙ" фильмын унда бик оҡшаттылар. Призерҙарҙы бүләкләгәндән һуң, эргәмә килеп: "Хаҡлы баһа, ҡотлайбыҙ!" - тип әйтеүселәр күп булды. Күпме хеҙмәт, һөйөү, күңел һалынды уға. "Фильмың шәп сыҡты бит, унда ниндәй тәрән мәғәнә ята, йәш булыуыңа ҡарамаҫтан, шундай тәрән йөкмәткеле фильмдар төшөрәһең",- тип миңә һәр саҡ ихлас әйтәләр.

Ярославль ҡалаһынан режиссер Владимир Вобликов: "Балалар өсөн берәй драма яҙ әле",- тигәс, "Ку-ку" фильмының сценарийын яҙғайным. Ул фильм да фестивалдәрҙә ҡатнаша, күп призлар йыйып йөрөй. Яңыраҡ ике урында Гран-при алды. Өс ҡыҫҡа метражлы фильмдың режиссеры, дүрт фильмдың сценарисы мин. Хәҙер инде тулы метражлы фильмдар эшләргә ваҡыт, тип уйлайым. "Нигеҙ" фильмы - минең юлымдың башы ғына тип уйлайым.

**Фәрзәнә АҠБУЛАТОВА**

ИНТЕРНЕТТАН



# УЙЛАП ТАБЫЛҒАН АУЫРЫУҘАР

■ Тикшеренеүҙәрҙән күренеүенсә, фармацевтик компаниялар матди килем алыу өсөн "уйлап тапҡан" ауырыуҙарҙың һаны 200-ҙән ашып киткән. Был дарыуҙарҙың күбеһе организмдың йәш итеп һаҡлап ҡалырға теләүсе хәлле кешеләр өсөн тәғәйенләнгән. Иң күп "ауырыуҙар" Америкала уйлап табыла. Мәҫәлән, әгәр ҙә мәктәптә бала үҙен әүҙем тота, күп йүгерә һәм уҡырға теләмәй икән, мәктәп психологы уны хроник психик ауырыуҙар исемлегенә индереп, табип уға мотлаҡ транквилизаторҙар һәм стимуллаштереүсе дарыуҙар тәғәйенләй. Дөйөм алғанда, Америкала йәшәүсе һәм "әүҙем тормош" алып барыусы һәр икенсе кеше антидепрессант курсы үтә. Ә Рәсәйҙә был ысул менән башлыса косметик компаниялар аҡса эшләй.

■ Туҡлыҡлы иртәнге аш кешегә көн дауамында төрлө эштәрҙе башҡарып сығыу өсөн энергия бирә, мейенең дөрөҫ эшләүен тәьмин итә, метаболизмды тиҙләтә. Быларҙың барыһы ла кәүҙәне һомғол көйө һаҡлап ҡалырға мөмкинлек бирә. Иртә - тәм-том менән һыйланыу ваҡыты ла, тип белдерә Тель-Авив университеты ғалимдары. Сөнки был ваҡытта матдәләр алышыныуы яҡшы эшләй һәм артыҡ калориялар шунда уҡ янып юҡҡа сыға. Идеаль иртәнге аш сәғәт 6-нан 8-гә тиклем булырға тейеш. Емеш-еләкте көндеҙге сәғәт 4-тән һуң ашау ҙа зыянлы икән. Йоҡларға ятырҙан ике сәғәт алда бал ҡушылған һөт эсеү сәләмәтлеккә яҡшы тәьҫир итә, ти ғалимдар.

■ Бөтөн донъя һаулыҡ һаҡлау ойошмаһы белдереүенсә, экологик үлем һәм ауырыуҙарҙы булдырыусылар исемлегендә беренсе урында бысранған һауа, икенсе урында тауыш тора. Бәхтинән, тауыш хатта йоҡлаған саҡта ла ҡан баҫымын, стресс гормондары күләмен күтәрә икән. Йәйлап был ауырыуҙар ҡан тамырҙарының тарайыуына һәм йөрәк ауырыуҙарына килтереүе ихтимал.

■ Коннектикут университетында үткәрелгән тикшеренеүҙәр күрһәтеүенсә, организмға саҡ ҡына һыу етешмәй башлаһа, шунда уҡ кәйеф насарая, кәсеҙләк барлыҡҡа килә, фекерләү ҡеүәһе түбәнәйә. Тикшереүҙәрҙең етәксеһе профессор Лоренс Е. Армстронг фекеренсә, ял иткәндә лә, компьютер алдында ултырғанда ла һыу эсергә кәрәк. "Һыуһау тойғоһо беҙ 1-2 процент шыйыҡлыҡты юғалтҡас ҡына барлыҡҡа килә. Әммә был ваҡытҡа организмда һыуһыҙлыҡ һөҙөмтәһендә кире эҙемтәләр башланған була", - ти профессор. Былдай хәл килеп тыумаһын өсөн көнөнә 2 литр һыу эсергә кәрәк.

■ Әфлисунда, грейпфрутта һәм башҡа цитрус емештәре составындағы берләшмәләр ҡатын-ҡыҙҙар араһында инсульт хәүефен түбәнәйтә. Норвичтағы Англия Көнсығыш университеты ғалимдары көндәлек рационы юғары күләмдәге флавондарҙан торған ҡатын-ҡыҙҙар араһында ишемик инсульт менән ауырыу хәүефе 19 процентҡа кәмегән асыҡланған. Флаванондар - флаваноидтарҙың бер төрө, улар башлыса үҫемлектең пигментацияһы өсөн яуап бирә. Флаваноидтарҙың сығанағы булып цитрусылар, еләкемеш, йәшел сәй, ҡыҙыл шарап, ҡара шоколад иҫәпләнә.

ГЕРОЙҘАР ДӘҮЕРЕ



# АЛТЫ БАЛАЛЫ АТАЙ ҘА...

**Ейәнсура районынан һәүәҫкәр бейеүсе Самат Аҙнабаев Махсус хәрби операция биләмәһенә хеҙмәт итергә киткән.**

Республикала күптәр уның бесән сабыусы бейеүен яҡшы хәтерләй. "Сенокос - Ейәнсура" исемле видеояҙма шунда уҡ интернетта таралып, популярлыҡ яуланы. Яҡташыбыҙ Беренсе каналда ла сығыш яһап ҡайтҡайны.

Ейәнсура районы хакимиәтендә белдереүҙәренсә, быйыл Самат Аҙнабаев Оборона министрлығы менән контракт төҙөп, Махсус хәрби операцияға киткән.

- Уның алты балаһы бар, бынамын тигән ғаилә башлығы. Йәшенә ҡарамаҫтан, Самат Аҙнабаев ныҡлы ҡарар ҡабул итте һәм Тыуған илебеҙ һағына баҫты. Башҡорт Үргәне ауылынан дошман менән алышҡан ир-егеттәр күп. Улар менән бәйләнеш тотабыҙ һәм мөмкин тиклем тығыҙ бәйләнештә булырға тырышабыҙ, - тип һөйләне муниципалитет хакимиәте советы секретары Рәмил Мырҙабулатов.

# ҠАТЫНЫ ЛА ЯУҘА

**Өфөлә йәшәүсе "Чиж" позывнойлы яугир әле генә ҡатынын алғы һыҙыҡҡа оҙатып ҡалды.**

Улар икеһе лә "Башҡортостан" мотоуҡсылар полкында хеҙмәт итә. Әле ғаилә башлығы республикала реабилитация үтә, ә ҡатыны отпускынан һуң медицина ротаһы составында йәнә МХО зонаһына юлланды.

- Мин яраланғандан һуң республикала дауаланам. Бөгөн ҡыҙым менән бергәләп әсәйебеҙҙе оҙатып ҡалдыҡ. Ҡатынымдың позывнойы - "Лиса". Ул юғалып ҡалғандарҙан түгел, оло батырлыҡ менән МХО бурыстарын үтәүҙә ҡатнаша. Үҙем дә тиҙҙән сафҡа баҫырмын тип ышанам, - тип һөйләне "Чиж".

# "ТАЙФУН" ҠУШАМАТЛЫ...

**Отпускынан һуң яугирҙарҙы МХО зонаһына оҙатыу сараһында Ҡырмыҫҡалы районы Константиновка ауылынан "Тайфун" ҡушаматлы яугир менән әңгәмәләштек.**

Яугир тыумышы менән Учалы районының Иманғол ауылынан. Урындағы мәктәпте тамамлағас, Учалы ҡалаһында урынлашҡан 98-се һөнәрселек училищеһында ике йыл белем алып, тракторсы-машинист, иретеп йәбештереүсе һөнәрҙәрен үҙләштерә. Артабан ул тракторсы, Учалы тау-байыҡтырыу комбинатында электр-газ менән иретеп йәбештереүсе булып эшләй. Армияла хеҙмәт итә. "Тайфун" Ҡырмыҫҡалы районы ҡыҙына өйләнеп, артабан ошо райондың Константиновка ауылында йәшәй башлай. Өс малай тәрбиәләп үҫтерәләр. "Уныш" йәмғиәтенең алыштырғыһыҙ тракторсыһы була. 2022 йылда Махсус хәрби операция башланғас, етди ҡарарға килеп, үҙ теләге менән контракт буйынса хеҙмәткә алына. Унда ир апрель айынан июлгә тиклем була. Артабан ул өлөшләтә мобилизацияға эләгеп, сентябрҙә ҡулына саҡырыу ҡағыҙы ала. Ләкин күп балалы атайҙарҙы өлөшләтә мобилизация барышында хеҙмәткә саҡырыуҙан азат итеү тураһында ҡарар ҡабул ителгәс, уны кире өйөнә ҡайтаралар. Әммә "Тайфун" Махсус хәрби операция биләмәһендә ҡалған яугирҙар өсөн борсола, уларға мөмкинлек булған һайын шылтыратып, хәлдәрен белешә. Ағымдағы йылдың март айында Рәсәй Оборона министрлығы менән контракт төҙөргә ҡарар итә һәм Махсус хәрби операция зонаһына юллана. "Бер күреп ҡайтҡас, мин унда кәрәгерәкмен, тип уйлайым", - ти яугир. Әлеге көндә мобилизацияла булған егеттәре менән бергә 428-се штурмлаусы полкта разведчик булып хеҙмәт итә. "Хәлдәр төрлөсә була. Махсус хәрби операция зонаһында беҙҙең егеттәр - ысын геройҙар. Улар илебеҙ өсөн генә түгел, һәр беребеҙ өсөн көрәшә. Һуғыш уйын түгел. Ауыр, ләкин бирешмәйбеҙ. Буш ваҡыттар килеп сыҡһа, сәй ҡайнатып эсеп алабыҙ, күңелле мәлдәрҙе иҫкә алабыҙ, бергәләшеп эш эшләйбеҙ. Яҡындар менән телефон аша элемтәгә сығабыҙ, сөнки йыш ҡына шылтыратып булмай. Тыуған яҡтан гуманитар ярҙам даими килеп тора. Бөтә кәрәк-яраҡтар менән тәьмин итеүҙәре өсөн яҡташтарға оло рәхмәтебеҙҙе белдерәбеҙ", - ти яугир.

# ӨС АҒАЛЫ-ҠУСТЫЛЫ

**Ейәнсура егеттәре әленән-әле беҙҙең тыныслығыбыҙ һағында булыусы яугирҙар рәтен тулыландырып тора. Август айында ағайлы-ҡустылы өс ир-егет контракт төҙөп, үҙ теләктәре менән илде һаҡларға йүнәлгәйне.**

Уларҙың Махсус хәрби операция урынына юлланыу тарихын ишетһәң, туғандар араһында бәйләнештең ни тиклем көслө булыуына тағы бер инанаһың.

- Бер туған ағайым Эльмирҙың ҡарарын белгәс, мин дә уның менән бергә барырға булдым. Ике туған ҡустыбыҙ Раян, беҙҙең Махсус хәрби операция урынына юлланасағыбыҙҙы ишеткәс, шунда уҡ: "Һеҙ барғас, мин дә ҡалмайым инде! Барам!" - тине. Бына шулай өсәүләшеп ил һағына юлландыҡ, - ти ғорурланып Илнур Биктимеров.

Өфөлә автобус водителе булып эшләгән Илнур ил һағына баҫҡас та һөнәренә тоғро ҡалған. Тегендә уның бурысы - ҙур тралда ауыр хәрби техниканы төрлө урындарға ташыу.

- Бында килеүем тормошҡа ҡарашымды үҙгәртте. Беҙ шул тиклем тыныс тормошта йәшәйбеҙ, әммә ҡайһы берҙә бының ҡәҙерен белеп бөтөрмәйбеҙ икән. Именлектең ҡәҙерен белергә, уның иң ҡәҙерле ҡиммәт икәнлеген аңларға кәрәк. Был ваҡиғалар күптәрҙең донъяға ҡарашын үҙгәрткәндәр, моғайын, - тип уйланыуҙары менән уртаҡлашты яугир.

Илнурҙы өйҙә ҡатыны Регина, ике ҡыҙы һағынып көтә. Әлегә ике араны телефон бәйләй. Шылтыратыуҙар, видеобәйләнеш һағыныу һағышын баҫа. Әсәһе Хәсибә апай, апаһы Айгөл, кесе туғандары ла яугир өсөн ут йота, шул уҡ ваҡытта уның ҡыйыулығы менән сикһеҙ ғорурлана.

**Айна ИМАНҒОЛОВА.**

АҒИНӘЙ ҺҮҘҘӘРЕ

# КЕШЕ ТӘРТИБЕНӘ ҠАРАП...

## үҙеңдекен төҙәт

- Аяғөҫтө йоҡлап йөрөмә, ат ҡына баҫҡан килеш юшай.
- Белем алып, ғалим булыуҙан алда яҡшы кеше булыуың һәйбәтерәк.
- Кеше тәртибенә ҡарап, үҙеңдекен төҙәт.
- Һүҙ йөҙгә, дөйә ҡойроғо ергә етә яҙҙы, тигәндәй, файҙаһыҙ әңгәмәгә ваҡыт әрәм итмә.
- Ҡоймағына күрә - майын, ҡунағына ҡарап һыйын тап.
- Ҡуян - тауҙа, эт - бауҙа тигәндәй, ғәмһеҙ йәшәмә - бөлөрһөң, йөлсемәҫһең.
- Ҡәҙерләгәндең ҡәҙерен бел, хурлағандың кәрәген бир.
- Гел аҡыл биреүселәргә табынма: үҙ хыял-маҡсаттарыңды оноторһоң.
- Ер өҫтөн тимер ҡаплаһа - ҡазаға, ялған баҫһа - язаға.
- Ҡан ҡайнатырлыҡ асыуың килһә - йоҙроғоң кеҫәнә тыҡ, ут сәсерлек һүҙең булһа - шырпы ҡап.
- Көймә, янма: бала көтһәң - маҙаһы, мал көтһәң - ҡаҙаһы сығып тора.
- Һанда һаяҡ ҡулда таяҡ, тип һелтәнмә: таяғың үҙ башыңа ҡаҡлыҡыр.
- Тәүге уңышһыҙлыҡтан ҡурҡма - алдағы эшеңдә ваҡ уңайһыҙлыҡ тыуҙырыр, тәүәккәл бул.
- Күп йөрөүҙән тау биләне шымарыр, аҡыллыны тыңлаһаң, тәжрибәң артыр.
- Бүҫкә сәйнүк ҡайнағанда бығырҙай, ҡурҡаҡтар йыйындан һуң мығырлай.
- Илен һанламаған ир ҡанлы күҙ йәшен түгер.

**Мөнирә МОНАСИПОВА.**

СӘЛӘМӘТ БУЛ!

# ҠУЛ ЙЫУЫРҒА ОНОТМА!

**Санитар табиптар билдәләүенсә, һуңғы ваҡытта эсәк инфекциялары менән сирләүселәр күбәйгән. Улар йылдың теләһә ҡайһы ваҡытында осрай: вирус йышыраҡ йылдың һалҡын осоронда (респиратор инфекциялар менән сирләү осраҡтары), ә бактериаль инфекция йылы ваҡытта.**

Норовирус инфекцияһы сығанағы клиник яҡтан ныҡ (70 процент) һәм билдәһеҙ (30 процент) формалы ауырыуҙар. Вирус кешенең тиҙәгендә йәки ҡоҫҡологонда була. Инфекция йоҡтороуҙың төп юлдары:

- аҙыҡ-түлек, йыуылмаған йәшелсә йәки емешеләк ашағанда;
- вируслы һыу эскәндә;
- һауыт-һаба, көнкүреш әйберҙәре, йыуылмаған ҡул аша.

Ауырыу билдәләре: күңел болғаныу, ҡоҫоу, эс китеү, баш ауыртыу, биҙгәк, һыуыҡ тейеү.

Сирләп һауыҡҡас, организм вирусҡа тотороҡһоҙ иммунитет булдыра - ул һигеҙ аҙнаға тиклем дауам итә. Һуңынан кешелә йәнә норовирус инфекцияһы барлыҡҡа килеүе ихтимал.

Инфекцияны иҫкәртеү саралары:

- шәхси гигиена ҡағиҙәләрен үтәү, ашар алдынан, туалеттан сыҡҡас, урамдан ингәс, ҡулды яҡшылап йыуыу; ауырығанды белеү менән медицина ярҙамына мөрәжәғәт итеү, ашығыс медицина ярҙамы алыу;
- ҡайнаған һыу эсеү;
- йәшелсәне, емеш-еләкте яҡшы итеп йыуыу, балалар өсөн ҡайнар һыу менән йыуыу;
- аҙыҡты ентекле термик эшкәртеү;
- әҙер ризыҡты оҙаҡ һаҡламау;
- тәбиғәттә йылғанан һыу эсмәҫкә, үҙең менән запас һыу алырға, һыу ингәндә һыуҙы йотмаҫҡа.

**Элина ӘХМӘТОВА.**

# КҮҘГӘ ЗЫЯН КИЛТЕРӘ...

**Компьютер, телевизор, гаджеттарҙы күп ҡулланғаныу күҙҙәрҙе боҙа. Өҫтәмә хәүеф факторҙарына тағы тәмәке, хәрәкәтһеҙ йәшәү рәүеше, йоҡо һәм ҡояш яҡтылығы етешмәү инә.**

Дөйөм күреү үткерлегенең кәмеүенән тыш, катаракта, глаукома һәм башҡа ауырыуҙар күп. Уларҙың барлыҡҡа килеүен булдырмау, күреү һәләтен һаҡлау һәм хатта яҡшыртыу өсөн сәләмәт туҡланыу, витаминдарға һәм микроэлементтарға бай аҙыҡ-түлек ашау кәрәк.

Әммә күҙгә зыян килтереүе ихтимал булған аҙыҡ-түлек тә бар. Республика гигиена һәм эпидемиология үҙәге белгестәре шәкәр миҡдары юғары булған аҙыҡ-түлектең зарары тураһында иҫкәртә. Улар инсулин етештереүҙе арттыра, күҙҙең селтәрсәһенә кире тәьҫир итә. Артыҡ тоҙло аҙыҡ-түлек менән дә мауыҡмау хәйерле, тоҙ катаракта хәүефен арттыра. Алкоголь күреү нервыһына, бауырға зыянлы, ә кофеиндың артыҡ булыуы күҙ эсендәге баҫымды арттыра һәм глаукома барлыҡҡа килеү хәүефе тыуҙыра. Күреү өсөн артыҡ майлы аҙыҡ-түлек тә файҙалы түгел. Улар йөрәк-ҡан тамырҙары ауырыуҙары барлыҡҡа килеү хәүефен арттыра, был иһә күҙҙәрҙең сәләмәтлегенә кире йоғонто яһай. Трансмайҙар (кондитер изделиеларында, чипсыла, туңдырылған ярымфабрикаттарҙа бар) атеросклерозға һәм күҙҙәрҙең ҡан әйләнеше менән проблемаларға килтереүе мөмкин.

# ЯБАЙ СИР ТҮГЕЛ!




**Башҡортостандың Роспотребнадзор идаралығы белгестәре хәүефле сир - пневмонияға ҡаршы көрәш тураһында һөйләне. Ул һулыш алыу аппаратының мөһим өлөшөн - үпкә туҡымаһын зарарлай.**

Сирҙе вирустар, бактериялар һәм бәшмәктәр тыуҙырыуы ихтимал. Йыш ҡына пневмония һалҡын тейҙергәндән йәки гриптан һуң өҙләгәү һөҙөмтәһе булып тора. Шуға күрә тын юлдары инфекциялары билдәләрен иғтибарһыҙ ҡалдырырға ярамай, шунда уҡ табипҡа барырға кәрәк.

Ауырыуға ҡаршы көрәшеүҙең иң һөҙөмтәле ысулы - вакцинация. Пневмококк инфекцияһынан, гриптан, ҡыҙылсанан һәм быума йүтәлдән прививка яһатырға кәрәк. Улар пневмонияның ауыр формалары барлыҡҡа килеү хәүефен кәметә. Айырыуса астма, диабет һәм башҡа хроник сирҙәрҙән яфаланған кешеләргә прививка эшләтеү мөһим.

Профилактика өсөн гигиенаны һаҡларға: ҡулдарҙы йыш йыуырға, йүткергәндә ауыҙҙы ҡапларға, халыҡ күп йөрөгән урындарҙа битлек кейергә кәрәк. Был инфекцияның таралыуына юл ҡуймай.

МОСОЛМАН ӘҘӘБЕ

# КӨНДӘЛЕК ДОҒАЛАР ҺӘМ ЗЕКЕРҘӘР



## ҠАЙҒЫ ҺӘМ ҺАҒЫШ КИЛГӘНДӘ УҠЫЛА ТОРҒАН ДОҒА

Ғабдуллаһ ибн Ғәббәс (разыйаллааһу ғәнһүҙән) әйтеүенсә, Аллаһ Илсеһе (салләллааһу ғәләйһи үә сәлләм) ҡайғылы һәм һағышлы булған сағында ошо доғаны уҡыған:

**Ләә иләәһә илләллааһүл-ғәҙыймүл-хәлиим. Ләә иләәһә илләллааһү Раббуль-ғәршил-ғәҙыым. Ләә иләәһә илләллааһү Раббус-сәмәәүәәти үә Раббул-арды үә Раббүль-ғәршил-кәриим.**

"Әл-Ғәҙым, Әл-Хәлим булған Аллаһы Тәғәләнән башҡа илаһ юҡ. Бөйөк Әл-Ғәрштең Хужаһы булған Аллаһы Тәғәләнән башҡа илаһ юҡ. Күктең Хужаһы һәм ерҙең Хужаһы, һәм Бөйөк Әл-Ғәрштең Хужаһы булған Аллаһы Тәғәләнән башҡа илаһ юҡ" *(Бохари. "Дәғүәт", 27-се бит; Мөслим. "Зекер", 83-сө бит).*

Аллаһ Илсеһе (салләллааһу ғәләйһи үә сәлләм) былай тип өйрәткән:

"Әгәр ҙә һеҙ нимәгәлер борсолһағыҙ һәм ҡайғырһағыҙ, ете тапҡыр ошолай тип әйтегеҙ:

**Аллааһуллааһу Раббии ләә үширику биһи шәй'әә.**

"Аллаһ! Аллаһ - минең Раббым, мин Уға ширек ҡатыштырмаясаҡмын (берәүҙе лә Уға тиңләмәйәсәкмен)".

**"Хәсбийәллааһу үә ниғмәль-үәкииль" әмәәнүн ликүлли хаа'иф.**

"Миңә Аллаһтың булыуы еткән, Ул - иң яҡшы Таяныс!"

**Ләә иләәһә илләллааһүл-хәлиимүл-кәриим. Ләә иләәһә илләллааһу ғәлийюл-ғәҙыым. Ләә иләәһә илләллааһу Раббус-сәмәәүәәтис-сәбғи үә Раббүль-ғәршиль-кәриим.**

"Әл-Хәким, Әл-Кәрим булған Аллаһы Тәғәләнән башҡа илаһ юҡ. Әл-Ғәли, Әл-Ғәҙым булған Аллаһы Тәғәләнән башҡа илаһ юҡ. Ете ҡат күктең һәм Бөйөк Әл-Ғәрштең Хужаһы булған Аллаһы Тәғәләнән башҡа илаһ юҡ".

Әгәр ҙә ошо зекерҙе һәр ваҡыт ҡабатлаһаң, Аллаһы Тәғәлә бәләләреңде менән бәхетһеҙлектәреңде бәхет һәм муллыҡ менән алмаштырыр.

"Мин бер доға беләм, әгәр ҙә ҡыйын хәлгә ҡалған, һары һағышҡа һабышҡан Аллаһ ҡоло уны уҡыһа, Аллаһы Тәғәлә уға был хәлдән сығыу юлын мотлаҡ асасаҡ. Был - минең туғаным Юныстың (ғәләйһиссәләмдең) ҡараңғылыҡта (дәү балыҡтың эсендә) булғанда уҡыған доғаһы:

**Ләә иләәһә илләә әнтә сүбхәәнәкә инниш күнтү минәҙ-ҙаалимиин.**

"Һинән башҡа илаһ юҡ, дан Һиңә, ысынлап та, мин ғәзелһеҙҙәр иҫәбенән булдым" *("Әл-Әнбиә", 87-се бит; Тирмизи. "Дәғүәт", 81-се бит).*

УҢЫШ ҠАҘАН



# ИЗГЕЛЕК ҺӘМ ГҮЗӘЛЛЕК ТУРАҺЫНДА ХАТТАР

## Егерме беренсе хат: "Нисек яҙырға?"

Һәр кеше яҡшы һөйләргә һәм яҡшы яҙырға тейеш. Телмәр, яҙма йәки һөйләү телмәре, уны тышҡы ҡиәфәтенә, үҙ-үҙен тотошона ҡарағанда ла яҡшыраҡ күҙәләндерә. Телдә кешенең интеллигентлығы, теүәл һәм дөрөҫ фекерләй белеүе, башҡаларға ҡарата ихтирамы, уның киң мәғәнәлә "бөхтәлеге" сағыла.

Хәҙер мин яҙма тел тураһында ғына һөйләп үтәсәкмен һәм яҙма телдең үҙем күнеккән төрөнә - ғилми хеҙмәт (дөйөм алғанда, әҙәбиәт ғилеме) менән киң ҡатлам уҡыусылар өсөн тәғәйенләнгән журнал мәҡәләләре телдәренә генә ҡағылмаҡсымын.

Тәү сиратта бер дөйөм иҫкәрмә. Велосипедта йөрөргә өйрәнеү өсөн, унда йөрөргә кәрәк. Яҙырға өйрәнеү өсөн, яҙырға кәрәк! Нисек яҙырға өйрәткән кәңәштәрҙе йыйып алып, шунда уҡ дөрөҫ һәм яҡшы итеп яҙа башлау мөмкин түгел: бер нәмә лә килеп сыҡмаясаҡ. Шуның өсөн дуҫтарығыҙға хаттар яҙығыҙ, көндәлек алып барығыҙ, хәтирәләрегеҙҙе ҡағыҙға теркәгеҙ (быны мөмкин тиклем иртәрәк башларға кәрәк, йәш саҡтан уҡ яҙыу ҙа насар түгел, мәҫәлән, бала сағың тураһында).

Беҙҙә йыш ҡына ғилми эштәр һәм дәреслектәр һутһыҙ тел менән яҙыла, канцелярия әйтелештәренә тулы, тиҙәр. Был йәһәттән бигерәк тә әҙәбиәт ғилеме һәм тарих буйынса эштәргә "эләгә". Күп осраҡта шелтәләр ғәҙел. Ғәҙел, әммә бик үк аныҡ түгел. Яҡшы яҙырға кәрәк, насар түгел! Быны береһе лә кире ҡаҡмай, һәм ҡапма-ҡаршы фекер әйтеүсе лә табылмаҫ. Әммә бына нимә ул "яҡшы тел" һәм нисек итеп яҡшы яҙырға өйрәнергә - был турала беҙҙә һирәк яҙалар.

Ысынында, "яҡшы тел" тигән нәмә юҡ ул. Яҡшы тел - ул һәр ваҡыт ҡулланып булған матур яҙыу оҫталығы түгел. Математика эшенең яҡшы теле, әҙәбиәт ғилеме буйынса мәҡәләнең яҡшы теле йәки повестың яҡшы теле - былар төрлө яҡшы телдәр.

Йыш ҡына былай тиҙәр: "Уның мәҡәләһенең теле һәйбәт, образлы", һәм хатта мәктәптә бирелгән эштәрҙең дә теле образлы булыуын талап итәләр. Шул уҡ ваҡытта телдең образлығы һәр саҡ ғилми телдең яҡшы сифаты була алмай.

Художестволы әҙәбиәттең теле образлы, әммә ғалим күҙлегенән дөрөҫ түгел. Фән бер мәғәнәлекте талап итә, художестволы телдә иһә, тәү урынға күп мәғәнәлек сыға. Есениндың түбәндәге шиғыр юлдарын миҫал итеп алайыҡ: "В залихватском степном разгоне колокольчик хохочет до слез". Беҙҙең алдыбыҙҙа бай йөкмәткеле образ, әммә бер мәғәнәле түгел. Нимә был - ҡыңғырауҙың шат сыңымы? Әлбиттә, ул ғына түгел. Был юлдарҙа күҙ йәштәре телгә алыныуы ла бик мөһим, өҫтән генә уҡығанда был һүҙҙәрҙе ябай фразеологизмға иҫәпләп, эс ҡатҡансы көлөү мәғәнәһендә аңлап, уларға артыҡ иғтибар бирмәҫкә лә мөмкин. Образдың мәғәнәһе контекст ярҙамында ғына аныҡлана һәм шиғырҙың аҙағында ғына аңлашыла: "Потому что над всем, что было, колокольчик хохочет до слез". Бында яҙмыш иронияһы - кеше тормошоноң фанилығынан көлгән яҙмыш темаһы күтәрелә.

Художестволы образды уҡыусы яйлап "сисә". Яҙыусы уҡыусыһын үҙенең ижадында ҡатнашыусыға әйләндерә. Художестволы образдың ошо рәүешле үҙен яйлап асыуы һәм ижади процеста уҡыусының ҡатнашыуы художестволы әҫәрҙең бик мөһим һыҙаты. Беҙ художестволы әҫәрҙе уҡығанда кисергән эстетик ләззәт кенә түгел, ә уның ышандырыу көсө лә ошонан тора. Автор уҡыусыны мәжбүри рәүештә кәрәкле фекергә килергә күндергәндәй була. Ҡабатлап әйтәм, ул уҡыусыны үҙ ижадында ҡатнашыусы яһай.

**Дмитрий ЛИХАЧЕВ.**

ҺАЙ-ҺАЙ-ҺАЙ!

**Ошо көндәрҙә "Башҡортостан" дәүләт концерт залында йылдың иң сағыу сараларының береһе - "Байыҡ" башҡорт бейеүҙәрен башҡарыусыларҙың республика телевизион конкурсының Гала-концерты үтте. Ун етенсе тапҡыр үткәрелгән сараның еңеүселәре билдәләнде. Улар араһында Өфө фән һәм технологиялар университетының башҡорт филологияһы, шәрҡиәт һәм журналистика факультетының бейеү коллективтары үҙ номинацияларында еңеүҙәр яуланы. Ошо уңайҙан конкурс тураһында факультеттың деканы, филология фәндәре докторы, профессор Гөлфирә Риф ҡыҙы АБДУЛЛИНА менән һөйләштек.**

# РУХЛЫ ТАМАША УЛ - "БАЙЫҠ"!



**➔ Һеҙҙең факультеттан бөрәү түгел, өс коллектив "Байыҡ" башҡорт бейеүҙәрен башҡарыусыларҙың республика телевизион конкурсында ҡатнашҡан. Үҙегеҙ факультеттың мәртәбәле уҡытыусылары менән "Шаян ғалимдәр" ансамблен төҙөп, сәхнәгә күтәрелгәнһегеҙ. Нисек ҡатнашырға батырсылыҡ иттегеҙ был конкурста?**

- Факультеттың мәҙәни тормошон йәнләндереү өсөн бер нисә йыл элек "Йәшлек" халыҡ бейеүҙәре ансамблен төҙөнөк. Сөнки факультетыбыҙ һәм университет кимәлендә лә яҙыусы-шағирҙар, дәүләт әһелдәре, йәмәғәт эшмәкәрҙәре, ғалимдар менән бик күп төрлө саралар йыш үтеп тора һәм осрашыуҙарҙы башҡорт мәҙәниәтен сағылдырған сығыштар, йыр-моң, бейеү менән биҙәмәй булмай. Бына шул ваҡытта үҙебеҙҙең бейеү ансамблен булдырыуға ихтыяж тойҙоҡ, бер юлы йәштәрҙе лә бейергә өйрәтергә булдыҡ. "Йәшлек" ансамбленең ҡыҙҙар төркөмөн студентыбыҙ Назгөл Исхаҡова етәкләне, ул хәҙер магистратурала белем ала. Ә егеттәр төркөмө менән ул ваҡытта аспирантыбыҙ, хәҙер инде фән кандидаты, йәш уҡытыусыбыҙ Илнар Байбулов шөғөлләнә. Бына шундай рухлы йәштәр һүҙебеҙҙе йыҡмай, үҙҙәре ойошоп, арттарынан йәштәштәрен эйәртеп, бик матур ғына эшләп киттеләр. Уларға шаяртып ҡына "Инде "Байыҡ"та ҡатнашырлыҡ булдығыҙ", тигәйнек, тағы дәртләнеп киттеләр һәм былтыр был конкурста егеттәр төркөмө - 1-се урын, ҡыҙҙар 2-се урын алып ҡыуандырҙылар. Быйыл "Йәшлек" халыҡ бейеүҙәре ансамбленең ир-егеттәр төркөмө Гран-при яуланы, ә ҡыҙҙар үҙ номинацияһында 3-сө урынға лайыҡ булды.

Факультет уҡытыусылары менән студенттарҙы күтәрмәләп, телевизион конкурстың сәхнәһе артында йөрөнөк, шунда: "Инде үҙебеҙ бейеп ҡараһаҡ та була", - тип шаярттым. Ошо һүҙҙе коллегаларым ҡолаҡтарына һалып ҡуйған икән, быйылғы "Байыҡ" тураһында иғлан ителгәс тә: "Ҡатнашмайбыҙмы ни?" - тиҙәр. Уҡытыусыларҙың башланғысын күтәрмәләп алдыҡ та киттек шулай: "Шаян ғалимдәр" ансамбленә ойошоп, көтмәгәндә 1-се урынға лайыҡ булдыҡ! Ансамблебеҙгә төрлө йәштәге уҡытыусыларыбыҙ ихлас ҡушылды, һүҙемде йыҡманылар, шөкөр. Үҙебеҙҙең йәште, абруйҙы, асылды сағылдырған бейеүҙәр өйрәнергә теләнек һәм уйлап ҡына эш иттек, халҡыбыҙҙың милли йолаларын, тормош-көнкүрешен күрһәтергә, тигән маҡсат ҡуйҙыҡ.

Беренсе бейеүебеҙ халыҡта "Ураҡсылар" тип йөрөтөлә, ә рәсми атамаһы "Көҙгө уныш" тип аталды. Унда көҙгө ураҡ мәлен сағылдырҙыҡ, ҡатын-ҡыҙҙар эш араһында ял иткән мәлдәрендә шаярып, бейеп тә алғандар бит инде, шуны күрһәттек. Ә икенсе бейеүебеҙ "Кис ултырыу" тип аталды, был да элек бик матур йолаларҙың береһе булған. Кейемдәрҙе үҙебеҙ тектек, оҫта ҡуллы уҡытыусыларыбыҙ алъяпҡыстар, яулыҡтар тегеп алып килде, ихлас әҙерләндек. Ансамблебеҙгә бейеү һалышҡан Башҡортостандың атҡаҙанған артисы Марат Солтановҡа бик рәхмәтлебеҙ, ул беҙҙән йөшерәк булһа ла "ағай" тип кенә йөрөттөк үҙен.

Университет тормошо былай ҙа ҡайнап тора, һәр сарала ҡатнашып өлгөргәнә. Беҙҙең "Шаян ғалимдәр" инде башҡа ҡайһы бер коллективтар кеүек бар иғтибарын бейеүҙәр өйрәнеүгә йүнәлтеп, айҙар буйы шөғөлләнә лә алманы, һәр бейеүгә берәр аҙна тирәһе генә ваҡыт бүлә алдыҡ. Әммә ошо минуттар онотолмаҫлыҡ бер матур хәтирәләр бүләк итте: киске сәғәт алтынан һуң бер нисә машинаға ултырып, шаярып-көлөшөп репетиция залына барабыҙ, тирләп-бешеп бейеү өйрәнеп, ауыр эш көнөн "онотоп", физик яҡтан ниндәйҙер бер еңеллек тойоп ҡайтабыҙ. Был коллективыбыҙҙы тағы ныҡыраҡ берләштерергә, дуҫлашырға ла ярҙам итте. Уҡытыусыларҙың һәләттәре асыла, һәр кемдең шәхси сифаттары күренә бына шундай берҙәм эш атҡарған сакта. Кемдер кейем әҙерләшә, кемдер реквизиттар яһай, берәү сәхнәгә сыҡҡанда кәрәкле керпектәр алып килә - шулай тупландыҡ. Үҙем инде күберәк ойоштороу эштәре менән булдым, тәртип яғын күҙәттем. Шул тиклем рәхәт күңел торошо барлыҡҡа килде, үҙенә күрә бик матур ял булды был әҙерлек минуттары.

**➔ "Байыҡ" телевизион конкурсының әһәмиәтен тағы бер тапҡыр билдәләп үтһәгеҙ ине…**

- Был конкурс 17-се тапҡыр үткәрелә, мин һуңғы 7 йылда уның бер Гала-концертын да ҡалдырғаным юҡ, коллектив менән күпләп билеттар һатып алып тамаша ҡылырға күнектек. Йылдан-йыл конкурстың кимәле күтәрелеүен билдәләп китергә кәрәк, ҡатнашыусылар һаны ла арта, географияһы ла киңәйә. Тәү сиратта уны ойоштороусыларҙың - Рита Ришат ҡыҙы Өмөтбаеваның һәм уның коллективының хеҙмәтен юғары баһалап үтеү шарт, улар шул тиклем күп төрлө коллективтар, кешеләр менән оҫта эшләй, ойоштора ала. Ярай беҙ - уҡытыусылар, ойошҡаныраҡ халыҡ. Ә бит унда төрлө йәштәге, төрлө һөнәр эйәләре булған кешеләр күп килә, уларҙың барыһын да ашатыу-йәшәтеүҙәренә тиклем хәстәрләргә, иғтибар бүлеп өлгөрөргә, репетициялар үткәрергә, Гала-концертҡа әҙерләү өсөн әллә күпме көс түгергә кәрәк. Афарин, тиергә һәм һоҡланыу белдерергә генә ҡала.

Тағы ла "Байыҡ" конкурсының бер әһәмиәтле яғын билдәләп үтер инем: ҡатнашыусыларҙың кейемдәренә талаптарҙың ҡәтғи булыуы бик яҡшы хәҡиҡәтте асты: хәҙер сәхнә кейемдәре лә башҡорт халҡының боронғо өлгөләренә ҡарап тегелә, аллы-гөллө гәлсәскәле ялан кеүек сәхнә. Тәүге йылдарҙан айырмалы рәүештә, кейемдәр милли колорит йәһәтенән дөрөҫ тегелә, бейеүселәрҙең төҫтәр, биҙәктәр, тегелеше йәһәтенән белгестәр менән эшләүе күренеп тора.

Гала-концертта бер нисә бейеүҙе бергә ҡушып сығаралар, бында ла һәр белгестен үҙ эшен белеүен күрҙек, 1-2 көн эсендә яңы бейеү һалдылар ҙа ҡуйҙылар. Беҙҙең кеүек һәүәҫкәр бейеүселәр менән эшләүе бик еңел дә түгелдер, әммә өйрәттеләр. Иң мөһиме, "Байыҡ"та коллектив эсендә лә, коллектив-ара ла дуҫлыҡ мөнәсәбәте барлыҡҡа килә, төрлө ерҙәрҙән килгән ҡатнашыусылар менән тынышып-аралашып ҡайттыҡ. Ҡыҙыҡһыныуҙар буйынса танышлыҡтар булдырып бер майҙан, иҫ китмәле матур, рухлы күренеш ул "Байыҡ"!

Тағы ла "Байыҡ" төрлө быуын кешеләрен берләштергән конкурс. Йәштәр, райондарҙа эшләгәндәре лә, баш ҡалала уҡып йөрөгәндәре лә, үҙҙәренең тыуған төбәктәре исемен яҡлап сығыш яһай. Урта һәм өлкән йәштәге һәүәҫкәр бейеүселәр күп, мәҫәлән, быйыл Учалы районынан 75 йәшлек ағинәйҙәр килгән, хатта 80 йәшлек ҡатнашыусы ла бар ине. Өлкән быуын кешеләре араһында йәш саҡтарында бейергә теләп тә, ошондай мөмкинлектәре булмаған, йәшлек хыялы көйөк күңелдәрендә бейеүгә ҡарата һөйөү йөрөткән кешеләр күптәр. Мин үҙемдә лә шундайҙар рәтенә индерәм: бейергә шул тиклем ынтылышым бар ине, әммә өйрәтеүсе булманы. Факультетыбыҙҙың "Йәшлек" халыҡ бейеүҙәре ансамблен дә ойоштороуға ошо үкенесхыялым булышлыҡ итте: ваҡытында беҙҙең мөмкинлек булмаһа ла, йәштәребеҙгә хыялдарын тормошҡа ашырырға булышлыҡ итеү - беҙҙең төп бурыс бит.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Гөлфирә Риф ҡыҙы менән әңгәмәне йомғаҡлап, "Бейей белгән бейеүсенән киннәр", тигән мәҡәлде иҫкә төшөрҙөк. Ысынлап та, "Байыҡ" телевизион конкурсында һәр ҡатнашыусы сәхнәлә оло киннәс кисереп, үҙен бәхетле тойоп, ошо хисте тамашасыларына ла бүлешеп йөрөй бит. Конкурстың ғүмере оҙон булыр, ә унда ҡатнашыусылар тағы ла дәртләнеп, халҡыбыҙҙың хазина өлгөләрен йәш быуынға еткереү, мәҙәниәтебеҙҙе үҫтереү эшенә көсөн һалыр, тигән ышаныста ҡалабыҙ.**

Сәриә ҒАРИПОВА
әңгәмәләште.

## СӘНҒӘТ КӨНДӘЛЕГЕ



### М. Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры

**26 ноябрь "Ете быуын. Һаҡлаусылар"**, спектакль-вербатим. 16+

**27 ноябрь "Заятүләк менән Һыуһылыу"** (М. Ғафури, М. Малухина), башҡорт халыҡ эпосы буйынса. 6+

**28 ноябрь Премьера! "Йырланмаған йырым һин..."** (В. Исхаҡов), музыкаль мелодрама. 16+

**1 декабрь "Һинһеҙ килгән яҙҙар"** (З. Ҡадирова), мелодрама. 18.00 16+

### М. Кәрим исемендәге Милли йәштәр театры

**28 ноябрь "Күктә ике йондоҙом балҡығанда"** (И. Аҫылбаева), моноспектакль. 12+

**29 ноябрь "Ал яулыҡлы тирәккәйем"** (С. Айытматов), драма. 16+

**Премьера! "Рассказы Альфии"** (М. Кәрим), бәхетле бала саҡ. 11.00 0+

**30 ноябрь "Чиполлино"** (Дж. Родари), мажаралар. 12.00 0+

**"Ғашиҡтар көнө"** (Н. Ғәйетбаев), музыкаль комедия. 18.00 16+

**1 декабрь "Сказание о семи батырах"** (Д. Йософ), фэнтези. 12.00 6+

### Башҡорт дәүләт ҡурсаҡ театры

**28, 29, 30 ноябрь "Что такое Новый год?"** (В. Щербакова). 18.00 0+

**30 ноябрь "История одной снежинки"** (В. Аношкин). 12.00, 15.00 0+

**1 декабрь "Удивительное путешествие во времени"** (В. Щербакова), иммерсивный-спектакль. 12+

**"Приключения доктора Айболита и его друзей"** (Д. Гараева). 12.00, 15.00 0+

### Х. Әхмәтов исемендәге Башҡорт дәүләт филармонияһы

**26 ноябрь "Орган королдәре"**, Дмитрий Ушаков һәм Хироко Иноуэ концерты. 6+

**27 ноябрь** Ырымбур муниципаль камерный хор концерты. 6+

### Салауат дәүләт башҡорт драма театры

**29 ноябрь "Глумов"** (А. Островский), пьеса. 12+

**30 ноябрь "Волшебная лампа Аладдина"** (Л. Ниғмәтуллина инсц.), әкиәт. 13.00 0+

### А. Мөбәрәков исемендәге Сибай дәүләт башҡорт драма театры

**"День рождения кота Леопольда"** (А. Хайт, Б. Савельев), әкиәт-мюзиклы 0+ һәм **"Беҙҙең байлыҡ"** (А. Сәсәнбаев), комедияһы 12+ менән

**25 ноябрь -** Стәрлетамаҡ,
**26 ноябрь -** Салауат,
**27 ноябрь -** Стәрлебаш,
**28 ноябрь -** Красноусол,
**29 ноябрь -** Йылайыр ҡала-ауылдарында гастролдәр.

### Стәрлетамаҡ дәүләт театр-концерт берләшмәһе

**29 ноябрь Премьера! "Рәхмәтле мин яҙмышыма"**, Зөлфиә Әүбәкерованың юбилей кисәһе. 6+

**1,2 декабрь Премьера! "Дала буйлап икәү бара"** (Э. Йәнһүҙин), музыкаль комедия. 12+

### БР Милли музейы

**28 ноябрь "Өс таған"** кинофильмы күрһәтелә. 14.00 6+

**29 ноябрь** Ротангтан кашпо үреү буйынса оҫталыҡ дәресе. 14.00 12+

ӘҘӘБИ МАЙҘАН

# МЕҢ ЙЫЛҒА БЕР ТЫУҒАНДАРҘАН



**Башҡорт һәм бөтә күп милләтле әҙәбиәттең бәхетенә күрә, Бөйөк Ватан һуғышының дәһшәтле уты Мостай Кәримде йота алмай. Иҫән ҡалған әҙип яңы башҡорт әҙәбиәтенә нигеҙ һалып, уны бөтә Союз, хатта донъя кимәленә күтәреүсе булып танылa. Әҙипте бил бейеклеккә илткән юл һуғыш йылдарында уҡ ижад иткән шиғырҙарынан башлана, улар төрлө телдәргә тәржемә ителеп, киң танылыу яулай. Үҙе арабыҙҙа булмаһа ла, ижады күңелдәребеҙҙә мәңгелеккә урын алған Мостай Кәримдең тыуыуына 105 йыл тулды быйыл. Ошо айҡанлы Башҡортостан буйлап бихисап саралар теҙмәһе ойошторолдо, шуларҙың береһе - Өфө фән һәм технологиялар университетында үтте.**

Башҡортостандың халыҡ шағиры Мостай Кәримдең иҫтәлегенә бағышланған сарала Өфө фән һәм технологиялар университеты проректоры Илгиз Ҡәҙерғолов, БР мәғариф һәм фән министры урынбаҫары Әлфиә Ғәлиева, БР Яҙыусылар берлеге идараһы рәйесе урынбаҫары Тәнзилә Дәүләтбирҙина сығыш яһаны һәм һәр кем Мостай Кәрим ижадының һәр быуын кешеһе өсөн ни тиклем ҡәҙерле булыуын билдәләп үтте. Башҡортостандың халыҡ шағиры Ҡәҙим Аралбай бөйөк әҙипкә бәйле хәтирәләргә бирелеп, уға арналған шиғырын да уҡып үтте. Ә бына шағирҙың ҡыҙы Әлфиә Кәримова атаһының оло кинәнес менән ижад итеүе тураһында һөйләһә, билдәле тележурналист, Рәсәй Федерацияһының атҡаҙанған сәнғәт эшмәкәре Шәүрә Ғилманова бөйөк шағирҙың ижадын өйрәнеүгә иғтибар йүнәлтте.

- Бөгөн, ысынлап та, республикабыҙ, университетыбыҙ, башҡорт йәмәғәтселеге өсөн тарихи мәл. Ошо залдан Мостай Кәрим йәш быуынға ҡарап нисә тапҡыр өндәште икән? Ул бит беҙҙең университетҡа бик йыш килгән әҙиптәрҙең береһе ине. Ошо матур хисте беҙ ай дауамында үҙебеҙҙең студенттарға күсерергә ынтылдыҡ. Студенттар ай дауамында төрлө конкурстарҙа, викториналарҙа ҡатнашты, инсценировкаларҙы сәхнәләштереү буйынса репетицияларға йөрөнө. Башҡорт балалары Мостай Кәримде былай ҙа белә, шуға Рәсәйҙең төрлө төбәктәренән, сит илдән килгән балаларҙы мотлаҡ рәүештә уның ижады, шәхесе, рухы менән таныштырырға тейешбеҙ, тигән бурыс алғанбыҙ. Унан да юғарыраҡ бурыс - йәштәрҙең күңеленә рухиәт орлоҡтары сәсеү, - тине башҡорт филологияһы, шәрҡиәт һәм журналистика факультеты деканы, филология фәндәре докторы Гөлфирә Абдуллина.

"Бөйөк гуманист Мостай Кәрим" тигән әҙәби-музыкаль композиция сараның төп биҙәге булды. Был донъяға һүҙ менән йәм һәм төҫ килтергән рәссамдың гуманизмы ниҙә сағыла? Был һорауға яуап ябай: ул яуызлыҡҡа дошман булырға ҡурҡмаған. Мостай Кәрим әҫәрҙәренә кешелекһеҙлек, яуызлыҡ һәм йәбер донъяһы менән килешмәү, социаль ғәҙеллек көсәү, берҙәм йәмғиәттең бөтә кешелек идеалдары өсөн көрәш рухы хас. Бына ошоларҙың барыһын да әҙәби-музыкаль композиция үҙ эсенә алғайны. Тамашасыларҙы Азамат Тимеров, Сәйҙә Ильясова, Рәм Гәрәев ижады әсир итте, "Йәшлек" халыҡ бейеүҙәре ансамбленең дәртле сығыштары күңелдәрҙе елкендерҙе.

Шулай уҡ факультет студенттары "Туй дауам итә" тигән театрлаштырылған тамаша тәҡдим итте: 1947 йылда Мостай Кәрим был әҫәре менән драматургияла тәү тапҡыр үҙ көсөн һынап ҡарай. Бөйөк Ватан һуғышының фажиғәләрен, ауыр юғалтыуҙар аша яуланған Бөйөк Еңеү хаҡының ҡиммәтен үткер сағылдырған был әҫәрҙең бөгөн дә көнүҙәк булыуын күрһәтергә тырышҡан йәштәр.

- Шағирҙарҙың баһаһын, йылдар үткәс, заман үҙе бирә. Кемдәрҙер балҡып килеп инә лә, һүнеп, юҡҡа сығып ҡуя, кемдәрҙер әкрен-әкрен генә ижад күгенә күтәрелә бара һәм был йондоҙҙар, йылдар үткән һайын, сағыуыраҡ яна - ижади яҙмыштар шулай төрлөсә. Ә Мостай һымаҡтар йөҙ йылғамы, мең йылғамы бер тапҡыр тыуа, шуға күрә Мостайҙы ҡабатларлыҡ, Мостай кимәленә күтәрерлек шағирҙар бөгөн бар, тип әйтә алмайым. Уның ижадын бәхетле йә бәхетһеҙ саҡта ла, көрсөк кисергән мәлдәрҙә лә уҡып, үҙенә көс алаһың һәм үҙ хәленә баһа бирәһең: был хәл-күренеште ошолай ҙа баһаларға мөмкин! Гөмүмән, Мостай Кәримдең үҙе үткән тормош юлы ла, ғүмере буйы тир түккән ижад юлы ла һәр кемгә өлгө булып торорлоҡ. Шуға уны ентекле уҡып, был тормошто хатаһыҙыраҡ йәшәргә һәм йәмғиәткә, йәшәйешкә ҡараштарҙы донъяның ҡояшлы яғында торған ошо яҡты күнелле, бөйөк гуманистың позицияһынан сығып ҡорорға кәрәк, бигерәк тә йәштәргә, - тип йомғаҡ яһаны Мостай Кәрим ижады буйынса теҙәлгән әҙәби-музыкаль композицияны әҙерләгән уҡытыусы-етәксе Гөлфирә Гәрәева.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Бәлки, кемдер бөйөк кисерештәр заманындағы ижадсыларға ҡарағанда, тыныс тормошта ижад иткән шағирҙарға хөрмәт бик тәтемәй, тип тә уйлайҙыр. Ләкин нишләп башҡорт әҙәбиәтенең башында нәҡ Мостай Кәрим тора һәм тыныс ваҡытта әҫәрҙәр тыуҙырыу уға ижади Олимпҡа менергә ҡамасауламаған? Бәлки, ул кисергән тетрәнеүҙән сәселгән осҡондар бөйөк ижад ялҡынына ут төрткәндер, һәм шул ялҡындың йылыһы әле лә беҙҙе йомарт ҡояш кеүек йылыталар?..**

Рәзил ШӘМСЕТДИНОВ,
Өфө фән һәм технологиялар университеты студенты.

# КИМӘЛЛЕ УҠЫУСЫ КӘРӘК!

**"Шағир тыуҙы!" 1962 йылда Яҙыусылар союзында Рәшит Назаровтың тәүге йыйынтығын тикшергән ваҡытта күренекле шағир Назар Нәжми шулай тип ҡысҡырып ебәрә. "Талант табылды, талант!" тип түҙемһеҙләнеп коридорға сығып һөрәнләй әҙип. Һуңыраҡ Назар Нәжми был хаҡта "Аяғүрә" тип аталған мәҡәлә яҙа.**

Ысынлап та, ул осорҙа, унан һуңғы 80-90-сы йылдарҙа ла башҡорт әҙәбиәтенә йәштәр тулҡын-тулҡын булып килә. Бөгөн иһә, томан араһында Тансулпандарҙы, Айгөлдәрҙе, Сәсәнбайҙарҙы күргәндәй булам, тип яҙғайны бер мәҡәләһендә танылған яҙыусы Мөнир Ҡунафин. Томан йәлап тарала башланы, тиергә мөмкиндер. Мәҫәлән, күптән түгел йәш шағирә Айгөл Йәмилеваның яңы йыйынтығы донъя күрһә, йәш ижадсы Айбулат Сәсәнбаев әҙәбиәт һөйөүселәргә "Патриот бабай" тип аталған романы менән ҡыуандырҙы. Айбулатҡа ҡарата иһә, яҙыусы тыуҙы, тип оло баһа бирҙе шағир Әхмәр Үтәбай "Башинформ" агентлығы журналисы менән әңгәмәлә.

Айбулат Сәсәнбаев республикабыҙҙа бығa тиклем бер нисә шиғри йыйынтығы донъя күргән, Сибай сәхнәһендә пьесаһы ҡуйылған оҫта ижадсы булараҡ танылғайны инде. Күренекле яҙыусы Гөлсирә Ғиззәтуллина "Башинформ"ға биргән интервьюһында Айбулаттың яҙыусы булып өлгөрөүе хаҡында һөйләне:

- Башҡорт әҙәбиәтенең киләсәге юҡ, тип әйтеү мөмкин түгел, шәп яҙыусылар бар, хәҙер беҙгә кимәлле уҡыусылар кәрәк. Мәҫәлән, быйылғы йәйемдә "Инеш" нәшриәтендә баҫыуға әҙерләнгән китаптарҙы уҡып үткәрҙем. Улар араһында Айбулат Сәсәнбаевтың романы ла бар ине. Йәш ҡәләмдәшем Бөйөк Ватан һуғышы осорондағы тарихи ваҡиғаларҙы, ҡытайҙарҙың характерын, шул осорҙағы тормошто образдар аша бик матур итеп асҡан. Мөхәррирләгән ваҡытта уҡып-уҡып ҡарайым, ҡайһы бер һүҙбәйләнештәр бер-берәһенә тура килмәгән, бәйләнеше юҡ кеүек. Ҡәләм алып төҙәтергә ынтылам һәм шул килеш ҡалдырам, үҙенсәлекле тел менән яҙылған. Ошоноң менән ул ысын яҙыусы. Егеттең үҙенә генә хас үҙенсәлекле стиле барлыҡҡа килергә тора. Романды уҡып, бик ҡыуандым, - тип билдәләне Гөлсирә Ғиззәтуллина.

Инсаф ХУЖАБИРГӘНОВ.

АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# АҪЫРТЫН АҪТАН КИҪӘ...

## өҫтән ялғай

Тура һүҙ таш яра, ялған һүҙ баш яра.
**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

Иртәнге ҡояшҡа һәм яҙҙарға нисек ҡыуанғанығыҙға ҡарап, үҙ һаулығығыҙ тураһында фекер йөрөтөгөҙ.
**(Генри Торо).**

Үҙ хәленә шөкөр итеүгә өлгәшеүе барыһына ҡарағанда ла ауырыраҡ, сөнки үҙең тураһында яҡшы уйларға тырышыуҙар иң һуңынан " үлә" бит...
**(Томас Элиот).**

Наҙан, аңра кешеләргә башын иҫәрлеккә һалып, нисек теләй - шулай ҡыланыу, ни теләй - шуны һөйләү енелерәк бирелә.
**(Зигмунд Фрейд).**

Американа - "Хәлең нисек?" тип, Европала "Һин кем?" тип һорау ғәҙәти хәл.
**(Граффити).**

Мөхәббәт хакимлыҡ иткән урында Көстөң хакимлығына урын ҡалмай, ҡайҙа Көс хакимлыҡ итә, унда Мөхәббәткә урын юҡ.
**(Карл Юнг).**

**Шулай итеп, тағы бер риүәйәт: "Конфуцийҙың Гун, Лу һәм Чжан исемле өс уҡыусыһы булған. Донъя гиҙеп йөрөүсе бер дәрүиш аҡыл эйәһенән һорай ҡуйған:**

**- Һеҙ Гун исемле уҡыусығыҙ тураһында ни әйтерһегеҙ?**

**- Хатта ғалимдар Гундың аҡылына һоҡлана!- тигән Конфуций.**

**- Ә Лузың ниндәй матур сифаттары бар?**

**- Танылған яугирҙарҙың батырлығы ла Луныҡына тиңләшә алмай!**

**- Ә өсөнсө уҡыусығыҙ тураһында ни әйтерһегеҙ?**

**- Чжандың егәрлеге иң оло маҡтауға лайыҡ! - тигән Конфуций.**

**Уҡытыусының уҡыусылары тураһында былдай маҡтаулы һүҙҙәрен ишеткәс, дәрүиш бик ныҡ аптыраған һәм:**

**- Һуң Гуан шул тиклем аҡыллы, Лу шул тиклем батыр, ә Чжан шул ҡәҙәре егәрле булғас, улар тағы нимәгә өйрәнә һеҙҙән? - тип һораған.**

**- Улайһа, тыңла, - тигән Конфуций. - Гун аҡыллы, ләкин ялҡау. Лу батыр, ләкин дауамал. Чжан егәрле, ләкин көнсөл.**

**Гун ялҡау кешегә аҡыл ғына бәхет килтермәйәсәген белмәй. Лу иһә, һаҡ булмаһаң, батырлыҡтың үлем менән тамамланыуы ихтимал икәнен күҙ алдына ла килтермәй. Чжан көнсөллөк эргәһендә шатлыҡ йәшәмәй икәнен белмәй. Ошо хәҡиҡәткә өлгәшмәй тороп, мин был егеттәрҙең уҡытыусыһы, улар минең уҡыусым булыуҙан туҡтамаясаҡбыҙ..."**

"Киске Өфө" гәзитен ойоштороусы:
Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте
Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мирасты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы
№ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

Баш мөхәррир:
Гөлфиә Гәрәй ҡыҙы ЯНБАЕВА.
Мөхәрририәт:
Сәриә ГАРИПОВА,
Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ,
Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА,
Артур БАТЫРШИН.

Редакция һәм нәшер итеүсе адресы:
450005, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1
Беҙҙең сайт: www.kiskeufa.ru
E-mail: kiskeufa@mail.ru
ЯСЙ "СПУТНИК-ЮГ" типографияһында баҫылды. Тел.: 8 (967) 744-77-33. (453400, БР, Дәүләкән ҡалаһы, Мәжит Ғафури ур., 4 й., 203 офис).

Телефондар:
Баш мөхәррир 253-25-44
Хәбәрселәр 252-39-99
Матбуғат таратыу 252-39-99

Ҡул ҡуйыу ваҡыты -
21 ноябрь 17 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 14 сәғәт 30 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте 253-25-44 телефоны буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.

«Киске Өфө»нөң индексы – ПР905

Тиражы - 2750
Заказ - 2056